ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# Киске Өфө
28-4 ноябрь - декабрь (ҡырпағай - аҡъюлай) 2025
№47 (1191)
kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Алтынға иҫтәре киткән...**



6,13

**Башҡорт теле - яугирлыҡ теле лә...**

Беҙ яуҙа шуға ла инандыҡ



8-9

**Юғарынан алыҫыраҡ күренә**



12

**Халҡыбыҙҙың...**

рухи көсөн ишәйтеүгә өлөш индереүселәр



15

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

***Ҡиәмәт көнөндә беҙҙән нимәләр уҡыуыбыҙ тураһында түгел, ә нимәләр ҡылыуыбыҙ тураһында һораясаҡтар. Әммә кешенең тормошонда ни ҡылыуы йыш ҡына уның нимә уҡыуына ла бәйле бит.***
***(Фома Кемпийский).***

МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

# УҠЫМАЙҺЫҒЫҘ! УҠЫЙЫҠ!

**Берҙән-бер көн килеп: "Хәҙер инде туған телдәге ҡағыҙ баҫмалар нәшер ителмәйәсәк, улар электрон баҫмаға әүерелә йә бөтөнләй ябыла", - тигән хәбәр еткерһәләр, нисегерәк ҡабул итер инегеҙ икән, йәмәғәт? Эйе, кемдер был хәбәрҙе ауыр күреп, борсолоуын белдерер; кемдер иһә "Шулай икән дә..." тип һүҙыр һәм битараф ҡалыр; "ҡылыс болғап", был хәлде төҙәтеү өсөн ниндәйҙер сара күрергә саҡырыусы берәйһе лә табылыр, моғайын. Эйе, эйе, ҡағыҙ баҫмаларһыҙ йәштәргә лә тура килеүе бар әле беҙгә...**

Беҙ, мөхәррирҙәр, гәзит-журналдарға яҙылыу хаҡтарының йылдан-йыл ҡиммәтләнә барыуына, бигерәк тә почта бүлексәләренең эшендәге етешһеҙлектәргә зарланабыҙ зарланыуға. Әммә был ғына сәбәпсеме икән гәзит-журналдарыбыҙҙы ябылыу сигенә, тираждар кәмеүгә еткергән хәлгә? Сәбәбе был ғына түгел! Сәбәпсеһе - туған телде һанламау, "уҡыу" тигән ғәжәп матур ғәҙәттән төңөлөү, әлбиттә. Балалар, йәштәр тураһында әйтеп тораһы ла түгел, ғүмер буйы ҡағыҙ баҫмаларҙан айырылмаған өлкән, урта быуын кешеләре лә ситләшә бит китап, гәзит уҡыуҙан. Ә бит улар теге быуаттың 80-се йылдар аҙағында, 90-сы йылдар башында яңынан-яңы башҡорт телендәге гәзит-журналдар сығыуын талап итеүселәр быуынынан. Шул талапҡа яуап итеп, "Йәшлек", унан һуң беҙҙең "Киске Өфө" гәзиттәре, "Шоңҡар", "Аҡбуҙат" журналдары, республика райондарында, ҡалаларында ла башҡорт баҫмалары барлыҡҡа килгәйне. Тик уларҙың барыһы ла хәҙер көрсөк алдында. Сөнки уларҙы уҡыусылар "интернет" тигән заман шауҡымы ауына инеп уралды ла, шунан ҡотола алмай, ҡотолорға теләмәй ҙә. Сөнки улар интернет киңлегендәге күп һанлы, дөрөҫ йә ялған, яҡшы йә насар мәғлүмәттәр ҡоллоғонда. Тик улар быны үҙҙәре аңламай. Интернет уларҙың аңын дөрөҫ булмаған юҫыҡҡа көйләгән...

Аң ғына түгел, тән сәләмәтлеге лә зыян күрә бит уҡыу ғәҙәтен онотоуҙан. Тағы ҡабатлайым әле: ғалимдар йәшлекте, хәтерҙе һәм теүәл аҡылды һаҡлар өсөн көн дә... бер генә бит булһа ла китап, гәзиттә берәй мәҡәлә уҡырға кәрәк, ти. Аҡ ҡағыҙ битенән уҡығанда беҙҙең мейе лә, тойғолар сығанағы булған йөрәк тә күнекмәләр яһай, имеш. Ғалимдар тағы ла, беҙҙең асылыбыҙ дүрт үлсәмдән - тән, аҡыл, йөрәк һәм рухтан тора, ти. Ошо дүртәүҙе уятып, беҙ бер бөтөнгә әйләнәбеҙ. Уларҙы ана шул китаптан, гәзиттән уҡылған аҡыл аша ғына уятып була, имеш. Ә кемдәрҙер аҡ ҡағыҙҙан айырылып, фекерләү, шулай уҡ уйлана, аҡыллы һығымталар яһау ҡеүәһен дә юғалта бара. Уның сәбәбе уҡымауҙа ла инде!

Уҡымауҙың наҙанлыҡҡа илтеүе тураһында тағы бер миҫал. Интернетта йөрөй был "Быуындар деградацияһы" тигән видео. "Мисс России" титулына эйә булған ҡатын-ҡыҙ әсәләргә һорауҙар бирә журналист. Ленин кем ул? Леннон кем? "Идиот" романын кем яҙған? Ер Ҡояш тирәләй әйләнәме, әллә - киреһенсәме? Ошондайыраҡ ябай ғына һорауҙарҙың береһенә лә яуап бирә алмай бәйгелә ҡатнашыусы йәш әсәләр. Иң аптыратҡаны шул: журналист бәйгенең төп еңеүсеһенә, үҙе балалар үҫтергән Анна исемле йәш әсәгә һорау бирә: "Кем ул Агния Барто?" "Белмәйем, минең кеүек әсәй кешелер" - була яуап. "Ә Самуил Маршак кем?" "Белмәйем..."

Балалар, йәштәр араһында үткәрелгән төрлө конкурс-бәйгеләрҙә лә күҙәтелә был хәл. Хәҙерге быуын уҡымай, тигәнгә тағы бер раҫлау түгелме ни былар!

Әлбиттә, совет мәктәбендә уҡыған быуын кешеләре башлыса ҡағыҙ баҫмалар, китаптар уҡый әле. Ләкин ул быуын китеп бөтһә, нимә, был донъяла уҡымаусы, интернет киңлегендәге ялған һәм сүп-сар мәғлүмәттәр араһында аҙашып йөрөүсе наҙандар ғына ҡалырмы? Ҡурҡыта, бошондора бит әле, йәмәғәт.

Ҡыҫҡаһы, уҡыйыҡ. Уҡығандар был матур ғәҙәтте балаларға, йәштәргә лә йоҡторһон. ***Әле быма 1 декабрҙән 10-на тиклем ташламалы 905 һум 04 тингә яҙылып ҡалығыҙ ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә лә.*** Кило ярым ит, кило ярым кәнфит, кило ярым печенье хаҡы был. Уларҙы бер-ике ултырыуҙа ашҡаҙанығыҙ аша эшкәртеп бөтһәгеҙ, гәзит аша килгән хәбәрҙәр ярты йыл буйы йөрәгегеҙгә рухи аҙыҡ булып ағылыр, дәртләндерер, уйландырыр, бик күп һорауҙарығыҙға яуап бирелер.



Квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә матур ***китаптар*** аласағы тураһында ла иҫтә тотоғоҙ. Әйҙәгеҙ!

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!



*"Бөгөнгө заманда кеше китап уҡыймы ни", тигәндәргә йәлләп ҡарайым мин. Йәнәһе, мәғлүмәт быуатында йәшәйҙәр, шуға ла яңылыҡтарҙы тиҙерәк тапшырыу мөмкинлегенә эйә булған интернеттан ғына уҡыйҙар. Белгең килһә, уҡыу мәғлүмәт кенә бирмәй, ул хәтерҙе үҫтерә һәм, иң мөһиме, һине тәрбиәләй. Шуға ла бик китап уҡырға ваҡытың булмаһа, гәзит уҡы, тигән кәңәш бирә йөрөйөм эргә-тирәләгеләргә. Бар матбуғат баҫмаларын уҡырға өлгөрмәйһең икән, "Киске Өфө"нө генә булһа ла уҡы, уның биттәрендәге мәғлүмәт бер ҡасан да иҫкермәй, улар ана шул тәрбиәүи йүнәлештә булыуы менән дә ҡәҙерле. "Интернеттан уҡыйым бит мин, апай", тип мине тынысландырған йәштәргә шуны әйтер инем: ул уҡыуығыҙ уҡыуға һаналмай! Ҡасандыр кеше яҙма уйлап тапҡан, уҡырға өйрәнгән, йәғни, аңы камиллашҡан, үҫкән. Хәҙер һеҙ көнө-төнө интернетта ултырып, аңығыҙҙы кирегә көйләйһегеҙ. Шуға ла уҡыу мәҙәниәтен ҡайтарырға кәрәк беҙгә.*

*Дилбәр ХӘКИМОВА.*

12+

✓ *"Һәр йәш кешенең Башҡортостанда үҙен күрһәтеү мөмкинлеге булһын өсөн тырышабыҙ. Тыуған төйәгегеҙ һеҙгә шәхси үсеш һәм сифатлы, ҡыҙыҡлы тормош өсөн мөмкинлектәр тәҡдим итә", - тине Башҡортостан Башлығы.*



ҠЫҪҠАСА

# МӘСКӘҮҘӘ ОСРАШЫУ

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙең мәҙәниәт министры Ольга Любимова менән осрашты.** Министр республикала мәҙәниәт өлкәһенең һөҙөмтәле эшләүен билдәләне. Республика етәксеһе мәҙәниәттең ижтимағи тормошта мөһим роль уйнауын һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Республикала 4 меңгә яҡын мәҙәниәт учреждениеһы бар, уларҙа 11 мең самаһы кеше эшләй. Тап улар йәмғиәтебеҙҙең күңел торошон билдәләй, шуға күрә беҙ был өлкәне үҫтереүгә етди ҡарайбыҙ, - тине Радий Хәбиров. Фекер алышыу барышында Өфө дәүләт циркын яңыртыу, республиканың Дәүләт академия рус драма театрын реконструкциялау, Йәш тамашасы театры урынлашасаҡ "Еңеү" кинотеатрын капиталь ремонтлау, шулай уҡ "Өфө-2" ҡалаһы археологик ҡомартҡыһы биләмәһендә депозитарий төҙөү проекттары ҡаралды. Башҡортостан Башлығы республиканың ошо башланғыстарҙы тормошҡа ашырыу буйынса әүҙем эш алып барыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

✓ **Башҡортостанда алдағы өс йылға төбәктең үсеш прогнозы иғлан ителде.** Республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары - иҡтисади үсеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов төбәктең 2026 йылға һәм 2027-2028 йылдарҙың план осорона социаль-иҡтисади үсеш прогнозы менән таныштырҙы. Билдәләнеүенсә, Башҡортостандың тулайым төбәк продукты 2028 йылда иҡтисадтың бөтә өлөштәрен иҫәпкә алып 3,6 триллион һум кимәлендә көтөлә. Өс йыл эсендә үсеш яҡынса 12 процент тәшкил итәсәк. 2028 йылға уртаса айлыҡ эш хаҡы 98,4 мең һумға етәсәк. Дөйөм эшһеҙлек кимәле 2028 йылда 1,5 процентҡа тиклем кәмейәсәк. Башҡортостандың тулайым төбәк продукты күләме 2026 йылда 3,154 триллион һум тәшкил итеүе ихтимал, был иһә 2025 йылда көтөлгәндән 3,9 проценттан күберәк.

✓ **Башҡортостан умартасылары "Рәсәйҙең алтын балы-2025" Бөтә Рәсәй конкурсында ике алтын, өс көмөш һәм ике бронза миҙал яуланы.** Был хаҡта республика Ауыл хужалығы министрлығынан хәбәр иттеләр. Еңеүселәрҙе һәм призерҙарҙы бүләкләү тантанаһы Краснодарҙа "Югагро" халыҡ-ара ауыл хужалығы күргәҙмәһендә үтте. Башҡортостан умартасыһы Артём Черников дүрт наградаға лайыҡ булды. Яҡташыбыҙ төрлө үҫемлектәрҙән йыйылған бал өсөн - алтын һәм көмөш, йүкә балы өсөн көмөш һәм бронза миҙалдар менән бүләкләнде. Башҡортостандың тағы бер умартасыһы Йәлил Хәкимов та йүкә балы өсөн - алтын, ҡатнаш бал өсөн көмөш миҙалдарға лайыҡ булды. Марат Иҙрисов иһә республикабыҙға ҡарабойҙай балы өсөн почетлы бронза миҙал алып ҡайтты.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ТЫУҒАН ЯҠ МЕНӘН ҠЫҘЫҠҺЫН!



**Мәскәүҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Рәсәй халыҡ хужалығы һәм дәүләт хеҙмәте академияһында "Яҡташ" йәштәр форумында ҡатнашыусылар менән осрашты.**

Осрашыуға Башҡортостандан 700-ҙән ашыу студент килде, улар барыһы ла Мәскәүҙең юғары уҡыу йорттарында уҡып йөрөй. Республика етәксеһе Башҡортостандан ситтә юғары уҡыу йорттарын тамамлаусылар менән республика араһында бәйләнештәрҙе нығытырға кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Был төбәктең дөйөм стратегияһының мөһим элементы булып тора, ул йәш профессионалдарҙы тыуған яҡҡа ҡайтарыуға һәм юғары квалификациялы белгестәрҙең быуындар күсәгилешлелеген тәьмин итеүгә йүнәлтелгән. Мин һәм командам һәр йәш кешенең Башҡортостанда үҙен күрһәтеү мөмкинлеге булһын өсөн тырышабыҙ. Тыуған төйәгегеҙ һеҙгә шәхси үсеш һәм сифатлы, ҡыҙыҡлы тормош өсөн мөмкинлектәр тәҡдим итә", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

Радий Хәбиров әйтеүенсә, студенттарҙың Башҡортостан Башлығы, Хөкүмәт Премьер-министры, Дәүләт Йыйылышы рәйесе, министрҙар менән осрашыуы ныҡлы шәхси бәйләнештәр булдырыуға һәм йәштәрҙең тыуған яғына ҡыҙыҡһыныуын нығытыуға булышлыҡ итә. "Беҙ шулай уҡ һеҙҙе сәнәғәт предприятиелары, мәҙәни объекттар һәм фәнни үҙәктәр буйлап экскурсияларға саҡырабыҙ. Унда һеҙ бизнес вәкилдәре һәм һәләтле йәш хеҙмәткәрҙәрҙе йәлеп итергә теләгән ҙур предприятиелар менән осраша алаһығыҙ. Шулай уҡ "Башҡортостандан һөйөү менән" гуманитар проекты сиктәрендә студенттар туғандарынан һәм яҡындарынан даими рәүештә хаттар, посылкалар һәм тәмле бүләктәр алыуҙы дауам итәсәк", - тине Радий Хәбиров.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# ЮЛ СЕЛТӘРЕ ҮҪЕШӘ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров етәкселегендә республика делегацияһы Мәскәүҙә XIX "Рәсәй транспорты" халыҡ -ара форумында ҡатнашты, тип хәбәр иткәйнек. 20 ноябрҙә сара сиктәрендә Радий Хәбировтың Рәсәй Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Марат Хөснуллин менән осрашыуы булды.**

Һөйләшеү барышында Башҡортостанда милли проекттарҙы тормошҡа ашырыу, шулай уҡ төбәк биләмәһендә эре инфраструктура объекттарын төҙөү барышы тикшерелде. Вице-премьер республиканың төҙөлөш һәм транспорт тармаҡтарында күрһәткестәрҙең яҡшы динамикаһын билдәләне.

"Төбәк планлы үсешә. Торлаҡ, юл инфраструктураһы объекттарын сафҡа индереү әүҙем бара. Мөһим ваҡиғаларҙың береһе - быйыл июлдә Дүртөйлө ҡалаһынан Свердловск өлкәһенең Әчит ҡасабаһына тиклем М-12 "Көнсығыш" трассаһы участкаһы буйлап хәрәкәт асылды. Быйылдан илдә "Йәшәү өсөн инфраструктура" милли проекты старт алды, уны тормошҡа ашырыуҙы контролдә тотоу мөһим", - тине Марат Хөснуллин.

"Федераль үҙәк ярҙамында беҙ тейешле финанслау менән тәьмин ителгән бик күп объекттар төҙөйбеҙ. Мәҫәлән, шундайҙарҙың береһе - республиканың баш ҡалаһы биләмәһендә тамамланған "Көньяҡ ҡапҡа" проекты. Ҡайһы бер объекттар һәм юлдар проектлау стадияһында. Уларҙы федераль программалар сиктәрендә финанслауға ғаризалар әҙерләйбеҙ. Бынан тыш, тағы бер нисә йүнәлеш буйынса яҡшы перспективалар күҙаллана", - тип урындағы хәлдәр менән таныштырҙы Рәсәй Хөкүмәте рәйесе урынбаҫарын Радий Хәбиров. Шулай уҡ осрашыуҙа Өфөнөң Көньяҡ урау юлын, баш ҡаланың төньяҡ өлөшөндә Ағиҙел йылғаһы аша күпер төҙөү мәсьәләләре лә ентекле тикшерелде.

# БЕР ТИГЕҘ ҠАРАШ...

**Мәскәүҙә Радий Хәбиров "Төбәктәрҙә инклюзия үсеше стратегияһы" Бөтә Рәсәй инклюзив форумының "Бөтәһе өсөн дә асыҡ" түңәрәк өҫтәлендә ҡатнашты. Унда Рәсәй төбәктәре етәкселәре һаулыҡ мөмкинлектәренә ҡарамай, һәр кемдең йәмғиәт тормошонда әүҙем ҡатнашыу тәжрибәһе менән уртаҡлашты.**

Стратегик башланғыстар агентлығының генераль директоры Светлана Чупшева Башҡортостандың инвалидтар өсөн инклюзив киңлек булдырыу йәһәтенән алып барылған эшен юғары баһаланы. Инвалидтарҙың йәшәү сифаты индексы буйынса Башҡортостан алдынғы 20 төбәк иҫәбенә инә һәм унда 11-се урынды биләй. "Беренсе тапҡыр федераль кимәлдә ошондай форум ойошторҙоҡ. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостан - бындай форумды күптән инде йыл һайын үткәргән берҙән-бер төбәк. Ул "Каршылыктарҙы еңеп" тип атала. Һәр кем өсөн асыҡ майҙансыҡта һеҙ инвалидтар, айырым балаларҙың ата-әсәләре, Махсус хәрби операция ветерандары менән осрашаһығыҙ, саҡырылған халыҡ-ара кимәлдәге эксперттарҙы тыңлайһығыҙ. Фекер алышыуҙар һөҙөмтәһендә техник реабилитация саралары менән тәьмин итеү, был сектор өсөн продукция сығарған урындағы етештереүселәргә ярҙам итеү йәһәтенән бик күп төбәк программалары барлыҡҡа килеүен дә беләм. Инвалидтар өсөн мөһим социаль һәм белем биреү башланғыстары тормошҡа ашырыла. Йәғни форум республикала барған ыңғай үҙгәрештәргә этәргес бирә", - тине Светлана Чупшева, Башҡортостан Башлығына мөрәжәғәт итеп.

"Йәмғиәттең цивилизация кимәле иғтибарға һәм хәстәрлеккә мохтаждарға мөнәсәбәткә ҡарап билдәләнә, - тине яуап һүҙендә Радий Хәбиров. - Башҡортостанда 250 мең тирәһе инвалидлығы булған кеше бар. Уларҙың 21 меңе - балалар. Шуға күрә республикала һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгәндәргә йәшәүе комфортлы булһын өсөн шарттар тыуҙырабыҙ. Иң элек йәмғиәттә, беҙҙең арала төрлө хәлдәге кешеләр ҙә бар, тигән төшөнсәне нығытабыҙ".

Билдәләнеүенсә, "Каршылыҡтарҙы еңеп" форумы сиктәрендә республикала мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙың ата-әсәләре менән һөҙөмтәле бәйләнеш булдырылған. Реабилитациялауҙың техник сараларын етештереү буйынса эштәр көсәйтелгән. Ҙур табыш килтермәгән

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда 30 күп балалы ҡатын-ҡыҙ "Әсәлек даны" миҙалына лайыҡ булды. Указға Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйған. Билдәле булыуынса, бүләкләнеүселәр араһында Әбйәлил, Архангел, Бәләбәй, Балаҡатай, Белорет, Бөрйән, Ғафури, Дүртөйлө, Иглин, Илеш, Ҡалтасы, Ҡыйғы, Мишкә, Тәтешле, Өфө, Хәйбулла райондарынан, шулай уҡ Сибайҙан һәм Өфө ҡалаларынан ҡатын-ҡыҙҙар бар. "Әсәлек даны" миҙалы Башҡортостанда 1998 йылда булдырылды. Был наградa биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән ҡатын-ҡыҙҙарға тапшырыла.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалы менән бүләкләү тураһында указға ҡул ҡуйған. Унан күренеүенсә, балалар тәрбиәләүҙәге ҡаҙаныштары, ғаилә ҡиммәттәрен һәм йолаларын һаҡлауға һәм нығытыуға тос өлөш индергәне өсөн Благовещен районынан Юлиә һәм Виктор Хомутовтар, Өфөнән Лилиә һәм Азамат Фәттәховтар ғаиләләре, шулай уҡ Дыуан районынан Наталья Авдонина һәм Йәрмәкәй районынан Фатима Ғарифуллина билдәләнә.

✓29 ноябрҙә Өфөнөң Көрәш һарайында ҡатын-ҡыҙҙар араһында бокс буйынса Рәсәй чемпионаты башлана. Турнир көндәрендә Өфөгә илебеҙ боксы легендалары, бокс буйынса донъя чемпиондары, Олимпия уйындары призерҙары һәм еңеүселәре Софья Очигава, Егор Мехонцев, билдәле спортсылар Саадат Далгатова, Светлана Андреева, Алексей Тищенко, Ирина Серебреникова, Эдуард Абзалимов һәм Әхмәтхан Адилов килә. Спорт йондоҙҙары оҫталыҡ дәрестәре һәм автограф-сессиялар үткәрәсәк, еңеүҙәренең тарихы тураһында һөйләйәсәк.

✓Өфөлә 3-5 декабрҙә Конгресс-холда XVIII Халыҡ-ара бизнес аҙнаһы үткәрелә. Сараның эшлекле программаһы иҡтисад, экспорт, инновациялар һәм инвестициялар кеүек өлкәләрҙә партнерлыҡты киңәйтеү мәсьәләләренә арнала. Ҡатнашыусылар һәм ҡунаҡтар пленар ултырыштар, түңәрәк өҫтәлдәр, тармаҡ секциялары, шулай уҡ b2b контакттар биржаһы форматында бизнес-мөхитте үҫтереүҙең ағымдағы шарттарын һәм перспективаларын тикшерә.

✓Башҡортостанда 2026 йылға йәшәү минимумы билдәләнде. 2026 йылдың 1 ғинуарынан йән башына йәшәү минимумы - 16 856 һум, эшкә һәләтле халыҡҡа - 18 373 һум, балаларға - 16 350 һум, пенсионерҙарға - 14 496 һум. Был күрһәткестәр социаль пособиеларҙы һәм башҡа ҡайһы бер түләүҙәрҙе иҫәпләү өсөн ҡулланыла. Быйыл республикала йән башына йәшәү минимумы 15 782 һум тәшкил итә, эшкә һәләтлеләргә - 17 202 һум, балаларға - 15 309 һум, пенсионерҙарға - 13 573 һум.

**✓ Марзаев маҡтаулы исемдәренән һәм наградаларынан мәхрүм ителгән. Йорт, бина һәм ер участкаһы рәүешендәге мөлкәт, шулай уҡ ришүәт күләменә тап килгән аҡсалата сумма - 37 миллион һум конфискацияланған.**



был тармаҡты алып барған эшҡыуарҙарҙың ҡорамалдар һәм сеймал һатып алыуға йүнәлтелгән сығымдарының 50 проценты бюджеттан ҡаплана. Былтыр уны финанслауға 20 млн һум аҡса бүленгән. Республикала йыл һайын мөмкинлектәре сикләнгән ҡыҙҙар өсөн 8 мартҡа ҡарата "Бәләкәй принцессалар" балы үткәрелә. Ә малайҙар өсөн "Патриот" паркында бына инде ике йыл рәттән "Геройҙар биләмәһе" илһөйәрлек слеты ойоштолора.

## ХӨКӨМ ҠАРАРЫ БАР

**Өфөнөң Ленин районы суды Башҡортостан премьер-министры урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Алан Марзаевҡа хөкөм ҡарары сығарҙы.**

Республика прокуратураһының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, суд ҡарары менән ул ғәйепле тип танылған, ҡаты режимлы холоҡ төҙәтеү колонияһында ултырыу шарты менән 13 йылға иркенән мәхрүм ителгән, 561 миллион 257 мең 76 һум 70 тин штраф һалынған. Ғәйепләнеүсегә 12 йыл дәүләт хеҙмәтендә эшләү тыйыла. Марзаев маҡтаулы исемдәренән һәм наградаларынан мәхрүм ителгән. Башҡортостан судтарының берләшкән матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, йорт, бина һәм ер участкаһы рәүешендәге мөлкәт, шулай уҡ ришүәт күләменә тап килгән аҡсалата сумма - 37 миллион һум конфискацияланған һәм дәүләт милкенә әйләндерелгән. Ғәйепләнеүсе Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары вазифаһында эшләгән ваҡытта аралашсы аша "Дортрансстрой" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте файҙаһына юл хужалығы өлкәһендәге эштәрҙе ваҡытында башҡарыу контракттар төҙөргә булышлыҡ иткән өсөн 37 миллион һум ришүәт алған. Ғәйепләнеүсе ғәйебен танымаған. Хөкөм ҡарары әлегә законлы көсөнә инмәгән. Бынан алдараҡ Алан Марзаев һунғы һүҙ менән сығыш яһаны. Ул адвокаттарына эшләгән эштәре өсөн рәхмәт белдерҙе, шулай уҡ "үҙенең исемен аҡларға һәм ғәйепләүселәрен төрмәгә ултыртырға" вәғәҙә бирҙе

АФАРИН!



## ТАҒЫ БЕР ХӘСТӘРЛЕК

**Өфө ҡалаһының Совет районында урынлашҡан 249-сы Башҡорт балалар баҡсаһы 1973 йылда асыла һәм матур, итәғәтле балалар тәрбиәләү эшенә тотона. Туған телгә һөйөү, башҡорт мәҙәниәтенә тәрән хөрмәт менән ҡарарға өйрәтеү - был балалар баҡсаһы эшмәкәрлегенең төп йүнәлештәренең береһе.**

Бөгөн баҡсаға 67 бала йөрөй, уларҙың күбеһе башҡорт телен белеп килә, ә башҡортса аңлаған, әммә һөйләшмәгән бәләкәстәр туған телдәрендә аралашып китһен өсөн беҙҙә тейешле мөхит булдырылған. Үҙ эшенә мөкиббән киткән, балаларҙы бик яратҡан тәрбиәселәрҙән тыш, коллективта психолог, методист, музыка белгестәре, медицина хеҙмәткәрҙәре эшләй. Тәрбиәселәр, музыка уҡытыусылары балаларға бар күңел йылыһын биреп эшләп кенә ҡалмай, төрлө конкурс-фестивалдәрҙә лә әүҙем ҡатнаша. Балаларҙы ла ҡала күләмендә уҙғарылған "Һаумы, һаумы, әкиәт", "Баш ҡала йондоҙҙары", "Илһам" кеүек конкурстар, фестивалдәргә ентекле әҙерләйҙәр. Уларҙа ҡатнашҡан балалар һәр ваҡыт призлы урындар яулай. Күптән түгел баҡсала шәжәрә байрамы булып үтте. Балалар ата-әсәләре менән бергә үҙҙәренең ырыу-нәҫелен өйрәнде, шәжәрә ағасындағы ата-бабаларын барланы. Бындай байрамдар балаларҙы һәр ваҡыт ҡыҙыҡһындыра, күңелдәрендә уйылып ҡала.

Ата-әсәләр ҙа беҙҙең коллектив эшенән бик ҡәнәғәт, күптәре икенсе йә өсөнсө балаларын йөрөтә. Ҡайһы бер ата-әсәләр балаларының башҡорт телендә һөйләшергә өйрәнеүен теләп, беҙҙең турала башҡаларҙан ишетеп киләләр. Шуға күрә баҡсаға яҡын-тирәлә йәшәгәндәр генә түгел, ә күрше ҡасаба, ауылдарҙан да балалар йөрөй.

Ата-әсәләр тәрбиәселәрҙең һәр бер башланғыһын хуплап, күтәрмәләп ала, ихлас ярҙам итәләр. Мәҫәлән, күптән түгел бында "Урындағы башланғыстарҙы хуплау программаһын"да (ППМИ) ҡатнашыу өсөн проект һайлау буйынса йыйылыш үткәрелде. Йыйылыш барышында балалар баҡсаһы мөдире вазифаһын башҡарыусы Лиана Шәфҡәт ҡыҙы Шәһәрова киләһе 2026 йылда ошо программала ҡатнашыу теләген белдерҙе һәм бөгөн балалар баҡсаһының тәҙрәләрен төҙөкләндереү көнүҙәк мәсьәлә булыуын билдәләне. Балалар баҡсаһына балаларын йөрөткән ата-әсәләрҙән һәм яҡын-тирәләге йорттарҙа йәшәүселәрҙән торған инициатив төркөм балалар баҡсаһында тәрбиәләнеүселәрҙең хәүефһеҙлеген тәьмин итер был проектты хупланы, уны тормошҡа ашырырға ярҙам итергә теләк белдерҙе. Әйткәндәй, был программала балалар баҡсаһы былтыр ҙа ҡатнашты, проект һөҙөмтәле булды: баҡса биләмәһе яңы кәртә менән уратып алынды, тимерҙән матур ҡапҡа ҡуйылды.

**Лиана ШӘФҠӘТОВА.**

БАЙРАМ УҢАЙЫНАН

## ӘСӘЙЕМ



**Беҙҙең һөйөклө әсәйебеҙ Миңзәлә Миңлегәле ҡыҙы Нәзирова Ғафури районының Юлыҡ ауылында тыуған. Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының рус теле һәм әҙәбиәте бүлеген тамамлаған. Ҡауарҙы ауылы мәктәбенә эшкә ҡайтҡан һәм атайыбыҙ Мәүлимбирҙе Хәйретдин улы Нәзиров менән сәстәрен сәскә бәйләгән.**

Ул оҙаҡ йылдар үҙебеҙҙең Ҡауарҙы урта мәктәбендә рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләне. Пушкиндың бөтә шиғырҙарын яттан белә ине, романстар йырлап, балаларға мәғлүмәтле һәм ҡыҙыҡлы итеп дәрестәр үткәрә ине. Элекке уҡыусылары әле лә килеп хәл белеп, рәхмәттәрен әйтеп йөрөй.

Мәктәптә талапсан һәм гүзәл уҡытыусы булһа ла, өйҙә уҫаллығын күрмәнек, беҙҙең өсөн һәр саҡ йылмайып ҡына торған әсәкәйебеҙ ул. Хаҡлы ялға сыҡҡас, эшһөйәр әсәйебеҙҙе ауыл китапханаһына киапханасы һәм мәҙәниәт йортонон художество етәксеһе итеп эшкә саҡырҙылар. Ул оҙаҡ йылдар мәҙәниәт усағын гөрләтте, бик күп тәрбиәүи саралар уҙғарҙы. Әлеге көндә лә әсәйебеҙ ауылыбыҙҙың "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе булараҡ әүҙем эш алып бара. Ауылыбыҙ, районыбыҙ кимәлендәге тәрбиәүи сараларҙа ҡатнашалар, үҙҙәре лә йыш ҡына төрлө кисәләр уҙғаралар. Мәҫәлән, былтыр көҙ айында Ғафури районы ағинәйҙәре йыйылышында йәш быуынды үҫтереүҙә бик ҙур әһәмиәткә эйә булған, халҡыбыҙҙың борондан килгән йолаһы - "Йолоҡ туйы"н сәхнәләштереп күрһәттеләр.

Егермe йыл ҡайны-ҡәйнә менән ғүмер итте әсәйебеҙ. Уларға һәм үҙенең әсәһенә, беҙҙең олатайөләсәйҙәребеҙгә ҡәҙер-хөрмәт белдереп, һуңғы юлға оҙаттылар.

Биш балаға - өс ҡыҙ һәм ике улға ғүмер бирҙе кәҙерләрҙебеҙ. Шулай уҡ бер туған малай һәм ҡыҙҙы тәрбиәгә алып, оло юлға аяҡ баҫтырҙылар. Ун алты ейән-ейәнсәрҙәренә һөйөклө өләсәй һәм олатай улар хәҙер, әлхәмдүлилләһ!

Гөлдәр үҫтерергә ярата әсәйебеҙ. Тыуған йортобоҙҙоң тәҙрә төптәрендә лә, ишек алдында, баҡсала ла төрлө-төрлө сәскә-гөлдәр күҙҙең яуын алып, күңелдәргә йылыуаныс биреп ултыра.

Әсәйебеҙ беҙгә - ҡыҙҙарына, матур, зауыҡлы һәм килешле итеп кейенеүҙә лә һәр ваҡыт үрнәк. Бәләкәйҙән матур биҙәүестәр, мунсаҡтар таҡырға, төрләндереп күлдәктәр кейергә беҙ әсәйебеҙҙән күреп, өйрәнеп үҫтек. Әлеге көндә лә әсәйебеҙ: "Әҙәм күрке - сепрәк... Шуға күрә ыҫпай кейенегеҙ, кеше араһында матур йөрөгөҙ. Телмәрегеҙ яғымлы булһын, кеше менән матур итеп аралашығыҙ", - тип өйрәтә.

Әсәйебеҙ башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына хас иң күркәм сифаттарҙы үҙендә туплаған. Ул беҙгә матурлыҡ, уңғанлыҡ өлгөһө.

**Миңлегөл ТАЙСИНА,**
**Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәре.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓29 ноябрҙә көндөҙгө сәғәт 4-кә тиклем республиканың амбулатор-поликлиника учреждениеларында прививка эшләтергә була. Үҙҙәре килә алмаған граждандарға өйҙә прививка яһатырға тәҡдим итәләр. Был хеҙмәт менән 60 йәштән өлкән, йөрәк, үпкә, шәкәр диабеты сирҙәренән һәм артыҡ ауырлыҡтан яфаланған пациенттар файҙалана ала. Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, ноябрь уртаһына республикала 1,5 миллиондан ашыу кеше гриптан прививка яһатҡан. Коллектив иммунитет булдырыу өсөн халыҡтың 60 процентына, йәғни 2,4 миллиондан ашыу кешегә, шул иҫәптән 600 меңдән ашыу балаға прививка эшләтергә кәрәк.

✓Башҡортостанда 24 ноябрҙән 5 декабргә тиклем ВИЧ-инфекцияны иҫкәртеү буйынса бушлай "ҡыҙыу элемтә" эшләй, тип хәбәр иттеләр Роспотребнадзорҙың республика идаралығында. Республика халҡы эш көндәрендә 8-800-77-50-170 номерына шылтыратып, ВИЧ-ты иҫкәртеү буйынса тулы мәғлүмәт алырға мөмкин. Һорауҙарға Роспотребнадзор, шулай уҡ Гигиена һәм эпидемиология үҙәге хеҙмәткәрҙәре яуап бирә. Бынан тыш, берҙәм консультация үҙәгенең бушлай телефоны тәүлек әйләнәһенә эшләй: 8-800-555-49-43.

✓Башҡортостан юлдаш телеканалының "Ҡайтыр" фильмы Мәскәүҙә үткән "Һөнәре - журналист" XVII халыҡ-ара телефестивалдә "Иң яҡшы репортаж" номинацияһында еңеү яуланы. Ул билдәле тележурналист Павел Самойловҡа бағышланған. Фильм - Гәүһәр Батталова (автор), Әлфиә Арыҫланова һәм Ләйсән Рамазанова (режиссерҙар), Ринат Кашапов һәм Азамат Даянов (операторҙар), Ләйлә Владимированың (композитор) ижад емеше.

✓"Спутник-ФМ - Өфө тулҡыны" радиоһы "Радиомания-2025" милли премияһының "Яңылыҡтар " һәм "Радиостанцияны үҫтереү. Эфирҙан тыш проект" номинацияларында иң яҡшыһы тип табылды. "Юлдаш" радиоһы "Тура эфирҙағы иң яҡшы мәл" номинацияһында иң ҙур наградаға лайыҡ булды. Быйыл "Радиомания" милли премияһына илебеҙҙең төрлө төбәктәренән 300-ҙән артыҡ ғариза ҡабул ителгән, еңеүселәр 42 номинацияла билдәләнгән.

✓29 ноябрҙә Башҡортостанда Әсә көнөнә ҡарата "Ғаилә менән ял" ойоштороla, тип хәбәр итә Хеҙмәт министрлығы. Байрам программаһында ижади сығыштар һәм концерт номерҙары; "Әсәй - иң яҡшы белеүсе" интеллектуаль викторинаһы; балансты һәм гармонияны һаҡлау тураһында "Әсәй ресурсы" лекцияһы; оҫталыҡ дәрестәре һәм конкурстар; "Ныҡ итеп ҡосаҡлайым" флешмобы һәм күмәк фото; тәм-том менән сәй эсеү һәм башҡалар бар.

БЫЛ АЙҘА...

**Ниһайәт, ҡыштың - тәүге, йылдың һуңғы айына аяҡ баҫабыҙ. Башҡаларға нисектер, мәгәр быйылғы йылдың айҙары кино кадрҙары кеүек тиҙ-тиҙ үтеп китеп бөттөләр: йәйҙең йәмен дә, көҙҙөң тәмен дә татып ҡалып булманы кеүек.**

# ҠӘҮЕС КЕРМӘЙ ҠЫШ БУЛМАҪ



Яуындары менән теңкәгә тейһә лә, мул емешле, һутлы үләнле, гөлсәскәле йәйгә лә, бәрәкәтле, бай уңышлы көҙгә лә рәхмәтлебеҙ. Йәй биреп еткермәгән йылыны көҙгө сыуаҡ бүләк итте беҙгә. Туҡтауһыҙ ямғырҙан ер дымға туйынды - быныһы ла насар түгел. Элгәре ҡырпағай баштарында уҡ ҡар ята торғайны, әммә быйыл ноябрь ахырында ла әле ҡыш һулышы һиҙелмәне: был көндәрҙә уртаса һауа температураһы +5 градус тәшкил итте. Ғалимдар әйтеүенсә, Ер шарының бөтөн төбәктәрендә лә быйылғы йыл тәбиғәтендә климат үҙгәреүе үҙен нығыраҡ һиҙҙерҙе. Дәһшәтле ҡойон һәм тайфундарҙың ҡеүәте лә, йышлығы ла арта бара. Әммә климат үҙгәреүенең иң хәүефле эҙемтәһе - океан кимәленең артыуы. Әле ул йылына биш миллиметрға күтәрелә, тимәк, ун йылдан - биш см тигән һүҙ. Мәңгелек тип аталған боҙлоҡ әкренләп ирей бара, шуның эҙемтәһендә Рәсәйҙә лә ҡышҡы һалҡындарҙың йомшара төшөүе көтөлә, ләкин Рәсәй синоптиктары фаразлауынса, был тулҡын быйылғы декабргә ҡағылмаясаҡ.

Рәсәйҙең Гидрометүҙәк етәксеһе Роман Вильфанд ҡыш былтырғыға ҡарағанда һалҡын булыр, айырыуса Урал арьяғында, тип күҙаллай. "Метео" прогноздар үҙәге белдереүенсә иһә, декабрҙә һауа торошо үҙгәреп тороусан булыуы ихтимал. Рәсәйҙең көнбайыш-үҙәк өлөшөнә бер нисә циклон ябырыласаҡ һәм был көндәрҙең йылыныуына килтерәсәк, епшек ҡар яуасаҡ, ти белгес. Был айырыуса Үҙәк Рәсәй һәм Волга буйы төбәктәрендә күҙәтеләсәк. Башгидромет синоптиктары декабрҙең һәм, ғөмүмән, ҡышҡы осорҙоң республикала сағыштырмаса йылы буласағын вәғәҙәләй.

Ҡыҫҡаһы, белгестәр бәхәсләшә торһон, һауа торошон күп йыллыҡ халыҡ күҙәтеүҙәренән дә хаҡ әйтеп биреүсе булмаҫтыр: "Көҙ йылы килһә, ҡыш оҙон була", "Ҡараса (ҡара көҙ) килмәй көҙ булмаҫ, ҡаңтар (ҡырпаҡ) тыумай боҙ булмаҫ","Бер ҡырпаҡ менән ҡыш булмаҫ", "Жәүзә (22 май - 21 июнь) кермәй йәй булмаҫ, ҡәүес (22 ноябрь - 21 декабрь араһы) кермәй ҡыш булмаҫ".

Әйткәндәй, аҡъюлай беҙҙе көнсығыш календары буйынса Йылан йылы менән хушлаштырып, артабан 2026 - Ут төҫлө Ҡыҙыл Йылҡы йылына оҙатасағын да әйтәйек инде. Астрологтар тасуирлауынса, йылҡының энергия, көс, хәрәкәт, ireклек һәм бойондороҡһоҙлоҡ символы булыуын иҫкә алһаҡ, был йыл Рәсәйҙең әлеге ынтылыштарына ауаздаш булыуын күрәбеҙ. Тап ошо сифаттары менән киләһе йылдың Рәсәй сәйәсәтендә еңеүле йыл булып килеүенә бик тә өмөт итке килә.

Һәр бер айҙағы кеүек, декабрь календары ла иҫтәлекле һәм һөнәри байрамдарға бай. Әлеге лә баяғы көн темаһынан сығып ҡараһаҡ, уларҙың хәрби даталарға арналғандары байтаҡ ҡына: Билдәһеҙ һалдат көнө **(3)**, 1941 йылда Совет ғәскәрҙәренең Мәскәү һуғышында немец-фашистарына ҡаршы контрһөжүм башлаған көн **(5)**, Ватан Геройҙары **(9)**, РФ Хәрби-космос Көстәренең инженер-авиация **(7)**, шулай уҡ Радиотехника ғәскәрҙәре **(15)**, Ракета ғәскәрҙәре **(17)** көндәре бар. Бөйөк Ватан һуғышы башланған көндән алып Совет ғәскәрҙәренең Мәскәү өсөн алышта контрһөжүмгә күсеп, фашистарҙы баш ҡала янынан 100-250 километрға алып ташлауы ҡан ҡойғос һуғышта тәүге еңеүле һынылыш була һәм Германия вермахтының йәшен тиҙлегендә Советтар Союзына баҫып инеү планын емерә. Мәскәү өсөн һуғыш 1941 йылдың 30 сентябренән башланып, 1942 йылдың 20 апреленә тиклем бара.

Бөгөнгө һуғыштар, мәҫәлән, Махсус хәрби операцияны алып ҡарағанда ла, уның заманса ҡорал, хәрби белем кимәле, профессионализм һәм тактика йәһәтенән Бөйөк Ватан һуғышынан тамырынан айырылып тороуына ҡарамаҫтан, ябай һалдаттарҙың ул йылдарҙағы тиңһеҙ ҡаһарманлыҡ, фиҙаҡәрлек һәм илһөйәрлек сифаттары 84 йыл үткәс тә һис үҙгәрмәне; был сифаттар ике заман, ике быуын өсөн дә берҙәй уртаҡ һәм хәл иткес, еңеүгә этәргес ҡеүәтле тойғо булып ҡалды. Ул ғына ла түгел, Ватан һуғышы йылдары ҡаһарманлыҡтары бөгөнгө яугирҙарыбыҙ өсөн сағыу өлгө булып хеҙмәт итә. Геройҙар бөгөн дә күп илебеҙҙә. Декабрҙә билдәләнеүсе Ватан Геройҙары көнө **(9)** СССР һәм Рәсәй Геройҙарын, шулай уҡ Дан һәм Изге Георгий ордендары кавалерҙарын иҫкә алыу, иҫәндәрен тантаналы рәүештә ҡотлау традицияға ингән. Шулар араһынан бөгөн Махсус хәрби операцияла ил азатлығы һағында һоҡланғыс батырлыҡ өлгөләре күрһәтеүсе ана шундай яугирҙарыбыҙҙы барлап китәйек. Ошо йылдың 9 майына ҡарата мәғлүмәттәр буйынса, 330 МХО яугирына РФ Геройы исеме бирелгән. Бүрәт республикаһы МХО барышында Рәсәй Геройҙары һаны буйынса беренсе урында килә: 19 Герой. Унан ҡала Байкал арьяғы төбәге (16 кеше), Дағстан (15), Башҡортостан (15), Яҡут-Саха республикаһы (12) һәм башҡалар.

Был айҙағы иҫтәлекле көндәр һәм һөнәри байрамдар: Башҡортостан сәнәғәт эшсәндәре, Математик, Бөтөн Рәсәй хоккей, СПИД менән Бөтөн донъя көрәш **(1)** көндәре, Рәсәй банк хеҙмәткәрҙәре, Ҡоллоҡто бөтөрөү өсөн халыҡ-ара көрәш **(2)** көндәре, Билдәһеҙ һалдат көнө, Юрист, Пестицидтар менән халыҡ-ара көрәш **(3)** көндәре, Ин-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙ ниндәй гәзит-журналдарға яҙылаһығыҙ?

***Рәмзиә МОНАСИПОВА, педагогия ветераны, Ғафури районы:*** Гәзит-журналдарға яҙылыу беҙҙең быуын кешеләренең ғәҙәтенә һеңгән бит инде ул. Әлеге ваҡытта "Шоңҡар" журналын, "Йәшлек" гәзитен алдырабыҙ, мәҫәлән. Ә "Киске Өфө" һәр кемдең өҫтәл гәзите булырға тейеш, тип уйлайым. Тарихи темаға булһынмы, тел проблемаһын күтәрһендәрме, ил ваҡиғаларына ҡағылышлымы, ғаилә темаһынамы - бөтә мәҡәләләрен ентекле уҡып, үҙ фекерен белдереп, тормошҡа айыҡ ҡараш менән ҡарап, был гәзитте бөтәһенә лә алдырырға кәрәк.

Әлеге ваҡытта күп мәғлүмәт интернет селтәрендә булһа ла, гәзит-журналдарҙың ошо ҡағыҙ форматында һаҡланып ҡалыуы фарыз. Интернеттың бит, бигерәк тә бына әлеге ваҡыттарҙа, эшләмәй торған саҡтары ла бар, ә ҡағыҙ гәзит һәр ваҡыт ҡул аҫтында, кәрәк материалды табаһың да, уҡый һалаһың. Бигерәк тә уҡыусы, студенттар, беҙ, пенсионерҙар өсөн был яҡшы. Интернет менән бөтәһе лә эш итә алмай бит. Кемдеңдер күҙҙәре насар күрә. Шуға күрә ҡағыҙ формат киләсәктә лә үҙенең актуаллеген юғалтмаҫ, тип уйлайым.

Тик шулай ҙа баҫмаларға яҙылыусылар кәмей бара. Бының сәбәптәре күп төрлө. Мин үҙем ун йылға яҡын районыбыҙҙың "Табын" гәзите эрәһендәге "Мағаш тауышы" әҙәби ойошмаһының етәксеһе булып эшләнем. Хеҙмәткәрҙәргә һәр ваҡыт, халыҡ менән осрашмайһығыҙ, һөйләшеү алып бармайһығыҙ, тип әйтә торғайным. Осрашыуҙар кәрәк. Әле яңы ғына Ғафури районында "Матбуғат байрамы" үтте, кешеләр ҡайһы бер гәзиттәргә, бигерәк тә "Киске Өфө"гә сират тороп яҙылды.

Ауыл ерҙәрендә почталар ябылыуы йә почта булып та, унда эшләргә почтальондар юҡлығы - тағын бер сәбәп. Мин үҙем Красноусолда йәшәйем, бер уйлаһаң, ҙур район үҙәге, тик шуға ҡарамаҫтан, бер нисә йыл элек, эшләүселәр етмәгәс, яҙылған гәзит-журналдарҙы айына бер тапҡыр йыйып килтереп китә торғайнылар. Хәҙер аҙнаһына бер килтерәләр, эш әҙерәк яйға һалынды, күрәһең.

Почталар һәйбәт эшләһә, редакция хеҙмәткәрҙәре халыҡ менән йылына бер-ике тапҡыр китапхана, мәктәп-клубтарҙа осрашыуҙар ойоштороп торһа, тираждар ҙа артыр ине, тигән фекерҙә мин үҙем.

***Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ, хәрби хеҙмәт ветераны, Сибай ҡалаһы:*** Мин үҙем "Киске Өфө", "Йәшлек", "Йәншишмә", ҡалабыҙҙың "Атайсал" гәзиттәрен даими алдырам. Шул баҫмаларҙы иң яҡын туғандарым һымаҡ күреп, уларҙың килгәнен түҙемһеҙлек менән көтөп алам. Хатта почтальон килгәнен дә көтөп тормаҫтан, почтаға барып алып киләм. Почта эшселәре мине әллә ҡасандан танып бөткән. Хатта иң әүҙем матбуғатҡа яҙылыусы тип, приз да биргәндәре бар...

Яҡташтарыбыҙҙың гәзит - журналдарға яҙылыу кимәле һүлпәнәйә барыуын мин үҙемсә былай аңлайым: гәзит-журналды башлыса оло быуын кешеләре алдыра бит инде, ә

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостанда минималь эш хаҡы күләме билдәле булды. 2026 йылда республикала МРОТ 21 процентҡа тиерлек арта һәм айына 27 093 һумға еткерелә. Башҡортостанда иһә Урал коэффициенты менән бергә минималь хеҙмәт хаҡы 31 156 һум 95 тин була. Был турала республиканың Дәүләт хеҙмәт инспекцияһынан хәбәр иттеләр, эш биреүселәр МРОТ-тан кәм булмаған хеҙмәт хаҡы түләргә бурыслы, тип яҙылған Рәсәйҙең Хеҙмәт кодексында.

✓ 18 ноябрҙә башланған Бөтә Рәсәй "Йәшел зачет" экологик конкурсының 1-се этабы 15 декабргә тиклем дауам итә. Унда 8-11-се класс уҡыусылары һәм юғары уҡыу йорттарының I-II курс студенттары ҡатнаша ала. Иң күп балл йыйғандар икенсе, көндөҙгө этапҡа үтәсәк - ул 2026 йылдың февралендә үтә. Биология, химия, география һәм экология буйынса һорауҙарҙы Серго Орджоникидзе исемендәге Рәсәй дәүләт геология-разведка университеты һәм Д.И. Менделеев исемендәге Рәсәй химия-технология университеты уҡытыусылары әҙерләгән.

✓ Башҡортостанда "Рәсәйҙә эш" кадрҙар үҙәге ойошмалары МХО-ла ҡатнашыусыларҙы һәм уларҙың ғаилә ағзаларын эшкә урынлашыу буйынса саралар үткәрҙе, тип хәбәр итәләр республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан. Республика мәшғүллек үҙәге директоры Ридан Әхйәмов әйтеүенсә, осрашыу республиканың 47 кадрҙар үҙәгендә үткән. Йыл башынан алып кадр үҙәктәре 527 сара уҙғарған, уларҙа 1558 кеше ҡатнашҡан.

✓ Башҡортостанда 2020 йылдан алып аҙыҡ-түлек сәнәғәте тармағында 9,6 миллиард һумлыҡ 12 инвестиция проекты ғәмәлләштерелгән. 2030 йылға агросәнәғәт комплексы продукцияларын етештереү индексын 2021 йыл күрһәткестәре менән сағыштырғанда 25 процентҡа арттырыу планлаштырыла. Әле 23 инвестиция проекты тормошҡа ашырыла. Уларҙың дөйөм суммаһы - 21 миллиард һумдан ашыу.

✓ Көйөргәҙе районының Ермолаев, Зәк-Ишмәт, Керәүле-Илюшкин, Абдул, Яңы Таймаҫ, Бахмут, Яҡшембәт, Аҡһары һәм Илкәнәй ауылдары мәктәптәре "Тыуған илде һаҡлау һәм хәүефһеҙлек нигеҙҙәре" һәм "Хеҙмәт" (технология) предметтары буйынса кабинеттар өсөн йыһаздар алған. "Заманса ҡорамалдарҙы файҙаланыу уҡыусыларҙың практик оҫталығын формалаштырыуға булышлыҡ итеп кенә ҡалмай, уларҙың белемгә ҡыҙыҡһыныуын уята", - тип билдәләнеләр районның мәғариф бүлегендә.

✓ *РФ Президенты Владимир Путин белдереүенсә, Рәсәй Трамп планы буйынса айырым пункттарҙы ҡарарға әҙер, сөнки ундағы ҡайһы бер мәсьәләләр асыҡлауҙы талап итә.*



форматика **(4)**, Бөтөн донъя тупраҡ, Ирекмәндәр **(5)** көнө, Совет ғәскәрҙәренең Мәскәү өсөн һуғышта немец-фашистарға ҡаршы контрһөжүм башлаған көнө **(5 декабрь,1941йыл)**, РФ Хәрби-космос Көстәренең инженер-авиация хеҙмәте **(7)**, Рәсәй Хәрби судтары, Халыҡ-ара рәссам **(8)** көндәре, Ватан Геройҙары, Коррупция менән халыҡ-ара көрәш, Геноцид енәйәте ҡорбандарын халыҡ-ара иҫкә алыу **(9)** көндәре, Кеше хоҡуҡтары, Бөтөн донъя футбол **(10)** көндәре, Халыҡ-ара тауҙар **(11)**, РФ Конституцияһы **(12)**, Башҡорт теле көнө. Шағир, мәғрифәтсе, башҡорт поэзияһы классигы Аҡмулланың (Камалетдинов Мифтахетдин Камалетдин улы) тыуған көнө **(14)**, Рәсәй Хәрби-Космос Көстәренең радиотехника ғәскәрҙәре, Һөнәри бурыстарын үтәгәндә һәләк булған журналистарҙы иҫкә алыу, Халыҡ-ара сәй **(15)** көндәре, Стратегик тәғәйенләнештәге ракета ғәскәрҙәре **(17)**, ЗАГС органдары хеҙмәткәрҙәре **(18)**, Хәрби контрразведка, Фәҡирҙәргә халыҡ-ара ярҙам **(19)**, РФ Хәүефһеҙлек органдары, Кешеләрҙең халыҡ-ара теләктәшлек **(20)**, БР Конституцияһы **(24)** көндәре, Халыҡ-ара эпидемияға ҡаршы әҙерлек, Рәсәй Федерацияһының Ҡотҡарыусылар көнө. РФ Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы ойошторолған көн **(27)**, Яңы йыл алды ял көнө **(31)**.

***Аҡъюлайҙа тыуғандар:***

**1 -** башҡорт шағиры-импровизаторы, сәсән, йыраусы, ғәҙеллек һәм башҡорт халҡының азатлығы өсөн көрәшсе **Байыҡ Айҙарҙы**ң (Байыҡ Аблаев, икенсе мәғлүмәттәрҙә - Баймөхәмәт Байназаров) **тыуыуына - 315 йыл** (1710-1814).

**1 -** педагог, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 1998-2004 йылдарҙа БР мәғариф министры, Башҡортостандың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре **Ғәлиә Мөхәмәтйәноваға - 75 йәш** (1950).

**2 -** дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, 1978-1985 йылдарҙа БАССР Юғары Советы Президиумы Секретары, Ленин, 1 дәрәжә Ватан һуғышы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, Почет билдәһе ордендары кавалеры **Фәйзрахман Хисмәтуллиндың тыуыуына - 100 йыл** (1925-1998).

**9 -** ғалим, филология фәндәре докторы, профессор, Рәсәйҙең атҡаҙанған юғары һөнәри белем хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Мирас Иҙелбаевҡа - 80 йәш** (1945).

**22 -** тележурналист, Башҡортостан юлдаш телеканалының баш мөхәррире, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге журналистар премияһы лауреаты **Гәүһәр Батталоваға - 60 йәш** (1965).

**25 -** яҙыусы, журналист, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге Республика премияһы лауреаты **Рәшит Солтангәрәевтың тыуыуына - 90 йыл** (1935-2000).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

---

беҙ, ололар, әкренләп әҙәйә лә барабыҙ...

Икенсенән, йәштәр тыуған телдә уҡыуҙан әкренләп ситкәрәк тайшана, буғай. Өйҙә лә, мәктәптә лә башҡорт теленә иғтибарҙы нығыраҡ йүнәлткәндә, әлбиттә, гәзиткә яҙылыу кимәле лә һаҡланыр ине.

Өсөнсөнән, әлеге лә баяғы, телефон, интернет-фәләнде күп ҡарайбыҙ шул. Бәғзе йәштәрҙең ана шуларҙы гәзиттән өҫтөнөрәк ҡуйыуы ла барҙыр. Гәзит уҡыуҙың тәмен белмәйҙәр, күрәһең.

Йәшерәк быуынды тап гәзит уҡыуға ҡайтанан ылыҡтырыу ысулдары бармы икән бөгөнгө көндә, тиһегеҙме? Ошондай еңел булмаған һорауға элегерәк бер ағай, руссалап: "Наверно, не знаю. Вероятно, очень может быть, но вряд ли..." - тип яуап биреп, көлдөрөп алғайны. Был, әлбиттә, шаяртыу ғына. Әммә һорау урынлы һәм бик мөһим, минең үҙемдең дә башҡа йыш килә ул.

Бөтә булған башҡорт мәктәп китапханаларына бына ошондай башҡорт телендәге баҫмаларҙы яҙҙырыуға ныҡ иғтибар биреү кәрәктер, минеңсә. Бәлки, шулай итәләрҙер ҙә, мин мәктәп хәлдәрен, ундағы талаптарҙы яҡшы белеп етмәйем. Шул маҡсатҡа, моғайын, аҡса ла бүленәлер, тигән өмөттәмен. Икенсенән, кластан тыш уҡыу дәрестәрендә мәктәп китапханаһынан теге йәки был гәзитте алып килеп, шунда баҫылып сыҡҡан ҡыҙыҡлы материалдарҙы балалар менән уҡыуҙы әүҙем ойоштороу уларҙы ҡыҙыҡһындырыр, тип уйлайым. Күптән түгел Сибайҙың Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге мәктәптең 8-синыфында уҡыған бер ейәнсәрем: "Ҡартатай, бөгөн һинең мәҡәләңде беҙгә дәрестә уҡынылар, бик оҡшаны!" - тип шатланып һөйләүе күңелгә яткайны. Аңлауымса, был мәктәптәге уҡытыусылар коллективы һәм китапханасы Мәрйәм Абдрахман ҡыҙы ошо мәсьәләгә бик етди ҡарай, тип аңланым.

Дүртенсенән, әлбиттә, ата-әсә балаларын телефондан күпмелер ваҡытҡа айырып, "тере" гәзит уҡып өйрәтергә, ҡыҙыҡһындырырға тейештер...

**Айһылыу ДАУЫТОВА яҙып алды.**

---

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# "КӨЙЛӘҮ" ПЛАНЫ НИ ҺӨЙЛӘЙ?

**Үткән аҙнала Рәсәй Һауа һөжүменә ҡаршы оборона көстәре ил күгенә осоролған 570 украин дронын атып төшөргән. Йәкшәмбе төнөнә ҡарай шуларҙың бер нисәһе Шатура ГРЭС-ы биләмәһенә килеп төшкән һәм станцияның өс трансформаторына ут ҡабынған. Мәскәү өлкәһе губернаторы Андрей Воробьев, Шатура ҡалаһын электр энергияһы менән тәьмин итеүҙә өҙөклөк булдырылманы - шунда уҡ резерв линиялар эшкә ҡушылды, тип хәбәр итте. Белгород өлкәһе губернаторы Вячеслав Гладков, 25 октябрҙә Украина Ҡоралды көстәре һөжүменән һуң зыян күргән Белгород һыу һаҡлағысы биш көн эсендә сафҡа индерелде, һыу кимәле кәмемәне, тип хәбәр итте.**

Бына шулай, Махсус операция ялынында эштәре хөртәйгәс, Украина ғәскәрҙәре, ғәҙәтенсә, Рәсәйҙең граждандар объекттары менән "һуғыша", ә бының өсөн дошманға артыҡ аҡыл да, көс тә кәрәкмәй - туҡтауһыҙ дондар яуҙыра: көндәре бит шуға тороп ҡалды. Ә шул уҡ ваҡытта Украина ғәскәре үҙенең 1000 һалдатын беҙҙең яугирҙар контролендә булған Красноармейск (Покровск) биләмәһендә ҡамауҙа - үлемгә дусар итеп ҡалдыра. Уларҙың иҫән ҡалғандары пленға биреләә. РФ Оборона министрлығы хәбәр итеүенсә, 22 ноябрҙә Рәсәй армияһы украиндарҙың уртаса алыҫлыҡҡа С-300 ПВО системаһын, 140 осоусы шартлатҡыс аппартын, 148 районда дошмандың ваҡытлыса урынлашҡан пункттарын юҡ итте.

Ә шулай ҙа АҠШ президенты Дональд Трамптың Украина-Рәсәй конфликтын көйләү буйынса 28 пункттан торған планы үткән аҙнаның төп ваҡиғаһы булды һәм бөтөн Европаны шаулатты. Трамптың планы шулай уҡ Рәсәй сәйәси даирәләрендә лә беренсе һанлы темаға әйләнде. РФ Президенты Владимир Путин был хаҡта Хәүефһеҙлек советы ултырышы үткәргән ваҡытта хәбәр итте. Ләкин унын, был план тыныс көйләү нигеҙенә һалынырға мөмкин, тип әйтеүенә ҡарамаҫтан, Рәсәйҙең эксперт берҙәмлегендә ул "ыңғай" һәм "ҡаршы" булған ике төрлө ҡараш тыуҙырҙы. Планға ҡаршылар унын тыныслыҡҡа түгел, ә Украинаны ҡайтанан ҡоралландырыу һәм НАТО һуғышына әҙерлек өсөн ваҡытлыса тынлыҡ, тип атаны. Пландың ҡайһы бер пункттары түбәндәгесә: Рәсәй, Украина һәм Евросоюз (ЕС) араһында тыныс һыйышып йәшәү хаҡында килешеү; АҠШтың Ҡырым менән Донбасты Рәсәй территорияһы тип таныуы; Украина ҡарамағында булған Донбасс өлөшөнән ВСУны сығарыу һәм ҡоралһыҙланыу зонаһы булдырыу; Украинала рус теленең рәсми статусын булдырыу һәм нацистик идеологияны тыйыу; Украина Ҡоралды көстәре һанын сикләп, уны 600 мең кешегә ҡалдырыу; Рәсәйгә һөжүм итә ҡалһа, Украинаны Америка яғынан хәүефһеҙлек гарантияһынан мәхрүм итеү; әкренләп Рәсәйҙән санкцияларҙы алыу һәм уны G8 составына ҡайтарыу; НАТО-нан Украина биләмәһендә ғәскәр урынлаштырыуынан баш тартыуын талап итеү һәм башҡалар. Украинаға тапшырылған ошо уҡ пландың йәшерен ҡушымтһы ла бар, имеш. Унда әйтелеүенсә, Рәсәй яғынан теләһә ниндәй хәрби һөжүм тыныслыҡҡа һәм трансатлантика хәүефһеҙлегенә янаусы акт булараҡ ҡабул ителәсәк һәм был осраҡта АҠШ һәм унын союздаштары хәрби көс ҡулланыуға тиклем барасаҡ.

Рәсәйҙең фекере әлегә асыҡ түгел. Украина яғы документ менән танышыуын һәм Зеленскийҙың ҡайһы бер пункттар буйынса Трамп менән осрашырға йыйыныуын белдерә. "Страна.ua" баҫмаһы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Украина, әлбиттә, планды шундуҡ кире ҡаҡмаясаҡ һәм уны Рәсәй ризалашмаһын өсөн үҙгәрттерергә тырышасаҡ. Украинаның ВСУ һанын кәметеү һәм территорияларҙан баш тартыу кеүек үҙ мәнфәғәтенә яуап бирмәгән пункттарҙы ҡабул итмәйәсәге асыҡ. Евросоюз лидерҙарының да был мәсьәләгә ҡарашы күптән мәғлүм. Улар нисек тә булһа Украина конфликтын дауам итеү яғында. Шуға ла әлеге планды улар ҡабул итергә теләмәне һәм АҠШ тәҡдим иткән 28 пунктлыҡ планды үҙҙәренә ҡулай үҙгәртеп, ярайһы ҡыҫҡартҡандан һуң 19 пунктҡа ҡалдырҙылар һәм уны Вашингтонға ебәрҙеләр.

Рәсәй рәсми рәүештә был пландың бер вариантын да алманы әле, тине РФ Президентының матбуғат секретары Дмитрий Песков. Ләкин, РФ Президенты Владимир Путин белдереүенсә, Рәсәй Трамп планы буйынса айырым пункттарҙы ҡарарға әҙер, сөнки ундағы ҡайһы бер мәсьәләләр асыҡлауҙы талап итә. Ә тотош алғанда, Трамптың планы конфликтты көйләүҙә нигеҙ документ булырға мөмкин. Һуңғы арала Дональд Трамп конфликтты көйләү планының ҡайтанан эшләнеүе һәм хәҙер Владимир Путин һәм Зеленский менән шәхси осрашыуға әҙер булыуы хаҡында фарманын белдерҙе. Ә бынан алда ул ике яҡ лидерҙары менән дә осрашыуға үҙенең илселәрен ебәрәсәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

---

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓2 декабрҙә киске 7.30 сәғәттә Өфө мэры Ратмир Мәүлиев менән тура бәйләнеш була, тип хәбәр иттеләр муниципалитетта. Баш ҡала мэрына һорауҙы тура эфирҙа +7 (3472) 54-70-08 телефоны буйынса, шулай уҡ "Вся Уфа" телеканалының социаль селтәрҙәрендә бирергә мөмкин. "Әгәр видео-мөрәжәғәт яҙҙырырға теләһәгеҙ, уны +7-927-346-11-11 номерына ебәрегеҙ", - тиелә Өфө мэрияһы белдереүендә. Ратмир Мәүлиев менән тура бәйләнеште төркөмдә, Rutube каналында,сайтта, "Вся Уфа" телеканалында ҡарарға мөмкин.

✓20 ноябрҙә Өфөнөң Владимир Комаров исемендәге Балалар ижады һарайында "Башҡортостан баш ҡалаһы мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының йыл педагогы" ҡала һөнәри конкурсын асыу тантанаһы үтте. Дүрт йыл эсендә конкурс ярыштарында 250-гә яҡын балалар баҡсаһы педагогы ҡатнашҡан. Быйыл 42 мәктәпкәсә йәштәге хеҙмәткәр үҙ оҫталығын күрһәтә. Улар араһында - баш ҡаланың ете районынан тәрбиәселәр һәм өлкән тәрбиәселәр. Шулай уҡ "Туған телдә уҡытылған мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының йыл педагогы" конкурсы ойошторола.

✓Өфө хакимиәте урамдарға исем биреү һәм уларҙы үҙгәртеү менән бәйле ике тәҡдим буйынса ҡала халҡының фекерен белергә теләй. Өфөнөң Баш архитектураһынан хәбәр итеүҙәренсә, Ленин районында яңы урамға Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Факиһа Туғыҙбаева исемен бирергә тәҡдим ителә. Урам Йәрминкә урамы һәм яңы проектланған урам араһында урынлашҡан. Шулай уҡ Технологик урамын "Технологик тыҡрыҡ" тип үҙгәртергә һәм Дим районындағы яңы урамға "Технологик урам" исемен бирергә тәҡдим ителә. Фекерҙәр 3 декабргә тиклем ҡабул ителә.

✓Өфөнөң Көрәш һарайында ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар араһында билбау көрәше буйынса Донъя кубогы старт алды. Был хаҡта Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте. "Беҙҙең Көрәш һарайы йәнә донъя спортсыларын үҙенә йыйҙы. Рәсәйҙең Спорт министрлығы һәм Халыҡ-ара билбау көрәше федерацияһы тап беҙҙең республикала ошо сараны үткәреүҙе ышанып тапшырҙы", - тип билдәләне Руслан Хәбибов. Ярыштар донъяның 20 иленән 150 көрәшсе, шулай уҡ Италия, Белоруссия, Грузия, Үзбәкстан, Тажикстан һәм Ҡаҙағстандан билбау көрәше һәм милли спорт төрҙәре буйынса халыҡ-ара федерациялар вәкилдәре делегацияһы ҡатнаша.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

✔ *Ике йыл үткәс, алтын мажараһын билдәле башҡорт журналисы тағы күтәреп сыға, табыш өсөн бер тин дә түләмәүҙәре тураһында ла яҙа. Ошонан һуң Радик Үтәғоловҡа район финанс бүлеге аша 4,9 млн һум аҡса бирәләр.*



*ТУРИСТ ҺУҠМАҒЫ*



# ИРӘНДЕК ТАУЫ

**Ирәндек туристар араһында киң популярлыҡ яуламаған әле. Асылда, таштарына тарихтың үҙе яҙылған төбәктең был йәһәтән киләсәге ышаныслы.**

Исмәғил тауына йәнәш ятҡан Ҡаңгилде үрен генә алайыҡ. Тауҙа, 1736 - 1740 йылдарҙағы ихтилал мәлендә, генерал Урусов, барлыҡ халыҡты йыйып, әсир төшкән башҡорт яугирҙарын яҙаға тарттырған. Шул урында сығып, Талҡаҫ күленә аҡҡан шишмә кеше ҡанынан ҡыҙыл төҫкә ингән. Тауҙың да атамаһы шул ваҡиға менән бәйле. Батырҙар ерләнгән урынға таш ҡуйылған. Унда: "Ошо урында 1737 йылдың 8-17 июлендә генерал Урусов әмере буйынса үҙ ирке өсөн көрәшкән башҡорт яугирҙәре язаланған. Әсир төшкән 5332 кеше, шул иҫәптән балалар һәм ҡатын-ҡыҙҙар Ырымбурға ҡыуылған" тип яҙылған.

Ирәндек үҙенең Талҡаҫ күле һәм республикала-ғы иң бейек Ғәҙелша шарлауығы менән данлыҡлы. Яҙғыһын, йәй башында, һыу шәп саҡта, сибайҙар Ғәҙелшаны мотлаҡ барып күрергә тырыша. Юл насар булһа ла, шарлауыҡҡа йылдан-йыл туристар ағымы ишәйә.

Талҡаҫ күле өҫтөндә бейеклеге буйынса икенсе урында булған Ирәндектең Ҡараташ түбәһе ҡалҡып тора. Күл янында балаларҙың ике ял лагеры урынлашҡан. Сибайҙыҡы һәм Баймаҡтыҡы. Тик төүгеһе хәҙер ял базаһы итеп үҙгәртелгән. Республикала "Талҡаҫ" шифахانаһы киң билдәле ине. Унан тау үренә ҡарай ӧс йөҙ баҫҡыслы һуҡмаҡ һалынған. Урыны менән эскәмйәләр ҡуйылған, шуға үргә, ял итеп, йәйләп менергә була. Әнерҙә юлды фонарҙар яҡтырта. Ҡышҡыһын иһә улар, ҡарҙан эшләпә кейеп, илаһи бер күренеш тыуҙыра.

Теләктәр тауында таштарҙан ҙур өйөм өйөлгән. Тау башына бағана итеп теҙелгән таштарҙы "ҡараҫҡы" тип атайҙар. Улар, ҡарап, һаҡлап тора, тигән ышаныу бар. Башҡорттарҙың был йолаһы халҡыбыҙ араһында таралған тау культы менән тура-нан-тура бәйле.

# БОҘЛО АСҠЫН МӘМЕРЙӘҺЕ

**Боҙло Асҡын мәмерйәһе Архангел районының Асҡын ауылынан ике саҡрым алыҫлыҡта ята. Ауылдан уға тик йәйәүләп кенә барып була. Мәмерйә - федераль кимәлдә һаҡланыусы тәбиғәт һәйкәле. 2018 йылда Рус география йәмғиәтенә ҡуртымға бирелгән.**

Структураһы буйынса ул 104 метрға һуҙылған ҙур залды тәшкил итә. Мәмерйәнең киңлеге - 61 метр, ә бейеклеге урыны менән 26 метрға етә. Боҙло залда бейеклеге - 8-11 метрға, йыуанлығы 5 метрға тиклем еткән сталагмиттар үҫә, инеү урыны мәңгелек боҙлоҡ менән ҡапланған. Бында йәйен - плюс 4, ә ҡыныш гел 0 градус температура һаҡлана.

Мәмерйәгә инеү өсөн 70 метр ҡая буйлап үрмәләргә һәм баҫҡыстар буйлап 20 метр аҫҡа төшергә кәрәк.

Республиканың был тәбиғәт ҡомартҡыһы янында ҡунаҡ бүлмәһе булған һаҡ йорто төҙөлгән, тау йылғалары аша өс күпер һалынған, ҡыйыҡлы туҡталҡалар, беседкалар, бәҙрәфтәр, мәмерйә ауыҙына тиклем баҫҡыстар һалынған, эстә ут үткәрелгән.

Һаҡ йортонда мәғлүмәт стендтары, интернет бәйләнеше бар.

Мәмерйәгә инеү түләүле. 1 апрелдән 1 декабргәсә Асҡын мәмерйәһенә 10 кешенән дә артыҡ булмаған төркөмдәргә генә инергә рөхсәт ителә. Эстә 20 минуттан да артыҡ булырға ярамай. 2 декабрҙән 31 мартҡаса иһә төркөм һаны - 20 кешенән, ер аҫтында булыу ваҡыты 30 минуттан артмаҫҡа тейеш.

**Байгилде МОТАЛЛАП әҙерләне.**

*ИШАРАЛАП...*

**... Аҡылынан ситкә киткән, тиҙәр беҙҙең халыҡта. Алтындың бәхет килтермәүен раҫлаған мәҡәлдәр бихисап. Мәҫәлән, алтынға эйәргән юғалған, аҡылға эйәргән - юл алған, тип тә әйтәләр. Башҡортостанда башҡа ҡаҙылма байлыҡтар кеүек үк, алтын да киң таралған. Тормошомдоң бер осоронда минең үҙемдең дә был аҫыл металға туранан-тура ҡағылышым булды.**



# АЛТЫНҒА ИҪТӘРЕ КИТКӘН...

## Байлыҡ аяҡ аҫтында ла ул

Донъя баҙарҙарында алтынға хаҡтар артҡанда-арта бара. Биржала ул көн һайын тиғәндәй тарихи рекорд яңырта. 2025 йылдың 17 октябренә ҡарата алтындың троя унцияһы (31,1 грамы) 4300 долларға тиклем күтәрелде. Аналитиктар быйың сәбәптәрен Ер йөҙөндәге сәйәси тотороҡһоҙлоҡта, сауҙа һуғышының киң ҡолас ала барыуында, инвесторҙарҙың ҡағыҙ аҡсаға ышанмауында күрә.

Алтын ул - ҡәҙимге металл, химик элемент. Үҙенең уникаль сифаттарына бәйле бик боророндан аҡса, алыш-бирeш номиналы рәүешендә сауҙа әйләнешендә йөрөй. Тимер, башҡа металдар шикелле тутыҡмай, һыу ғына түгел, хатта кислота ла уны алмай. Баҙыҡ һары төҫкә эйә, һуҙып, йәйеп, еңел генә төрлө формаға биреп булғанға күрә уны борондан биҙәнеү әйберҙәре эшләү өсөн киң ҡулланғандар. Археологтар элекке замандан ҡалған ҡәберлектәрҙә шундай ҡомартҡыларға йыш юлыға. Өфөнөң археология һәм этнография музейында һаҡланған б.э. т. IV - V быуаттарға ҡараған донъяла тиңе булмаған уникаль сарматтарҙың алтын әйберҙәре генә ни тора бит!

Рәсәй үҙ алтынын тәү башлап беҙҙең Урал тауҙары приискаларында таба башлай. 1745 йылда бөгөнгө Свердловск өлкәһенең Березовск ҡалаһы янында алтын яткылығы асыла. Ә 1797 йылда бөгөнгө Силәбе өлкәһенең Мейәс ҡалаһы тирәһендә лә аҫыл металл эҙе булған мәғдәнгә юлығалар. Артабан Мейәс һәм Әй йылғалары үҙәнендә һибелмә алтын булыуы асыҡлана. 1814 йылда алтын бөртөктәрен ҡомдан айырыу ысулын камиллаштырыуға өлгәшәләр һәм ошо мәлдән Көньяҡ Уралда "алтын биҙгәге" башлана. Ул башлыса борондан башҡорттар йәшәгән тарихи биләмәләргә ҡағыла.

Мейәс йылғаһы буйындағы яткылыҡтар батша заманында уҡ меңәрләгән килограмм алтын бирә. Шул иҫәптән алты йөҙ самородок - ҙур дәүмәлдәге ҡиммәтле металл киҫәктәре табыла. Донъяла тиңе булмаған данлыҡлы "Ҙур өсмөйөш" самородогын 1842 йылда ҡаҙып алалар, уның ауырлығы 36 килограмм тарта. Мейәс йылғаһы буйында табылған 20 килограмдан ауырыраҡ самородок исеме тарихҡа билдәһеҙ башҡорт малайы иҫәбенә яҙылған. Был байлыҡтар Мәскәүҙә дәүләт Алмас фондында һаҡлана.

Хәҙерге Башҡортостан сиктәрендә алтын табыу эштәре тәүҙә бөгөнгө Учалы районына ҡараған ерҙәрҙә ойоштороla. Ә Баймаҡ, Бөрйән, Әбйәлил тарафтарында затлы металл мәғдәнен сығарыу революцияға тиклемге йылдарҙа данлыҡлы сәнәғәтселәр Рәмиевтар исеме менән бәйле. Әлбиттә, уларға тиклем дә алтын сығарылған. Тарихҡа Жемчужников, Гусятников, Голубев, Кибирев, Скворцов тигән фамилиялар аша ингән ул осор.

Ғаиләнең тау сәнәғәте буйынса кәсебен Ырымбур сауҙагәре ҡыҙы Хәнифә Әлмөхәмәт ҡыҙы Рәмиева башлап ебәрә. 1870 йылда ул Бөрйән олоҫо аҫаба башҡорттары менән приисксылар өсөн ерҙе ҡуртымға алыу тураһында килешеү төҙөй. 1880 йылда приискыларҙы ире Мөхәмәтсадиk Рәмиевҡа тапшыра. Артабан улар улдары Мөхәмәтзәкир һәм Мөхәмәтшакирға мираҫ булып күсә. Рәмиевтар хәҙерге Баймаҡ районы биләмәһенә ҡараған Ғәҙелша (Ғәҙелша шарлауығы янындағы бөткән ауыл) приискыһынан ғына яҡынса 52 бот, йәки 851,78 кг алтын сығара. Ошо уҡ район ерҙәрендә, Солтанҡул янында, Солтан приискыһы (бөгөнгө Күсей ауылы тирәһе) урынлаша. Унан 143 боттан ашыу, йәки 2,3 тоннаға яҡын алтын йыуып алалар.

Ғөмүмән, 1832 йылдан 1917 йылға тиклем республикабыҙ биләмәһендә 42 тоннаға яҡын алтын сығарыла. Үрҙә килтерелгән хаҡ менән, доллар курсын 80 һумдан һалып, уны бөгөнгө аҡсаға күсерһәк, 464 млрд һум була. Иҫ китмәле сумма! Сағыштырыу өсөн: 2025 йылға Баймаҡ районының бюджеты 2,3 млрд һум күләмендә ҡабул ителгән. Ике йөҙ тапҡырға аҙыраҡ!

Хәҙер бит алтын тағы ла күберәк табыла - йыл һайын 6 тоннаға тиклем. Асыҡ мәғлүмәттәрҙән билдәле булыуынса, бөгөн Башҡортостанда раҫланған алтын запасы 550 тонна тәшкил итә. Ғәҙәттәгесә, ул Учалы, Баймаҡ, Белорет, Хәйбулла, Әбйәлил, Бөрйән райондарында табыла. Разведкаланған 53 яткылыҡтың 17-һендә ҡаҙыу эштәре алып барыла.

## Ат башындай алтын тапҡан да ул...

1992 йылда Баймаҡ районының Күсмей ауылы янында механизатор Радик Үтәғолов 4,788 кг ауырлыҡтағы самородок таба. Уны "Ирәндек айыуы" тип атайҙар. Хәҙер алтын Башҡортостан Милли музейында һаҡлана.

Был ваҡиға тураһында гәзит-журналдар күп яҙҙы. Шулай ҙа хәтер яңыртып китеү урынлы булыр.

"10 май тирәһе ине, буғай. Сәсеү эштәре барған саҡ. Сәскескә орлоҡ тултырған мәлдә тракторҙан ситтәрәк ерҙән сығып торған әйбергә иғтибар иттем. Еҙ металл киҫәге һымаҡ ине ул. Бер йыл элек ошо урында һыу һибеү ҡоролмаһы янып киткәйне, шунан ятып ҡалғандыр, тип уйланым. Алдым да, кабинаға һалдым. Алтын икәне башыма ла килмәне. Табылдығым ун көн тирәһе трактор кабинаһында йөрөнө. Бәлки, берәй нәмәгә кәрәгер, тигән уйҙа ишек алдына индереп ҡуйҙым. Күпмелер ваҡыт шунда ятты. Атайым элек эргәләге алтын приискыһында эшләне. Баяғы еҙ әйберҙе күргән дә минән: "Быны ҡайҙан алдың?" - тип һораны һәм уны тикшереп ҡарарға булды. Градусниктың онтап, терегөмөшөн алды ла һары металдың бер осон уның менән ышҡырға тотондо. Шунан: "Был алтын да баһа!" тип иҫе китте", - тип һөйләй Радик Үтәғолов.

Хәбәр таралып китә. Күпмелер ваҡыт үткәс, Үтәғоловтар йортона капитан званиеһындағы милиционер килеп инә. "Һинме Радик? Тапҡан алтының ҡайҙа? Күрһәт!" - ти ҡәтғи төҫтә. Ул акт төҙөй һәм алтынды үҙе менән алып китә.

Ике йыл үткәс, алтын мажараһын билдәле башҡорт журналисы тағы күтәреп сыға, табыш өсөн бер тин дә түләмәүҙәре тураһында ла яҙа. Ошонан һуң Радик Үтәғоловҡа район финанс бүлеге аша 4,9 млн һум аҡса бирәләр. Уға ул ҡулдан 1975 йылда сыҡҡан "Жигули" автомашинаһы һәм телевизор һатып ала.

Табыусыға дәүләт, законға ярашлы, хазина хаҡының 25 процентын түләй. Ошоно иҫәпкә алып, һәр кем "Ирәндек айыуы" өсөн бөгөн күпме тейеш булыуын үҙе сығарып ҡарай ала.

Быйыл яҙыусы Янибай Хамматовтың тыуыуына 100 йыл тулды. Ошо айҡанлы "Алтын юлағым" автобиографик романы китап булып донъя күрҙе. Әҫәрҙең тәүге бүлегендә тыуған ауылы Исмаҡай тирәһендә алтын йыуыуға бәйле ваҡиғалар ҙа һүрәтләнә. Атаһы: "Әрҙәнә әҙерләү эше ары торһон! "Большой ключ" тигән ерҙә алтын күпләп табыла, ти. Шунда барып, мин дә хазина эҙләргә тотонам!" - тип алтын приискыһына китә бәхетен һынап ҡарарға. Бер аҙ эшләгәс, етем үҫкән балаларына, һеҙгә яңы әсәй алам, ти ҙә, бер көн үҙенән утыҙ йәштәр самаһы кесе ҡатын менән ҡайтып инә. Тик ул аҙғын булып сыға. Бергә кәйеф-сафа ҡорған әхирәте: "Карттың нимәһенә ҡыҙыҡтың? - тип һорай. "Үҙем дә аптырайым. Самарутка табып, алтын лавкаһынан бик күп ашамлыҡтар һатып алыуына ҡыҙыҡҡанмындыр, бәлки", - тип яуаплай ҡатын.

"Ауыл кәртәһенән сығырға ла өлгөрмәнек, беҙгә туған тейешле бер кешенең өйө янында күнел асҡан ауылдаштар төркөмөн күрҙек. Шаушыу ҡубарып, улар ҡысҡырышты, таҡмаҡ әйтеп тыпыр-тыпыр бейене. Шуны күҙәткән күсер баш сайҡаны.

- Ай-һай, яман ҡылана бит туғанығыҙ! Өсөнсө аҙна буйы теттерә! Бағырашты буйында тапҡан самаруткаһын эсеп бөтмәйенсә туҡтамаҫ, ахыры!"

Романдағы ваҡиғалар үткән быуаттың 30-сы йылдарына ҡағыла. Ислам ҡануниәтенә ярашлы тәрбиә алған, әле дин тулыһынса тыйылмаған башҡорт ауылы кешеләрен алтын аҙғынлыҡҡа, эскелеккә этәрә шулай.

(Дауамы 13-сө биттә).

✓ *Ҡариҙел, Танып буйы башҡорттары, ғәйнә башҡорттары атаһының ағаһын абыз бабай, атаһының апаһын абыз әбей, оло ҡатын-ҡыҙҙы ололап абыз әней тип йөрөтә.*



*ТАРИХИ ЙЫЛЪЯҘМА*

# ӨС ЙЫЛҒА САТЫНДАҒЫ ҠАЛА,

## йәки Нисә йәш һиңә, Өфө?

**(Салауат Хәмиҙуллиндың видеофильмы буйынса)**



***Салауат Хәмиҙуллин:*** Шөғөр Күккүҙев һәм уның иптәштәре ҡала тарихында тәрән эҙ ҡалдырған. Быны Шугуровка йылғаһы ғына түгел, хәҙер ҡала кешеләре яратып ял иткән Салауат Юлаев исемендәге баҡса урынлашҡан ҡалҡыулыҡ та раҫлай: XVII-XVIII быуаттарҙа уны Шөғөр тауы тип атап йөрөткәндәр. Өфөнөң 300 йыллығын билдәләгән саҡта Николай Гурвич пафос менән ошолай тип яҙған: "...отнюдь не следует заключить, что юбилейный праздник города Уфы составляет торжество только христианского населения Уфы - отнюдь нет: оно торжество русских людей, верноподданных царя, и, конечно, в том числе магометан, а главное - башкир...".

Бер нисә тиҫтә йылдан һуң Өфө һәм ил тормошонда революцион үҙгәрештәр башлана. Әүәл ҡаланы нигеҙләү датаһы батша Александра II резолюцияһы менән раҫланған хәлдә лә ул элекке әһәмиәтен юғалта. Совет осоронда Александр-Нева часовняһы емертелә һәм 1886 йылда ҡаланың 300 йыллығын байрам итеүҙең төп матди дәлиле юҡ ителә.

Шулай итеп, ҡаланың иртә тарихы яңынан билдәһеҙгә әйләнә, һәм уны, волюнтаризмға барып, КПСС-тың Башҡортостан обкомының 1-се секретары Миҙхәт Закир улы Шакиров үҙе яҙҙырта: уның теләгенә ярашлы, иҫке, әммә легендар датаға - 1574 йылға кире ҡайтырға ҡарар ителә.

***Рәмил Рәхимов:*** Шакиров ни өсөн ошо темаға тотонорға булған? Миҙхәт Шакиров, республика етәксеһе булараҡ, тағы ла бер ҙур байрам уҙғарырға теләй. Байрамға ҡунаҡтар саҡырыла, финанс сығымдары бүленә. Совет осоронда һәр бер сараны финанслау нормативтар буйынса башҡарыла, ул мотлаҡ рәүештә нигеҙләнеп, планға индереү өсөн СССР Госпланына мөрәжәғәт ителә. Быға тиклем дә төрлө юбилейҙар бер-бер артлы уҙғарылып тора: В.И. Ленин Өфөлә булып киткән, һәм уның 100 йыллығы 1970 йылда киң билдәләнә, 1972 йылда СССР-ҙың 50 йыллығы айҡанлы республика Халыҡтар дуҫлығы ордены менән бүләкләнә, 1975 йылда Бөйөк Еңеүгә 30 йыл тулыуҙы ла тантаналы рәүештә билдәләргә әҙерләнәләр. 1974 йылда Өфөлә сираттағы байрамды уҙғарыу СССР бюджетынан тейешле финанс сығымдары алыу йәһәтенән дә бик мөһим була. Һөҙөмтәлә Өфө ҡалаһы, СССР Юғары Советы Президиумының 1974 йылдың 27 ноябрендәге Указына ярашлы, Октябрь революцияһы орденына лайыҡ була. Президиум грамотаһында был награда ҡала хеҙмәтсәндәренең хужалыҡта һәм мәҙәни төҙөлөштә күрһәткән ҙур уңыштары, революцион хәрәкәттәге хеҙмәттәре һәм ҡаланың 400 йыллығы айҡанлы бирелә, тип яҙылған.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Тик фән дә бер урында ғына тормай бит. 2006 йылда археолог Нияз Мәжитов ҡаланың Зәки Вәлиди, Пушкин, Яңы түшәлгән урам һәм Салауат Юлаев проспекты менән сикләнгән үҙәк өлөшөндә археологик ҡаҙыу эштәре алып бара, был объект Өфө-2 ҡаласығы исеме менән билдәле.

Дүрт метр тәрәнлегендәге мәҙәни ҡатлам, шулай уҡ бында табылған бай материал профессор Мәжитовҡа ошо археология ҡомартҡыһының тәүге осорон б.э. IV-V быуаттары менән бәйләп аңлатырға ерлек бирҙе. Үҙаллы, бер ниндәй ойошмаға ла буйһонмаған экспертизалар уның ошо осорҙа бында ҡала булыуы тураһындағы һығымтаһын раҫланы.

***Сергей Боталов, тарих фәндәре докторы, РФА Урал бүлеге Тарих һәм археология институты Көньяҡ-Урал филиалының әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәре:*** Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитов үҙ ваҡытында бигерәк тә ошо объектты өлөшләтә тикшереү һәм һаҡлау тураһында ҡарар ҡабул ителеү менән фәнгә бына тигән бүләк эшләне. Ҡаламы, түгелме, тигән һорауҙы ҡуҙғатмаҫҡа кәрәк: һис шикһеҙ, бында ҡала булған, ҡомартҡы материалдары ҡалаларға хас барса параметрҙарға тап килә. Был - Евразияның иң төньяҡ сигендәге ҡала. Бөгөн бында гигант күләмдә тип әйтерлек материал тупланған, ул тикшеренеүселәрҙең бер нисә быуынына етерлек.

**(Дауамы. Башы 37-44-се, 46-сы һандарҙа).**

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*

# БАШҠОРТ АБЫЗДАРЫ ҺӘМ БАТЫРҘАРЫ

Халыҡтың ирке өсөн көрәштә абызсылыҡ традицияларын 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында Кинйә абыз Арыҫланов һәм уның тиҫтәләгән яу башлыҡтары ҡәләм һәм ҡорал көсө менән дә уңышлы дауам итә.

XVIII быуат аҙағында башҡорт восстаниелары тамам баҫтырылып, унда ҡатнашыусыларҙың күбеһе, яу башлыҡтары, идеологтары язаланып үлтерелгәндән йәки мәңгегә һөргөнгә ебәрелгәндән һуң, азатлыҡ көрәше тамам һүрелеп ҡала. Ил, халыҡ яҙмышына бәйле дипломатик эштәр менән шөғөлләнер, азатлыҡ көрәшен етәкләр абыздар өсөн ерлек һәм мөмкинлектәр юҡҡа сыға йә бик ныҡ тарая.

XIX быуат башынан башлап инде абыздар тип белемле һәм абруйлы үҙ кешеләрен генә ололап әйтәләр. Абыз төшөнсәһенең мәғәнәһе тора-бара тағы тарайыңҡырап, өлкән туған-тыумасаларҙы атауға, туғанлыҡ төшөнсәһен аңлатыуғаса төшә. Хәҙерге көндә башҡорттар араһында ла абыз һүҙе ҡайһы бер һөйләштәрҙә ана шул туғанлыҡ атамаһы рәүешендә таралған. Мәҫәлән, Ҡариҙел, Танып буйы башҡорттары, ғәйнә башҡорттары атаһының ағаһын абыз бабай, атаһының апаһын абыз әбей, оло ҡатын-ҡыҙҙы ололап абыз әней тип йөрөтә. Абыз ағай һүҙен ҡыҫҡартып әйтеүҙән абызый, абыз түтәй һүҙен ҡыҫҡартыуҙан абыстай һүҙе нығынып киткән.

Л. З. Будаговтың 1869 йылда сыҡҡан төрки телдәренең сағыштырма һүҙлегенә ҡарағанда, башҡорттарҙа әсә кешене абыз әсә, абызасә тип исемләү ҙә булған икән. Был һүҙлек буйынса, башҡорттарҙа уҡыу, белем алыу мәғәнәһендә абызламаҡ, абыз итмәк һүҙе лә ҡулланылған. Ғилемле, культуралы кешене абыз кеше тип атау ҙа йәшәй оло йәштәгеләр телендә. Хәҙерге беҙҙең әҙәби телебеҙҙә лә абыз һүҙе ана шул белемле, уҡымышлы кеше мәғәнәһендә һаҡланып ҡалған.

Йыйып әйткәндә, абыз атамаһы тәүҙә "Ҡөрьән"де яттан белгән Ҡөрьән-хафиз исеменән әйтелеш рәүеше үҙгәргән абыз һүҙенә әүерелгән. Ул инде урта быуаттарҙа дини белемле, ғилеме менән ил-йәмәғәт тормошонда ҙур урын тотҡан ил ағаһы, йәмәғәт эшмәкәре һәм абруйлы аҡыл эйәһе дәрәжәһен аңлатҡан исемгә әйләнгән. Башҡорт милли хәрәкәттәре, ихтилалдар дәүерендә яу, дау башлыҡтары, илселек вазифаларын үтәр ил азаматтары булып киткән. Был дәүерҙәге абыздар йәмғиәт фекерен ойоштороусы һәм формалаштырыусы, ижтимағи фекер, хикмәт эйәләре кимәлендә йөрөй.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**
**(Дауамы. Башы 42-44-се һандарҙа).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

Башҡорт аттарына махсус тәрбиә булмаған. Ҡолондар тыуыу менән урамда тотолған. Урман һәм ялан-урман өлөшөндә улар йыл әйләнәһенә тибендә йөрөгән, ҡайһы берҙә хатта ҡалын ҡар аҫтынан да үҙҙәренә аҙыҡ тапҡан. Ындай ваҡыттарҙа улар өсөн бейек үҫкән үҫентеләр, мәҫәлән, ҡылған, төп аҙыҡ булып торған. Көн буйына дала ҡыҙырып, көтөүсеһеҙ йөрөгән аттар төнгөлөккә елһеҙ урынға барып тупланған һәм бүреләрҙең һөжүмен кире ҡағыу маҡсатынан түңәрәк яһап торған.

Башҡорттар аттарҙы хәрәкәт итеү сараһы булараҡ ҡына түгел, уларҙың ите, һөтө өсөн тотҡан. Һәм йылҡысылыҡ продукттары уларҙың төп аҙығы булып торған, ә тиреһенән кейем-һалым теккәндәр һәм һауытһаба эшләгәндәр, ялынан еп яһағандар, уны тегенселектә файҙаланғандар.

Эре малдарҙы башҡорттар сағыштырмаса әҙерәк тотҡан; йәйләүгә сыҡҡанда уларҙың һаны аттарҙыҡына ҡарағанда ике-өс тапҡырға кәмерәк булған, күпселек осраҡта бер ғаиләгә бер-ике һауын һыйыры тура килгән.

Эре малдың да, аттар кеүек үк, йәше һәм енесе буйынса номенклатураһы эшләнгән. Т. Г. Байышев бынан тыш малдарҙың тыуған ваҡытына ла иғтибар иткән. Мәҫәлән, яҙын тыуған малдар быҙау тип аталған. Енесенә ҡарап, улар үгеҙ быҙау һәм орғасы быҙауға бүленгән. Йәйгеһен тыуған мал - сәңгәр (үгеҙ сәңгәр, орғасы сәңгәр); көҙгөһөн донъяға килгәне - һараяҡ (үгеҙ һараяҡ, орғасы һараяҡ). Яҙғыһын тыуып, көҙгәсә йөрөгән һәм бер йәшкә тиклемге быҙау башмаҡ тип аталған; йәйгеһен - сәңгәр башмаҡ, көҙгөһөн - һараяҡ башмаҡ. Бер йәштән ике йәшкә тиклем эре йәш мал үгеҙ тана йәки орғасы тана тип йөрөтөлгән.

Ике йәштән өс йәшкә тиклемге үгеҙ - ҡонан үгеҙ, өс йәштән дүрт йәшкә тиклемгеһе - дүнән үгеҙ, дүрт йәштән олоһо - үгеҙ, бестерелгәне беселгән үгеҙ тип аталған.

Ике йәштән алып икенсе тапҡыр быҙаулағанға тиклемге орғасы - тана һыйыр, артабан инде үлгәнгә тиклем һыйыр тип йөрөтөлгән. Бер тапҡыр ҙа быҙауламаған орғасы - тыуса, түлһеҙ - тыу һыйыр, сираттағы быҙаулау ваҡытында быҙауламағаны ҡыҫыр һыйыр булған.

Башҡорт һыйырҙары тоҡомо ҡатнаш була, улар төрлө төҫтәге азиат, атап әйткәндә, ҡаҙаҡ тоҡомонан, шулай уҡ урындағы һыйырҙарҙың рус тоҡомонан да бер нәмәһе менән дә айырылмаған. Был аңлашыла ла, сөнки борон-борондан (беҙҙең эраға тиклем икенсе мең йыллыҡ) Башҡортостанда эре һәм ваҡ тоҡомло һыйырҙар була. Ә боронғо тарихтан күренеүенсә, Көнсығыш менән дә, Көнбайыш менән дә эре мал менән алмашыу бик әүҙем бара. Башҡорт һыйыры уртаса буйлы, хатта бәләкәйерәк, килбәтһеҙерәк, башы түбән эйелгән, туҙғыған тупаҫ йөнлө, саманан тыш итле лә, һөтлө лә түгел, май ҡатламы запасы тупламаусан була. Ялан районларында XVII - XVIII быуаттарҙа эре мал ҡыш башында аттар менән бергә тибендә йөрөгән, XIX быуаттың икенсе яртыһынан, беҙгә мәғлүм булыуынса, ҡышын ауылдарҙа ҡураларҙа тотолған.

**(Дауамы бар).**

***✓ Башҡорт егеттәре егәрле лә, эшмәкәр ҙә, уларҙың ҡулынан килмәгән эше, белмәгән һөнәре юҡ. Шул уҡ ваҡытта яу килгәндә улар өйҙәрендә генә ултырып ҡала алмай. Сөнки, һин әйткәнсә, яугирлыҡ беҙҙең ҡанда.***



**Улар үҙҙәрен "беҙ ҡатай малайҙары" тип атап йөрөтә. Кемдәр тиһегеҙме? Улар: Махсус хәрби операция командирҙары, икеһе лә Белорет районы егеттәре БАЙДӘҮЛӘТОВ Мәжит Тәлғәт улы менән ШАҺИСОЛТАНОВ Азамат Фәнил улы. Яу командирҙары бөгөн "Башҡортостан батырҙары" тигән кадрҙар әҙерләү программаһында ҡатнаша. Улар менән әңгәмәне ҡайһы тәбәктән булыуҙары хаҡындағы һорау менән башлап ебәрҙек.**

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ -

**Иң тәүҙә үҙегеҙҙең сығышығыҙ: тыуған ерегеҙ, атай-әсәйегеҙ, һөнәрегеҙ, Махсус хәрби операцияһына тиклемге тормошоғоҙ, ғаиләгеҙ тураһында һөйләп китһәгеҙ ине?**

**Мәжит Байдәүләтов:** Мин 1981 йылда Белорет районының Көҙйылға ауылында тыуҙым. Шунда уҡ 23-сө (хәҙер 3-сө мәктәп) урта мәктәпте алтын миҙалға тамамланым. 1998 йылда Өфө авиация институтына уҡырға индем. Унда күпмелер уҡығас, үҙемдең дөрөҫ булмаған юлдан барыуымды аңлап, институтты ташлап, Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетына инеп, уҡый башланым. 2004 йылда тарих факультетын тамамлағандан һуң, артабан университеттың хәрби кафедраһында уҡып алған офицер званиеһы нигеҙендә взвод командиры сифатында әрмегә алындым. Шул мәлемдән алып хәрби хеҙмәттәмен. Взвод командирынан алып полктың штаб начальнигына тиклем хәрби хеҙмәт юлы үттем. 2016 йылда Сирияла террорсыларға ҡаршы көрәштә үҙемдең хәрби һуғыш юлымды башланым. 2018-2019 йылдарҙа Дайразор ҡалаһы янындағы алышта 670 һалдаттан торған полкты етәкләнем. Полктың 147 һалдаты Рәсәй армияһыныҡы булһа, ҡалғандары Сирия, Иран яугирҙарын тәшкил итте. Һуғыштағы тәүге сирҡанысты тап шунда алдым.

**Азамат Шаһисолтанов:** Беҙ Мәжит менән - яҡташтар, ҡатай малайҙары. 1985 йылда Сермән ауылында тыуҙым. Артабан атайымдың тыуған ауылы Йөйәккә күстек. Йөйәк урта мәктәбен тамамлағандан һуң, Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетында белем алдым. Артабан Башҡортостан Республикаһы Президенты һағы начальнигы урынбаҫары булып эшләнем. Бала саҡтан хәрби кеше йә нефтсе булырға хыяллана инем. Шуға күрә хыялым мине Яңы Уренгойға алып килде. Атайым да: "Пиджәктәр артынан йүгереү еткәндер, ҡәҙимге кеше булырға ваҡыт һиңә!"- тип мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйҙы. Кәрәкле йүнәлештә нефть сәнәғәтенә белгестәр әҙерләй торған махсус уҡыу йортон тамамланым һәм нефть промыслыһында 8-се категориялы инженер дәрәжәһенә тиклем күтәрелдем.

**Махсус хәрби операция башланыуын нисек ҡабул иттегеҙ. Унда үҙ теләгегеҙ менән ҡатнашырға булдығыҙмы?**

**Мәжит Байдәүләтов:** Хәрби хеҙмәттә йөрөгән кеше булараҡ, Махсус хәрби операцияла ҡатнашыу миңә хәрби бурыс үтәү менән бер ине. 2022 йылда Владимир өлкәһендә батальон командиры вазифаһында хеҙмәт иттем башта. Шул саҡ полк командиры урынбаҫары итеп тәғәйенләндем. Махсус хәрби операция башланғас, шул полк составында һуғышҡа китеү мөмкинлегем дә бар ине. Башҡортостан Республикаһы башлығы Радий Хәбиров тарафынан Рәсәй Геройы Александр Достовалов исемендәге 2-се ирекле батальонды етәкләргә саҡырыу алдым. Полк командиры урынбаҫары булараҡ та Махсус хәрби операцияға китә ала инем, әммә яҡташтарым менән бергә булыуҙы һайланым. 2022 йылдың 11 июлендә батальон формалашҡан ергә килдем. Ә инде 14 июлдә Махсус хәрби операция үткән ергә киттек. Түбәнге Новгородта ай һуҙымында яуға әҙерлек үттек тә, август айында Таганрог тарафына юлландыҡ. Артабан 4 сентябрҙә илебеҙ сиген үттек һәм йыл һуҙымында батальон алдына ҡуйылған хәрби бурысты үтәнек. Запорожье өлкәһендә Махсус хәрби операцияның иң ҡыҙыу урынында бер нисә сәғәт һуҙымында дошманды километрҙан ашыу ергә сигенергә мәжбүр итеп, ун алты көн һуҙымында ярҙам килгәнен көттөк. Шул саҡта 5-се рота айырыуса батырлыҡ күрһәтте. Ҡалған роталар Орехов, Херсон йүнәлешендә алышты. Бик күп егеттәребеҙ батырҙарса һәләк булды.

***Бер алыш ваҡытында барыбыҙ ҙа башҡорт телендә аралашыуға күстек. Мин шундай фарман бирҙем: "Әгәр ҙә рота командиры рус кешеһе һәм башҡорт телен аңламай икән, янында тәржемәсе сифатында башҡорт яугирын торорға тейеш..." Ул яугир командирҙың фармандарын подразделениеға башҡорт телендә еткерергә тейеш. Был алым беҙгә йылдам алға барырға һәм позицияны торорға ярҙам итте.***

Ошо уҡ йылдың ноябрендә беҙҙе Белогуровкаға ҡуйҙылар. Унда беҙ март айына тиклем позиция тоттоҡ. Был саҡта инде хәрби хәрәкәттең яңы төрө барлыҡҡа килгәйне. Яңы этапты дрондар алышы тип атайбыҙ. Мартта беҙ Донецк Халыҡ Республикаһы территорияһына йүнәлдек. Артабан отпускҡа китеп, 31-се "Башҡортостан" мотоуҡсылар полкына күстем, ул саҡта полк формалашҡайны. Полк Һамар өлкәһендә әҙерлек үтте. 30 июлдә командир урынбаҫары вазифаһында ошо полкта хеҙмәт итә башланым. Август аҙағында полк Махсус хәрби операцияның иң ҡыҙыу нөктәһенә инде һәм әле лә шул йүнәлештә хәрәкәт итә. Сентябрҙә штаб начальнигы итеп тәғәйенләнеләр һәм мин ул вазифаны 2025 йылдың 28 ғинуарына тиклем үтәнем.

**Азамат Шаһисолтанов:** 2022 йылдың 24 февралендә атайым миңә Яңы Уренгойға шылтыратып, Махсус хәрби операция башланыуы, Донбаста туптар ярылыуы тураһында хәбәр итте. Интернет насар эшләй ине, шуға был хаҡта мәғлүмәтте миңә үҙенең ғүмерен хәрби хеҙмәткә арнаған атайым еткерҙе. Уның шылтыратыуы миңә фарман булып яңғыраны. Уйланырға, икеләнергә атайым урын да, ваҡыт та ҡалдырманы. 10 мартта мин Яңы Уренгойҙан Грозныйға сығып киттем дә, "Әхмәт" спецназы менән контракт төҙөнөм. 15 мартта ЛНР-ҙа инем инде. Хәрби хәрәкәтте отделение командиры булараҡ башланым да, рота командирына, батальон командиры урынбаҫарына тиклем барып еттем. Бер яуҙа ҡамауға эләктек, унда ҡаты яраландым. Башҡорттарҙан уларҙың батальонында беҙ ике кеше булдыҡ, икенсе егет Әлшәй районынан ине. "Әхмәт" яугирҙарына беҙ Бөйөк Ватан һуғышында ойошторолған кавалерия дивизияһы, уның тап Махсус хәрби операция үткән ерҙәрҙә күрһәткән батырлығы тураһында күп мәғлүмәт еткерҙек.

**Ә беҙҙең республикала үҙ эшмәкәрлеген башлаған "Башҡортостан батырҙары" тигән программа буйынса командаға нисек эләктегеҙ?**

**Мәжит Байдәүләтов:** 2024 йылдың июлендә команда пункты артиллерия һөжүменә эләкте. Яраланғандан һуң эвакуацияға эләктем һәм мине дауаланырға Башҡортостанға ебәрҙеләр. Ҡыуатов исемендәге Республика дауаханаһында операция яһанылар. Яраларым уңалғас, ошо уҡ йылдың октябрь айында хәрби дуҫтарым янына әйләнеп ҡайттым. Октябрь аҙағында хәҙер инде яңы урында тағы ла яраландым. Тағы ла эвакуацияға эләгеп, табиптарҙың һығымтаһы буйынса мине артабан хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ тип таптылар.

Хәрби хәрәкәттәрҙә тупланған тәжрибәм ҙур булғанлыҡтан, Радий Хәбировтың инициативаһы менән республикабыҙҙа ойошторолған "Башҡортостан батырҙары" программаһы буйынса ике мең кеше араһынан етмеш кеше һайланып алынып, мин дә шул командаға индем. Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡуйған бурыс буйынса Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яугирҙарҙан торған етәкселек командаһы төҙөлә. Был программала ҡатнашыусылар - теге йәки был сәбәп менән хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ тип табылыусылар. Беҙҙе бында граждanлыҡ хеҙмәтендә етәкселек итеү серҙәренә өйрәтәләр.

**Азамат Шаһисолтанов:** "Башҡортостан батырҙары" проектында ҡатнашыуыма мине лә Махсус хәрби операцияла ҡаты яраланыуым алып килде. Унда йөрөүселәр барыһы ла утты-һыуҙы кискән, дәһшәтле һуғышта йәрәхәт алған батырҙар.

**Рәсәй Президенты Владимир Путин Башҡортостандың 1-се Президенты Мортаза Рәхимовты һуңғы юлға оҙата килгәндә биргән интервьюһында Рәсәй армияһындағы башҡорт яугиры феномены хаҡында әйтеп үткәйне. Утлы яуҙы үткән командирҙар булараҡ, һеҙ яуҙа йөрөгән беҙҙең егеттәрҙе нисек баһалайһығыҙ?**

**Азамат Шаһисолтанов:** Яугирлыҡ беҙҙең ҡанда. Әгәр ҙә башҡорт егете алдында ер һөрөргәме, яуҙа йөрөргәме тигән һайлау торһа, күбеһе икенсе юлды һайлар ине. Был минең шәхси фекерем. Махсус хәрби операция башланғас та күп кенә башҡорт егеттәре үҙ теләге менән яуға китте. Улар был аҙымға бармай, бында ла тороп ҡала алырҙар ине.

**Мәжит Байдәүләтов:** Мин һинең фекерең менән тулыһынса килешеп бөтмәйем, Азамат. Башҡорт егеттәре егәрле лә, эшмәкәр ҙә, уларҙың ҡулынан килмәгән эше, белмәгән һөнәре юҡ. Шул уҡ ваҡытта яу килгәндә улар өйҙәрендә генә ултырып ҡала алмай. Сөнки, һин әйткәнсә, яугирлыҡ беҙҙең ҡанда. 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт яугирҙары менән йөҙгә-йөҙ бәрелешкәндә дошманда паника башланған, Махсус хәрби операцияла ла шул уҡ хәлдәр ҡабатланды. 2022 йылда минең 5-се рота миҫалында ла быны күрергә мөмкин булды. Командир мине саҡырып алды ла: "Башҡорттар нимәгә һәләтле икәнлеген иҫбат ит", - тине. Һөҙөмтәлә улар көтмәгәнсә килеп сыҡты. Быға тиклем беҙҙекеләр илле-йөҙ метрҙы бер нисә аҙнала яулаһа,

## Беҙ яуҙа

бында башҡорттар өс сәғәт эсендә километрҙан ашыу ерҙе яуланы. Мин үҙем дә ошо рота менән алға барҙым.

Бер алыш ваҡытында барыбыҙ ҙа башҡорт телендә аралашыуға күстек. Мин шундай фарман бирҙем: "Әгәр ҙә рота командиры рус кешеһе һәм башҡорт телен аңламай икән, янында тәржемәсе сифатында башҡорт яугирын торорға тейеш..." Ул яугир командирҙың фармандарын подразделениеға башҡорт телендә еткерергә тейеш. Был алым беҙгә йылдам алға барырға һәм позицияны торорға ярҙам итте.

**Был ысул башҡорт егеттәренең рухын күтәрергә булышлыҡ итә тиһегеҙме?**

**Мәжит Байдәүләтов:** Тап шулай. Туған тел рухты ла күтәрә, янында милләттәшеңде, ҡандашыңды тойоуҙан да көслөрәк берҙәмлек донъяла юҡтыр. Шул уҡ ваҡытта дошман да һинең телеңде аңлай алмайынса, яңылыш маневрҙар яһарға, паникаға бирелергә мәжбүр була.

**Азамат Шаһисолтанов:** Беҙҙә ун алты халыҡ вәкиленән торған бер хәрби подразделениела башҡорттарҙан тыш, татарҙар, тывалар, яҡуттар, ҡарасәйҙәр, балкарҙар, ҡумыҡтар һ.б. бар ине. Барыһына ла рация бирҙеләр һәм үҙ телдәребеҙҙә аралаша башланыҡ һәм асылда төрки телдәрҙә аралашҡан бер-беребеҙҙе тәржемәсеһеҙ ҙә аңланыҡ. Һөйләшеүҙе рация аша ишеткән дошмандар беҙҙең хаҡта "Ниндәйҙер музыкаль телдәрҙә аралашалар, бер нәмә лә аңламаныҡ", тигәндәр. Бәлки, улар өсөн беҙҙең тел музыкаль булып тойолғандыр, үҙебеҙгә ҡалһа, беҙ уны яу теле тип атаныҡ.

**Мәжит, Азамат, һеҙ төрлө сәбәптәр табып Махсус хәрби операцияға бармай ҙа ҡала**

*✓ Мин был операцияла бай тәжрибә тупланым, кеше ҡәҙерен белергә, кешеләрҙе бер-береһенән айырырға өйрәндем. Әлеге ваҡытта был һуғыштың тиҙерәк һәм беҙҙең еңеү менән тамамланыуын теләйем.*



# ЯУГИРЛЫҠ ТЕЛЕ ЛӘ...

## шуға ла инандыҡ

**ала инегеҙ. Ә һеҙҙең был аҙымды яһауҙа тарих факультетында уҡыуығыҙ йоғонто яһанымы?**

**Мәжит Байдәүләтов:** Ҡайһы юлдан китергә тигән юл саты булманы минең алда. Үҙен ихтирам иткән һәр ир-ат был осраҡта берҙән-бер юл һайлайҙыр. Тарих факультетында уҡыуҙың йоғонтоһона килгәндә, әлбиттә, беҙ ул факультетта уҡығанда башҡорт халҡының тарихын, уның хәрби үткәнен өйрәндек. Башҡортостандың, Рәсәйҙең тарихын да унда уҡып белдек. Беҙ башҡорттарҙың донъя, илебеҙ тарихындағы шанлы ваҡиғаларҙа нисек ҡатнашыуына ла шаһит булдыҡ. Беҙгә Салауат Юлаев батырлығы, 1812 йылдағы "Төньяҡ амурҙары", Бөйөк Ватан һуғышында кавалерия дивизияһы яугирҙары ҡаһарманлығы яҡшы таныш. Шулай уҡ атай-әсәйҙәребеҙ биргән тәрбиә лә бында үҙ ролен уйнаны һәм үҙебеҙҙе ир-ат итеп тойорға булышлыҡ итте. Улар беҙгә халҡың менән бергә булырға, антыңа тоғро ҡалырға, илһөйәрлеккә өйрәтте. Былар һәр бер башҡортҡа хас сифат һанала.

**Азамат Шаһисолтанов:** Тарих факультетында уҡыуҙың, әлбиттә, йоғонтоһо ҙур булды. Беҙ унда уҡып, тарихи хәҡиҡәтте бар тулылығында аңларға өйрәндек. Мәжит менән килешәм, илһөйәрлек, һис шикһеҙ, сәңгелдәктән, тыуған йорттан башлана. Миңә бала саҡтан Муса Мортазин, Даян Мурзин кеүек батырҙарыбыҙ кумирҙарым булды. "Ҡара генерал" Даян Мурзинды, мәҫәлән, Гитлер "шәхси дошманым" тип атаған. Даян Мурзин етәкләгән партизандар отрядына ҡаршы фашистар тотош эсэстарҙан торған дивизияны йүнәлтә. "Ҡорос нисек сыныҡты?" романында Павел Корчагиндың ҡаһарманлығына һоҡланған, Толстойҙы, Лермонтовты уҡыған кешеләр булараҡ, беҙ Махсус хәрби операциянан бер нисек тә ситтә була алманыҡ.

**Махсус хәрби операцияла ҡатнашыу һеҙҙең тормошҡа ҡарашығыҙҙы ниндәй кимәлдә үҙгәртте? Күптәр дингә килеүе, намаҙ уҡый башлауы хаҡында әйтә.**

**Азамат Шаһисолтанов:** Мин кесе йәштән алып намаҙ уҡыйым. МХО-ға тиклем ни өсөн йәшәүемде аңлай алмағайным. Хәҙер минең өсөн элек мөһим булып тойолған проблемалар бөтөнләй юҡҡа сыҡты. Хоҙай биргән һәр көн өсөн ҡыуанып йәшәргә өйрәндем. Хәҙер бына "Башҡортостан батырҙары" проектында ҡатнашып, тыуған илемә, республикама, халҡыма ниндәйҙер бәләкәй генә булһа ла файҙа килтерермен тип ышанам. Элек был хаҡта уйлап та ҡарағаным булманы. Тормошҡа ябайлаштырып ҡарай башланым. Күп кенә ваҡиғаларҙы күҙгә лә элмәйем, сөнки тағы ла мөһимерәк әйберҙәр булғанлығын беләм. Тыуған илемә һөйөүем дә көсәйҙе.

**Мәжит Байдәүләтов:** Мин бер ҡасан да Хоҙайға мөрәжәғәт иткәнем булманы. "Бонус" позывнойлы замполитыбыҙ бер ваҡытта беҙҙәге эфирҙа: "Окоптарҙа атеистар ҡалмай", - тигәйне. Барыһы ла Хоҙайға мөрәжәғәт итә. Миңә үлемгә бер нисә аҙымда, бер нисә секунд арауығында ҡалырға тура килде, әммә ул саҡтарҙа ла Хоҙайҙы иҫкә алманым.

**Әммә Хоҙай һеҙҙе әжәлдән алып ҡалған бит барыбер ҙә...**

**Мәжит Байдәүләтов:** Шулайҙыр. Ҡасандыр Уға мөрәжәғәт итеремде лә беләм. Ул саҡта рәхмәтемде лә белдерермен, әммә әлегә шулай. Махсус хәрби операцияға килгәндә, илебеҙ Президенты әйткәнсә, беҙ уны бик һуң башланыҡ. Беҙ был һуғышҡа оҙаҡ әҙерләндек, һәм ул һынау беҙгә килде. Мин дә шул уҡ фекерҙә. Мин был операцияла бай тәжрибә тупланым, кеше ҡәҙерен белергә, кешеләрҙе бер-береһенән айырырға өйрәндем. Әлеге ваҡытта был һуғыштың тиҙерәк һәм беҙҙең еңеү менән тамамланыуын теләйем.

**Беҙ кинокартиналарҙан Бөйөк Ватан һуғышын ҡарап үҫтек. Унда һалдаттар ҡулдарына автомат тотоп, "Ура" ҡысҡырып алға барҙы. Әлеге Махсус хәрби операцияны "башҡа төрлө һуғыш" тип атайҙар. Быны нисек аңлата алаһығыҙ?**

**Мәжит Байдәүләтов:** Мин 2017 йылда Сирияла дрондар һөжүменә шаһит булдым. Әлбиттә, улар хәҙергеләре менән сағыштырырлыҡ та түгел Унда беҙ үҙебеҙҙә булған барлыҡ төр ҡоралдарҙан аттыҡ. Хәҙер һуғыш тактикаһы үҙгәрҙе, унда штурм төркөмдәре хәрәкәт итә. Мәҫәлән, беҙҙең "Башҡортостан" батальоны яуға ингәндә подразделение 6-7 яугирҙан торған төркөмдәргә бүленеп хәрәкәт итте. Ә штурм отряды 100 кешенән күберәк. Был бик ҡеүәтле көстө тәшкил итте. Ул саҡта беҙ бик йылдам рәүештә алға бара алдыҡ. Артабан йылдан ашыу ваҡыт үткәс, һауала дрондар пәйҙә булды. Шулай итеп, операция башындағы тактика иҫкереп өлгөрҙө. Хәҙер һәр бер штурм төркөмөн дрондар оҙатып бара. Оператор дрондар ярҙамында штурм хәрәкәте менән етәкселек итә. Штурмсылар хәҙер позицияларҙа бер тәүлектән артыҡ ваҡытҡа ҡалырға тейеш түгел. Әгәр ҙә командир һалдаттарын артабанғы хәрәкәт өсөн һаҡларға теләһә, ул позицияларҙан, блиндаждарҙан сығарырға бурыслы. Тағы ла бер ҡурҡыныс: әгәр ҙә дошман позицияһын юғалтыуын аңлаһа, унда артиллериянарҙан, танкыларҙан һәм башҡа төрлө ҡоралдан ут асып, позицияһын ер менән тигеҙләй. Тимәк был осраҡта беҙҙең яугирҙар ҙа ул позициянан китеп торорға тейеш. Күп осраҡта яуланған позицияны нығытырға килгән подразделениелар күберәк юғалтыу кисерә. Хәҙер хәрби техника күп осраҡта бөтөнләй файҙаланылмай тиерлек. Беҙ элек яу яланында танк колонналарын, тура ут асыу дистанцияларын күрһәк, улар хәҙер юҡ. Хатта БМП машиналары ла йәшерен позицияларҙан ғына тороп ата ала. Танктар иһә яу барған ерҙән алты саҡрым һәм унан да алыҫыраҡ урындарға урынлаша. Хәҙер командирҙар подразделениеға боеприпастарҙы һәм аҙыҡ-түлекте эре техника менән алып килмәй, сөнки уларҙы алғы һыҙыҡтан күпкә алыҫ урында уҡ утҡа тоталар. Был осраҡта ҡытайҙарҙың махсус техникаһы һәм гуманитар ярҙам менән килгән техника файҙаланыла. Хәҙер боеприпастарҙы, аҙыҡ-түлекте дрондар ярҙамында ташыу күҙ уңында тотола.

**Азамат Шаһисолтанов:** 2022 йылда беҙ яуға ингән саҡта Мәжит әйткән штурм хәрәкәттәре бар ине әле. Хәҙер технология, уға ярашлы тактика ла үҙгәрҙе. Асылда, хәҙер кешеләр технология ярҙамында хәрәкәт итә. Улай ғына ла түгел, һәр ярты йыл һайын һуғыш хәрәкәттәре үҙгәреп тора. Был фәндең, хәрби техниканың үҫеше менән дә бәйле. Кемдәр артта ҡала, шулар яуҙа ла еңелә инде. Был һуғыш лакмус ҡағыҙы кеүек, өҫтөнлөктәребеҙ менән бер үк ваҡытта беҙҙең етешһеҙлектәрҙе лә асып һалды. Бөгөн идеологиялар һәм технологиялар алышы - гибрид һуғыш бара. Донъя бындай һуғышты күргәне юҡ ине әле.

**Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан бер башҡорт егете миңә: "Халҡым өсөн һуғышам. Халҡымды һаҡлар өсөн - Башҡортостанды, Башҡортостанды һаҡлар өсөн Рәсәй Федерацияһын һаҡларға кәрәк", - тип яуап биргәйне. Һеҙ был егет менән килешәһегеҙме?**

**Азамат Шаһисолтанов:** 100 процентҡа килешәм. Башҡортостанда башҡорттарҙан тыш йөҙләгән халыҡ вәкилдәре йәшәй. Улар ҙа был хәҡиҡәтте дөрөҫ аңлай, Махсус хәрби операция барған ерҙә уларҙың барыһын да башҡорт тип беләләр.

**Мәжит Байдәүләтов:** Әгәр ҙә башҡорт егете шундай инаныу менән яуға инмәһә, донъя Владимир Путин әйткән Рәсәй армияһындағы башҡорт яугиры феноменын да белмәгән булыр ине.

**Мәжит, Азамат, фәһемле әңгәмәгеҙ өсөн оло рәхмәт! Һеҙгә ныҡлы һаулыҡ теләйем!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**



***Беҙҙә ун алты халыҡ вәкиленән торған бер хәрби подразделениела башҡорттарҙан тыш, татарҙар, тывалар, яҡуттар, ҡарасәйҙәр, балкарҙар, ҡумыҡтар һ.б. бар ине. Барыһына ла рация бирҙеләр һәм үҙ телдәребеҙҙә аралаша башланыҡ һәм асылда төрки телдәрҙә аралашҡан бер-беребеҙҙе тәржемәсеһеҙ ҙә аңланыҡ. Һөйләшеүҙе рация аша ишеткән дошмандар беҙҙең хаҡта "Ниндәйҙер музыкаль телдәрҙә аралашалар, бер нәмә лә аңламаныҡ", тигәндәр. Бәлки, улар өсөн беҙҙең тел музыкаль булып тойолғандыр, үҙебеҙгә ҡалһа, беҙ уны яу теле тип атаныҡ.***

***✓ - Әгәр ҙә һиңә мин хыянат иткән булһам, Хоҙай мине ҡаҡ түбәмдән орһон, әгәр миңә һин хыянат иткән булһаң, Хоҙай һине ҡаҡ түбәңдән орһон, - тине иренең үҙенә нисә тапҡыр хыянат иткәнен үҙ күҙҙәре менән күргән ике бала әсәһе.***



ФӘҮРИӘ

# БИРҺЕН ХОҘАЙ!

(Хикәйә)

Төшкөлөккә ҡайтып ингән иренең һуҡмыш ҡына түгел, нимәгәлер ныҡ ярһыулы икәнен дә күреү менән Рәүиәнең йөрәге табанына төштө. Тағы ла шул хәл, ҡасан ғына осо булыр икән был бәхетһеҙ тормоштоң, тигән әсенеү үҙәген телеп үтте. Иренең, кемгәлер яуап итеп, үҙ алдына һүгенеп алыуын иҫәпкә алғанда, хужаларҙың береһе менән ныҡ ҡына талашҡанын аңланы Рәүиә. Бер ни өндәшмәй генә йөрөп, өҫәлгә ашарға ултыртты ла ирен саҡырҙы:

- Марат, әйҙә, аш әҙер, сыҡ, - тине.

- Сығам, сығам! Хәҙер!

Ҡулйыуғысты әрһеҙ шаптырлатып ҡулын йыуҙы ла, эленеп торған таҫтамалды һыпырып алып ҡулын һөртөп, йән асыуы менән ишек яғына һелтәне. Аш бүлмәһенә инеп, өҫтәл артына ултырған арала ҡарлыҡҡан тауыш менән һүҙ башланы:

- Бригадир юғалған аттарҙың хаҡын елкәңә һалам, ти, - тип, асыуын аштан алырҙай булып ҡарһаланып ашарға тотондо. Быndай мәлдә бер өҫтәл артына ултырырға ҡурҡып, түрбашта юҡ эшен бар итеп соҡсонған Рәүиәгә аҡырҙы: - Нимә өндәшмәйһең?

- Нимә тип әйтәйем һуң инде мин? Кемдең сменаһында юғалған һуң? Һинекендәме?

- Һинекендәме? Минекендә шул! - тип аҡырҙы ире.

- Түләтергә ҡалһа, барлыюҡлы малды тотоноп түләрбеҙ микән инде?

Ни әйтһә лә иренә оҡшамаҫын, киреһенсә, оҡшамаған һүҙҙе табып бәйләнеп, һуғыш сығарырға сәбәп эҙләгәнен яҡшы белә Рәүиә. Шуның өсөн артабан ире аҡырһа ла, екерһә лә өндәшмәне. Түҙемлегенең сигенә сыҡһа ла өндәшмәне. Уның аттарҙа ла, малында ла, донъяһында ла эше юҡ ине инде. Нисек тә ошо мәшхәр тормоштан бөтөнләйгә, мәңгелеккә ҡотолаһы килә. Ләкин нисек имен ҡотолоуын ғына белмәй. Уның был уйын ире һиҙеп ҡалыу менән йәнен аласаҡ. Үлтермәгән хәлдә лә үлемесле итеп туҡмап һуҙып һалып ҡуясаҡ та, рәхәтләнеп, ләззәтләнеп, үҙенең ир бурысын үтәп төшәсәк. Туҡмалыуға ҡарағанда ла, ана шуныһы Рәүиәне эстән ашай, ни эшләһә лә онотолмай, йөрәгенә йәбешкән ҡомһоҙ бүре кеүек талай. Үҙенә ҡул һалырға ла ниәтләнеп ҡарағандары булды. Етем ҡалыр ике балаһын күҙ алдына килтереп, ҡулы барманы. Тере мәйеткә әйләнеп йәшәүен дауам итте. Иренең быndай вәхши ҡылығы Рәүиәнең әсәһе үлеп ҡалғас йыш ҡабатланды. Ҡатынының яҡлашыр кешеһе булмауы, башҡа барып һыйыныр ере юҡлығы ҡулынан йүнле эш килмәҫ иргә нығыраҡ ҡоторорға сәбәп кенә ине.

Марат, тамаҡ ялғап алғас, тағы шул ат һарайына эшкә сығып китте. Уның ҡул күтәрмәй генә сығып китеүен берҙән-бер мөмкинселек итеп ҡабул итте Рәүиә. Бөгөн, ошо мәлдә, сығып китеп ҡотолмаһа, башҡа бер ҡасан да яйлы мөмкинселек булмаясағын яҡшы белә шул ул. Күпме генә иҫерек булһа ла, боларған сағында ире уға сығып ҡасыр өсөн ирек бирмәй ине.

Рәүиә тиҙ генә урамда уйнап йөрөгән балаларын саҡырып алды ла, таҙа кейемдәрен бирҙе. Алмаштырып кейенергә ҡушты. Балаларының һорауына, алыҫҡа ҡунаҡҡа барырҙарын, ошо мәлдә үтә торған автобусҡа өлгөрөр кәрәк икәнлекте әйтте. Улары, автобуста ҡунаҡҡа тигәс, оҙаҡ көттөрмәнеләр, ҡыуанышып йөрөп кейенделәр. Рәүиәнең йөрәге сығып килерҙәй дарҫлап типһә лә, үҙен тыныс тоторға тырышты. Балаларына һиҙҙермәне.

Ишекте бикләп, ишек төбөндәге балаҫ аҫтына асҡысты һалды ла, урамға сыҡтылар. Тирәяҡҡа күҙ һалырға ваҡыты булманы шул, автобус бына-бына килеп етергә тейеш. Урам аша сығып, туҡталыш яғына атлауҙары булды, Мараттың көр тауышы башланып та өлгөрмәгән сәйәхәттең юлын ҡырҡа өҙҙө. Был тауыштан Рәүиә йығылып китә яҙҙы. Мараттың ни әйткәнен дә хатта аңламаны, атлауын әкренәйтеп, сираттағы ғауғанан ҡотолтор яуап эҙләп юлын дауам итте. Ул арала ҡаны ташып торған ир, ҡыуып етеп, ҡулынан эләктереп тә алды. Рәүиәнең ҡапыл һауанан алып һөйләгән яуабы буйынса ике туған инәһе саҡырып хәбәр ебәргәнен дә, шуға ашығыс юлға сығыуын да ире тыңлап торманы, елтерәтеп өйөнә кире алып ҡайтты. Урам буйында тап булған күрше-тирәләрҙең алдында ғына ҡатынына ҡулын күтәргеһе килмәне, солан ишеген асып инеү менән уның муйынына йәбеште:

- Йә, әйт, минән ҡасып уйнашыңа китеп бараңмы? Ҡайһы ауылдыҡы?

Марат Рәүиәне, муйынын һығып, солан стенаһына ҡыҫтаны. Солан таҡталарын тыштан тимер менән тышлағанда ҡулланылған ҡаҙаҡтарҙың эстән кәкерәйтелмәй тороп ҡалғанының бер осо Рәүиәнең баш тиреһен тишеп инде. Йылы ғына ҡан елкәһенә төшөп, арҡаһы буйлап ағып киткәнен һиҙҙе ҡатын. Марат бер туҡтауһыҙ:

- Арҙаныңдың исеме кем? Әйт, кәнтәй! - тип ҡан баҫҡан күҙҙәрен аҡайтып, хәшәрәт һорауҙарын яуҙырһа ла, ҡатынына яуап ҡайтарыу түгел, тын алырға ла ирек бирмәне.

Рәүиә, ҡаршылашыуҙың бер файҙаһы ла ошоғаса ярҙам иткәне булмағанды яҡшы белгәс, саҡ ҡына ла ҡаршылашып торманы. Уға барыбер ине. Ҡасып ҡотола алмаһам, исмаһам үлеп ҡотолормон был донъянан, тигән еңел генә уй килде. Шул уйынан үҙенә нисектер рәхәт тә булып китте. Мәрхүм атаһы менән әсәһенең йөҙҙәре күренгәндәй булды. Тиҙҙән бергә булырҙарын күҙ алдына килтерҙе. Фани донъя менән бер үкенесһеҙ генә хушлаша алыр хәлдә булыуына Хоҙайына рәхмәтен әйтте. Балаларымды Үҙеңдең ҡулыңа тапшырам, Хоҙайым, тип уйлап өлгөрҙө ул.

- Марат ағай! Марат ағай! - тип һөрәнләгән бер үҫмер малай тауышы ишетелде урамда.

Япмай ҡалдырған ҡапҡаһынан һыбайлы, атынан да төшмәй, солан тәңгәленә тиклем килеп етеп, ҡапҡа эсендә атаәсәһенең боларыуына ни эшләргә лә белмәй тапанған балаларҙан:

- Атайың өйҙәме? - тип һораны.

Меҫкен балаларҙың яуабы ишетелмәне, баш ҡына ҡаҡҡандарҙыр инде. Һыбайлы малай тағы көслөрәк итеп Маратты саҡырҙы.

- Нимә булған? Кем унда? - тип тыныс ҡына тауыш менән яуап бирҙе лә ир яйлап ҡатынын ебәрҙе.

Рәүиә әкрен генә иҙәнгә шыуып төштө.

- Марат ағай, был мин, Фәрит. Бригадир Вәғиз ағай ебәрҙе!

- Ниндәй Фәрит ул? - тип тауышына, ҡиәфәтенә яғымлы төҫ индереп, бер нәмә лә булмағандай ҡырҡа үҙгәреп, ишектән йылмайған Мараттың башы күренде.

- Һаумы, Марат ағай. Был мин Сәғәҙәттең улы. Хәҙер аттарҙы дағаларға йыйынабыҙ. Бөтәбеҙ ҙә шунда, һине лә саҡыра бригадир, - тип тиҙ генә йомошон әйтә һалды Марат менән бергә ат ҡараусы Сәғәҙәттең ат йәнле эшкә бөтмөр оло улы.

- Ярай, хәҙер барам, - тип бик яғымлы йылмайып тороп ҡалды Марат.

Һыбайлы ферма яғына кире сапты.

Башлаған эшен дауам итә алмауына тешләнеп, иҙәндә хәлһеҙ һөйәлеп ултырған Рәүиәнең елкәһенә барып йәбеште. Йәбеште лә ҡулындағы ҡанды күреп кире һелтәне. Бер аҙ юғалып, уйланып торҙо ла алҡымынан алып һөйрәп торғоҙҙо. Уҫал күҙҙәрен ҡатынының күҙҙәренә терәп теше аша ыҫылданы:

- Тоғроһон ғына әйт, кәнтәй, миңә хыянат иткәнең бармы? Тоғроһон әйт! Белеп ҡалһам, барыбер үлтерәм бит икегеҙҙе лә. Барыбер беләсәкмен.

Рәүиә иламаны ла, ҡурҡманы ла иренең күҙҙәренә тура ҡарап:

- Әгәр ҙә һиңә мин хыянат иткән булһам, Хоҙай мине ҡаҡ түбәмдән орһон, әгәр миңә һин хыянат иткән булһаң, Хоҙай һине ҡаҡ түбәңдән орһон, - тине иренең үҙенә нисә тапҡыр хыянат иткәнен үҙ күҙҙәре менән күргән ике бала әсәһе.

- Ах, кәнтәй! Нимә һөйләй. Йәл, хәҙер миңә эшкә китергә кәрәк, кәрәк кенәнде бирер инем. Ха-ха, ҡаҡ түбәңдән орһон, тинеңме? Бирһен, Хоҙай, бирһен, Хоҙай! Ҡаҡ түбәңдән орһон! - тип, Рәүиәне елкәһенән һөйрәтеп өй эсенә ырғытты.

- Орорбоҙ, ошонда көтөп ятып тор, ярайлы, - тип өҫтәп тә ҡуйҙы, мыҫҡыллы тауышы менән.

Унан бик эшлекле ҡиәфәттә сығып балаларына:

- Әйҙәгеҙ минең менән, - тип бойорҙо.

Балалар шым ғына артынан эйәрҙе.

Рәүиәнең ятҡан ерендә ятып үлгеһе килһә лә, әкренләп торҙо. Башының ҡанһырап торған еренә ҡатлап-ҡатлап бинт һалды ла, һыҡтырып яулыҡ бәйләне. Шым ғына илай-илай йөрөп, иҙәндәге ҡан эҙҙәрен һөрттө, балаларына күрһәткеһе килмәне. Битен һалҡын һыу менән йыуып бер аҙ тынысланып, кейемен алыштырҙы. Телевизорын ҡабыҙҙы ла диванға ауҙы. Уйланып ята торғас телевизор тауышына йоҡлап киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

- Әсәй! Әсәй! - тигән тауышҡа күҙен асһа, яңы теле асылып йөрөгән улы тора янында. Ашығып йүгереп ҡайтҡанлыҡтан арыған бала йыш-йыш тын ала. Шул арала ул үҙе генә аңлаған телдә әсәһенә нимәлер аңлатып маташты.

- Әсәй, атай әм итте! - тине күҙҙәре шарҙай булған бала.

Рәүиә урынынан һикереп торҙо.

- Кемде әм итте? - тип һорай һалды.

Ул Мараттың эштә кемделер туҡмауын күҙалланы. Йөрәге ярһып тулап китте. Берәйһен үлтереп ҡуймаһа ярар ине, тип уйланы.

- Ат әм итте, - тип яуап бирҙе улы.

Рәүиә улын ҡосаҡлап алды.

- Ярай-ярай, улым, тыныслан. Ат ҡына булһа, ярай ҙа ул.

Бер-аҙ ваҡыт үткәс, соланда кемдәрҙеңдер инеп килгәне ишетелде. Сәғәҙәт менән улы һаҡ ҡына иҫәнләштеләр ҙә, ишек төбөндәге эскәмйәгә ултырҙылар. Икеһенең дә баштары түбән эйелгән.

- Аттарығыҙҙы дағалап бөттөгөҙҙәме ни? - тип һораны Рәүиә.

- Юҡ... Эйе... - тип, ни һөйләгәнен үҙе аңламай яуап бирҙе Сәғәҙәт.

- Сәй ҡуйайым, әйҙәгеҙ, сәй эсеп ҡайтығыҙ, - тип урынынан торҙо Рәүиә.

Ирен тышта йөрөйҙәр, инеп киләләр, тип уйланы.

- Юҡ, еңгәй, сәй эсеп тормаҫбыҙ. Ултыр әле урыныңа, - тине Сәғәҙәт.

Үҙе артабан ни әйтергә белмәй аптыранып ҡалды. Кеше барҙа Мараттың болармағанын белгәс, Рәүиә ҡунаҡтарҙы ебәргеһе килмәне. Шуға ла һаман сәйгә саҡырып маташты.

- Марат ағайҙы тиҙ ярҙам саҡыртып, больницаға оҙаттыҡ, - тине Сәғәҙәт, ниһайәт батырсылығын йыйып. - Һин тыныслан. Ултырып тор әле.

Рәүиә сәй әҙерләргә тип торған еренән кире урынына ултырҙы.

- Ниңә? Нимә булды? - тип төпсөндө.

- Кәртәгә индереп аттарҙы дағалап йөрөгәндә бер өйрәтелмәгәне Марат ағайға тибеп ебәрҙе бит. Үҙе лә әллә нимәһенә аяуһыҙ инеп бара ине шунда. Әйтеп торабыҙ, тыңлай торғаны бармы? Иртән бригадир менән ныҡ ҡына асыуланышып алдылар ҙа, шунан алып тынысланa алмай йөрөнө инде.

- Эйе, төшкә ҡайтҡанда ла бик енле ине. Ә ҡайһы еренә типкән һуң ул ат? - тип саҡ һорай алды хужабикә.

- Маңлайына ғына эләккән шул. Иҫенә килмәне, тиҙ ярҙамға һалып ебәрҙек. Ҡайғырма, еңгәй, Марат ағай ныҡ әле ул. Бирешмәҫ. Табиптар ҙа көслө хәҙер. Ҡотҡарып алырҙар.

Рәүиә Мараттан туҡмалғанда ла, тәндәре һыҙланып йөрөгәндә лә иламай түҙгәнен, әле килеп быуаһынан йырылған йылғалай түгелде. Ниңә илағанын да аныҡ аңламаны, сөнки ул йәштәргә бөтәһе лә ҡушылған ине. Күпме рәнйетеүҙәр, нахаҡ һүҙҙәр, мәсхәрәләүҙәр, мыҫҡыллауҙар һәм, иң мөһиме, Хоҙайына ялбарыуҙар.

Уның ҡолағы төбөндә Мараттың һуңғы мыҫҡыллы:

- Бирһен, Хоҙай! Бирһен, Хоҙай! Орорбоҙ, ошонда көтөп ятып тор! - тигән һүҙҙәре яңғыраны.

Ирекһеҙҙән Рәүиә Марат индереп ырғытҡан ишек төбөнә, ҡанһырап ятып ҡалған еренә ҡапыл әйләнеп ҡараны ла кире сүкте. Ул һулҡылдаманы, йырылған күҙ йәштәренә ирек бирҙе. Улар үҙҙәренән-үҙҙәре субырлап түгелде. Рәүиәнең эстән генә Хоҙайынан ғәфү үтенерлек кенә хәле бар ине.

***✓ Баҡтиһәң, гәзит уҡыусы көлөп ултыра икән! Ярай, ярай, көлөгөҙ. Килер бер көн, һеҙгә лә бирерҙәр ошондай һорауҙы. Шул мәлдә һеҙҙең дә һис тә көлкөгөҙ килмәҫ. Ә былай минең эй асыу килде инде ейәнгә.***

*КӨЛӨП АЛАЙЫҠ!*

# ОЛАТАЙ, ҠАСАН ҮЛӘҺЕҢ?

Бер көн шулай кис сәй эсергә генә ултырғайныҡ, улым менән килен килеп инделәр. Беҙ йәшәгән яҡҡа ниндәйҙер йомош менән килгәндәр ҙә ҡабалан ғына беҙгә һуғылып сығырға булғандар. Маҡтап ҡына йөрөйһөгөҙ, тигән булып, ҡыуанып киткән кеше булып, әйҙәгеҙ ҙә әйҙәгеҙ тигән булып, әйҙүкләп, уларҙы сәй эсергә ултырта һалдыҡ. Тигән булып тигәнгә аптырамағыҙ. Унның әтнәкәһе шунда - ейән бигерәк өтөк. Кемгә генә тартҡандыр, белмәйем. Килгән һайын эш боҙмайынса ҡайтмай. Ҡурҡып-өркөп торола унан. Әле ул биш йәше менән бара. Ә унның һеңлеһенә быйыл көҙ өс йәш була. Ул, киленгә оҡшап, тыныс. Әле лә ейәнсәр ипле генә һаулыҡ һорашты. Югереп барып өләсәһен ҡосаҡлап алып үҙен яраттырып алды. Ә ейән кейемдәрен шарт-шорт систе лә уларын иҙәнгә нисек етте, шулай ташлап та ебәрҙе. Ултырғысҡа менеп барышлай унның түшәген әллә ҡайҙа осороп ебәрҙе. Ҡара әле, ошо ен ботағы (атаһы ишетеп ҡалмаһын берүк) әллә ҡайһы арала минең телефонды эләктереп алған! Телефонды әйтәм, уны миңә яңыраҡ ҡына тыуған көнөмә балалар бүләк иткәйне. Бик текә телефон, тип ҡыуандырҙылар. Миңә ней унның артыҡ текәлеге кәрәкмәй. Һөйләшһәм - булған, тигәндәй. Ейәнде әйтәм, эй ҡараны минең телефонды, эй ҡараны. Күренеп тора, оҡшай уға текә телефон. Тегеләй тулғандырҙы уны, былай әйләндерҙе. Төшөрөп кенә ебәрмәһен, тип мин ултырам ҡот осоп, оса-ҡунып. Шунан ейән миңә табан боролдо ла ошолай өндәште.

- Олатай, әй, олатай! Үлһәң, был телефон кемгә була?

Быңдай һорауҙан беҙ бер мәлгә тын ҡалдыҡ. Ә шулай ҙа кемдер көлгән һымаҡ булды. Өләсәһенә ҡарайым. Юҡ, ул көлмәй. Көләмһөрәп кенә ултыра. Киленгә ҡарайым. Ул да көлмәй. Нишләптер битен йәшергән дә ҡыҙына борола биреп ултырған һәм уға сәй эсерергә маташа. Улыма ҡарайым. Ул да көлмәй. Ул



нишләптер өҫтәлгә түгел, ә тәҙрәгә ҡарап ултыра. Унда нимә күрҙе икән? Ә шулай ҙа кем көлә? Шунан аңлап ҡалдым. Баҡтиһәң, гәзит уҡыусы көлөп ултыра икән! Ярай, ярай, көлөгөҙ. Килер бер көн, һеҙгә лә бирерҙәр ошондай һорауҙы. Шул мәлдә һеҙҙең дә һис тә көлкөгөҙ килмәҫ. Ә былай минең эй асыу килде инде ейәнгә. Шуға мин уға асыулы тауыш менән ҡырҡа генә яуап бирҙем.

- Һиңә!

Ейән ҡыуанысынан ырғып китеп, ултырғысына тороп уҡ баҫты.

- Оho-о-о!

Шунан миңә табан боролоп баҫты.

- Ысынмы-ы-ы, олатай!

Шатлығы эсенә һыймаған бала ултырғыстан иҙәнгә кинәт һикереп төштө лә аяғы ергә теймәй атаһына табан югерҙе.

- Атай, әй, атай! Олатай үлһә, унның телефоны миңә була!

Шунан тыпырлап югереп барып, әсәһенә был ҡыуанысьлы хәбәрҙе еткерә һалды.

- Әсәй, әй, әсәй! Олатайға кәпис килһә, телефоны миңә ҡала!

Шунан өҫтәлде урап өләсәһенә табан югерҙе.

- Өләсәй, әй, өләсәй, ишеттеңме олатай әйткәнен. Үлһә, телефоны миңә була!

Ейән кире минең эргәгә югереп килде. Килде лә һикереп тигәндәй ултырғысҡа менеп баҫты. Һәм сабырһыҙланып миңә ошондай һорау бирҙе.

- Олатай, әй, олатай! Ә һин ҡасан үләң?

Унның тәүге һорауына асыу әле һүрелеп бөтмәгән. Хәҙер йәнә килеп тағы "үлтергес" һорау. Шуға мин ейәнгә ҡоро ғына яуап бирәм.

- Хәҙер үләм!

Тора биргәс, өҫтәп ҡуям.

- Сәйҙе генә эсеп бөтәм дә!

Хәҙер ейәндең ҡыуанысы эсенә һыймай. Хатта ул мине ҡабаландыра башланы.

- Йә, олатай, аңшайып ултырма. Тиҙерәк сәйеңде эсә һал!

Минең кәйеф тамам төштө. Күптән һыуынып бөткән сәйҙе анан-бынан шөрпөлдәттем дә диванға барып ауҙым. Һәм күҙҙәремде йомдом. Ейәнде әйтәм, бигерәк өтөк инде. Хәҙер ул атаһын ҡабаландыра башланы.

- Атай, әй, атай, барып ҡарап кил әле. Үлмәнеме икән?

Атаһы йыбанманы. Мине килеп ҡараны ла ауыр тын алып ҡуйҙы.

- Үлгән!

Ә үҙе минең ҡолаҡҡа шыбырлай.

- Атай, телефоныңды аҙаҡ алып килермен, йәме.

Шулай инде, мәйтәм, һәр кемгә үҙ балаһы ҡәҙерле. Бына әле үҙ улым үҙ улының күңеле булһын тип үҙ атаһын "үлтереп" тора! Берәү әйтмешләй, ыстырам инде. Ә теге ен ботағы өйҙө осороп алып бара.

- Үлгә-ә-ән! Олатай үлгә-ә-ән! Телефон минеке-е-е!

Улым менән килен ашыҡ-бошоҡ сәй эстеләр ҙә ҡайтырға юлландылар. Уларҙы мин оҙатырға сыҡманым. Сөнки миңә хәҙер тю-тю килгән. Ейәндең, ярай әле ингәнбеҙ, ярай әле ингәнбеҙ, тигән шатлыҡлы тауышын тыңлай-тыңлай диванда ятып ҡалдым. Өләсәләре балаларҙы тышҡа сығып оҙатып ҡалды. Гөрөлдәп машина ҡуҙғалып киткәнен, аҙаҡ шығырлап өй ишеге асылып-ябылғанын тыңлап, бер килке "үлеп" яттым әле диванда. Өйгә килеп ингәс, ҡатын миңә бер аҙ һуҡранған тауыш менән әйтеп ҡуйҙы.

- Бала менән бала булмаһаң да булыр ине!

Бына һиңә мә, тип уйлап ҡуям. Ә шулай ҙа ҡатын менән килешә һалам.

- Эйе шул. Телефон өләсәйеңә була, тип әйтергә кәрәк булған миңә!

Ята биргәс, уфтанып ҡуям.

- Иртәгә үләм, тип әйтһәм ней булған!Телефон янда ҡала ине.

Әбей миңә бер килке баш сайҡап, нимә тип әйтергә белмәй торҙо.

- Ятма һуҙылып, телеңә һалышып, бер диван булып. Тор сәй эсергә!

Әле икәү генә тәмләп сәй эсеп ултырабыҙ. Ә мин ошолай уйлап ултырам. Мәйтәм, бала саҡ үҙенең ябайлығы, эскерһеҙлеге менән матур шул. Беҙ, өлкәндәр, тура һорауға ниңәлер тура яуап бирмәйбеҙ. Өйрөлтәбеҙ, сөйрөлтәбеҙ, болғайбыҙ, болғатабыҙ, ҡыҫҡаһы, ҡыйыш атып тура тейгеҙергә тырышабыҙ. Әллә оло саҡ ҡыйыш-мыйыш яуаптары менән матур микән?

**Әғләм ШӘРИПОВ**
**һөйләүсене тыңлап торҙо.**

*БАЛАҢА УҠЫ!*



# КОРОЛЕК ИСЕМЛЕ БӘЛӘКӘЙ ТУРҒАЙ

Кеше аяғы баҫмаған, кеше-фәлән күрмәгән бер ҡара урманда, йәшел шыршылар арһында, йәшәгән ти, Королек исемле кескәй генә бер турғай. Ул шундай бәләкәй булған, хатта, беҙҙең яҡтағы ғәҙәттәге турғайҙар менән сағыштырғанда, улар күпкә ҙур күренгән. Башында тажға оҡшаған һары өлтөк йөрөткән. Ошо һары тажлы өлтөгө өсөн дә Королек исемен алған да инде.

Көндәр буйы ботаҡтан - ботаҡҡа һикереп, иҫ киткес матур йырҙарын йырлаған. Ә кистәрен үҙенең бәләкәй, ыҡсым ояһына ҡайтҡан. Шулай үткән ошо кескәй ҡоштоң көндәре.

Был урманда йәшәү уға бик оҡшаған. Шулай ҙа, ҡайһы саҡта ул ҡайҙалыр сәйәхәткә сығып китеү хыялы менән янған, ҡайҙалыр алыҫтағы икенсе ерҙәрҙе күргеһе килгән. Был теләк көндән-көн көсәйгән.

Матур бер көндә, Королек үҙенең ыҡсым ояһынан етеҙ генә осоп сыға ла, бер ҡасан да күрмәгән яҡтарға юл ала. Оса торғас, алдында күкһел төҫтәге ҡалҡыулыҡтар һәм унның артында ҙур урман күренә. Ҡошсоҡҡа был яңы урын бик оҡшай. Аҫтында сәскәле гөлйемеш ҡыуағы үҫкән йәш ҡарағайҙы һайлап ала ла, ҡуйы ботағына ҡуна. "Тирли-тирли! Ниндәй матурлыҡ бында! Тирли-тирли! Йәшәргә ошонда урынлашайым да ҡуяйыммы икән?" - тип күңелле тауыш менән йырлап ебәрә. Королек ҡарағайҙың олоно буйлап бер өҫкә менә, бер аҫҡа төшә. Шунан гөлйемеш ҡыуағына төшөп, тикшереп ҡарап сыға. "Был урын буш күренә, ошонда оя ҡорайым әле", - тигән ҡарарға килә лә, эшкә тотона. Ҡарағайҙың киң тарбаҡлы ботаҡтары араһына үҙенең бәләкәй генә түңәрәк ояһын ҡора башлай. Төҙөлөш материалдары итеп мүк, үләндәр, һығылмалы йәш ботаҡтар ҡуллана. Ә оя төбөн йомшаҡ мамыҡ менән төпләй. Бына хәҙер оя әҙер!

Королек үҙенең яңы йорто менән бик ҡәнәғәт ҡала. Уны тирә-яҡтағы һәр нәмә ҡыуандыра һәм һоҡландыра. Ағастың иң юғары осона пырхылдап осоп менә лә, шатлыҡлы ауаздарҙан торған йырын һуҙа: "Тирли-тирли! Был урман ниндәй матур! Был ҡарағай ниндәй мөһабәт... Унның ботағына төҙөгән йортом ниндәй йәтеш һәм күркәм! Был ерҙәргә килеп урынлашҡан көнөм ниндәй бәхетле!" Ҡош үҙенең асыҡҡанын тоя һәм серәкәй, себен, бөжәктәр эҙләп, һунарға оса.

Ул осоп китеү менән үләндәр араһында нимәлер ҡыштырлай. Ялтырап йылан килеп сыға. Бөтә тәне менән һығылып-бөгөлөп, ауыҙынан асаланған телен алға ырғыта-ырғыта, тиҙ генә шау сәскәгә күмелгән гөлйемеш ҡыуағына шыуыша һәм унның аҫтындағы өңөнә инеп сума. Меҫкен бәләкәй ҡош, ояһын төҙөгәндә ҡайҙан ғына белһен инде шундай ҡурҡыныс күршеһе буласағын!

Белеүебеҙсә, йыландар еҫте нығ һиҙә. Улар хатта иң көсһөҙ еҫтәрҙе лә яҡшы айыралар. Был һиҙеү - уларға үҙҙәренең табыштарын табырға, йәки дошмандарының яҡынлашыуын аңғарыр өсөн бик мөһим.

Эҫелектән ҡасып өңөнә ингән йылан ишелепишелеп бөгәрләнеп кенә ятыуы була, ҡапыл уға ниндәйҙер таныш булмаған ят еҫ килеп бәрелә. Өңөнән башын сығарып, йән-яғына ҡарана һәм еҫтең өҫтән килә икәнен аңғара. Йылан һалмаҡ ҡына өңөнән һурылып сығып, ағастың олоно буйлап өҫкә шыуып үрмәләй. Ул ҡарағай ботаҡтары араһындағы бәләкәй генә ояны шәйләп, шул тиклем аптырай. "Был оя ҡайҙан барлыҡҡа килгән? Быны ҡорған ғәмһеҙ ҡош ҡайҙа икән? Ярай! Шулай итеп, кем йәшенмәгән - мин ғәйепле түгел!" - тип уйлай мәкерле йылан.

Йылан ағастың тармаҡлы ботаҡтары араһына инеп боҫа һәм ояның хужаһын һағалар өсөн йәтешләп ята.Тиҙҙән бәләкәй ҡош ояһына осоп килә лә өй мәшәҡәттәре менән булыша башлай. Ул хатта йыландың мәкерле уй менән уға табан шыуышҡанын һиҙмәй ҙә, хәүеф барлығына ла шикләнмәй. Ә йылан өҫтәге ботаҡтарға эләгеп күсә-күсә яй ғына ояға таба шыуыша. Шул мәлде Королек уны күреп ҡала. Ҡурҡышынан, өмөтһөҙ сырылдай-сырылдай осоп сығып, башы һуҡҡан яҡҡа ташлана. Унның бәләкәй генә йөрәге күкрәгенән һикереп сығырҙай булып, дөпөлдәп тибә. Ситкә китеп, әҙерәк тын алғас, сәтләүек ағасының бер ботағына барып ҡуна.

Ошо мәлдә аҫта кемдер берәү уға өндәшә: "Эй, Королек! Нимә булды һиңә? Хатта ҡауырһын-йөндәрең тырпайып үрә торған! Кем шул хәтлем ҡотоңдо алды?" Был, ергә ҡойолған сәтләүектәрҙе йыйырға сыҡҡан ҡыҙғылт һары ерән тейен була. Королек тейенгә үҙенең башынан үткәндәрен түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә. Тейен уға: "Хәҙер тыңла мине! Үҙеңдең тыуған яҡтарыңа, үҙ йортоңа кире ҡайт! Был, әлбиттә, матур урын, ләкин тыныслыҡ юҡ. Һәр минут һайын һине ниндәйҙер бәлә һағалай. Мин дә бында йәшәмәҫ инем, аҙыҡтың күплеге генә мине тота. Иң ҡурҡҡаным - белмәгән ергә күсенеп китеү. Бәлки, унда быңдағынан да насарыраҡтыр?"

Королек уйға ҡалды: "Шик юҡ! Был ерҙәрҙә йәшәүе бик хәүефле икән! Тейен дә өйрәнгән ерҙәренән сит ерҙәргә китергә икеләнә. Ә мин, сәйәхәт яратыуым сәбәпле, ниндәй матур, ыҡсым, уңайлы, тыныс оямды ҡалдырып сығып киттем. Белмәгән ерҙә урынлашып, оя ҡороп ебәргән булдым. Һөҙөмтәлә, саҡ үлмәй ҡалдым", - ти ҙә, йәһәт кенә үҙенең тыуған яғы тарафтарына оса.

Был ваҡиғанан һуң ул бер ҡасан да үҙ ояһын, тыуған яҡтарын ташлап сит яҡтарға ынтылмай...

Ә асыҡ зәңгәр күк йөҙөндә еңел аҡ болоттар йөҙә. Ел уйнатып, ҡыуып алып йөрөп, ошо болоттарҙан ошондай хәҙис һүҙҙәрен яҙа: "Аллаһу Тәғәләнең биргәндәренә шөкөр ит, риза бул! Ул саҡта кешеләр араһында иң байы һин булырһың!"

*ИНТЕРНЕТТАН*



# БИТ ТИРЕҢДЕ...

## боҙ менән ышҡы

■ Стресс гормоны - кортизол баш мейеһе эшмәкәрлегенә насар йоғонто яһап, хәтерҙең насарайыуына килтереүе ихтимал, тип яҙа Neuroscience журналы. Кортизол күләменең бер ваҡытҡа күтәрелеп алыуы һәйбәт, сөнки был мәлдә иғтибар көсәйә, ул кешегә тормош һынауҙарын еңеп сығырға ярҙам итә, тиҙ ҡарарға килеү һәләте барлыҡҡа килә. Әммә был гормондың даими рәүештә юғары кимәлдә булыуы кире эҙемтәләргә килтерә: аш һеңдереү менән бәйле проблемалар килеп тыуа, ауырлыҡ арта, ҡан баҫымы күтәрелә. Ғалимдар билдәләүенсә, стресс гормонының оҙайлы тәьҫире һөҙөмтәһендә баш мейеһенең айырым өлөштәрендә нервы күҙәнәктәре ҡыҫҡара. Айова университеты психологтары фекеренсә, был гормон депрессия йәки хроник стресс кисергән пациенттарҙа осрай һәм улар етди дауалауға мохтаж.

■ Тиреләге һырҙарҙы төрлө үлән һәм емешләк төнәтмәләре өҫтәлгән боҙ ярҙамында бөтөрөргә була. Һәр иртә һайын бит тиреһен боҙ менән ышҡыу тирене шымарта, матдәләр алышыныуын, ҡан әйләнешен яҡшырта. Ғалимдар бер ай буйына үткәргән һынауҙарҙа 2 ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Уларҙың береһе иртәле-кисле боҙ ҡулланған, икенсеһе битен һыу менән йыуған. Һөҙөмтәлә, тәүге ҡатнашыусыла күҙәнәктәр ҡартайыу процесы йәйләнғанлығы асыҡланған.

■ Дархэм университеты неврологы Аманда Эллисон белдереүенсә, ир-ат ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда һалҡын тейҙереү һәм киҙеү симптомдарын ауырыраҡ кисерә. Доктор әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егеттең баш мейеһе үҫешенең бер осоронда айырмалыҡтар барлыҡҡа килә. Күп күрһәткестәр, шул иҫәптән, тән температураһы өсөн яуап биреүсе баш мейеһе өлөшө ир-егеттәрҙә тестостерон бүленеп сығыу һөҙөмтәһендә тиҙерәк үҫешә. Мейенең был өлөшө организмға инфекция инеүенә шунда уҡ тәьҫир итә һәм үҙенең эшен башлай, һөҙөмтәлә, тән температураһы күтәрелә. Тимәк, ирҙәргә дәүмәл яғынан ул ҙурыраҡ булыу сәбәпле, улар нығыраҡ сирләй.

■ Америка йоҡо медицинаһы академияһы хеҙмәткәрҙәре белдереүенсә, көндөҙ бер туҡтауһыҙ йоҡоға тартып тора икән, был организмда D витамины етешмәүенең бер билдәһе булыуы ихтимал. Сомнологта иҫәптә тороусы пациенттарҙы тикшереп ҡарағандан һуң, уларҙың барыһына ла тап ошо витамин етешмәүе асыҡланған. Шул уҡ ваҡытта, көн һайын йоҡоһо туйып уяныусы кешеләрҙә табыуы һирәк, ти белгестәр. Болотло көн, тынсыу эш бүлмәһе лә йоҡоно килтерә. Сөнки был осраҡтарҙа атмосфера баҫымы түбәнәйә һәм баш мейеһе кислород менән насар тәьмин ителә. Төшкө аштан һуң да был күҙәтелеүе ихтимал, сөнки ҡан ашты эшкәртеү өсөн ашҡаҙанға тулыша, һөҙөмтәлә мейе тағы ла энергияһыҙ ҡала. Был осраҡтарҙа саф һауаға сығырға, хәрәкәт итергә кәрәк.

■ Хайфа сәләмәтлек милли институты (Израиль) ҡатын-ҡыҙҙар өсөн идеаль параметрҙар иҫәпләп сығарған. The Epoch Times яҙыуынса, иҫәпләүҙәр һөҙөмтәһендә асыҡланыуынса, буйы 170 сантиметр булған ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауырлығы 77 килограмм булырға тейеш. Күптән түгел Израилдә подиумға ябыҡ моделдәрҙе сығармау тураһында закон ҡабул ителде. Был сара - модель стандарттарына ярарға тырышҡан ҡатын-ҡыҙҙарҙа барлыҡҡа килеүсе анорексияны булдырмауға йүнәлтелгән. Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙ матурлығы идеалына килгәндә, эштәр былайыраҡ тора. Әгәр ҙә 2012 йылда үткәрелгән һорау алыуҙар буйынса ҡараһаҡ, гүзәл заттың ирендәре Скарлетт Йохансондыҡына, сикәһе ҡара тәнле һылыу Холли Берриныҡына, тиреһе Эмми Адамс һәм тәне Пенелопа Круска оҡшаһа, ул матур, тип иҫәпләнәр ине.

*БЕЛЕМ УСАҒЫНДА*

# ЮҒАРЫНАН АЛЫҪЫРАҠ КҮРЕНӘ



**Сибай институты йәшәй, үҫешә. Хикмәт Урал арьяғында бындай юғары уҡыу йортонон бөрәү булыуында ғына ла түгел, аҡыллы, матур һәм үҙ эшенә, уҡыу йортона тоғро, тотороҡло уҡытыусылар коллективы тупланыуындалыр. Йылдағыса, институт директоры Илдар Сәлихйән улы ХӘМИТОВҡа уларҙың хәлен белешеп мөрәжәғәт иттек:**

- Уҡыу йылы ығы-зығыһыҙ үҙ яйы менән башланып китте. Төп эшебеҙҙең ағышы йәйгеһен нисек эшләүебеҙгә бәйле. Ошо юҫыҡтан сығып ҡарағанда, ҡабул итеү комиссияһының эше һәйбәт булды, көндөҙгө бүлектәргә лә, ситтән тороп уҡыуға ла бик күп студенттар ҡабул иттек. Быйыл институтҡа түләүле уҡыуға килеүселәр һаны, беҙ көткәнгә ҡарағанда, күпкә артты. Биш йөҙ студент түләүле бүлектәргә белем аласаҡ. Бюджет урындары, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, әлегә күп түгел, бер кимәлдә (150 урын) ҡалып килә, киләһе йыл артыр, тип өмөтләнәбеҙ.

Йыл да ниндәй булһа ла үҙгәрештәр булып тора, уларға ыңғай ҡарарға кәрәк. Элек ситтән тороп уҡыуға октябрҙә ҡабул итә торғайныҡ, хәҙер бөтә абитуриенттар ҙа документтарын 20 июндән 25 августҡа тиклем тапшыра ала - бөтәһенә лә бер талап. Йоҡлап ҡалғандар сентябрь, октябрҙә, һеҙгә уҡырға инергә документтар тапшырырға мөмкинме, тип белешә башланылар. Ҡабул итеү тамам, тип кәйефтәрен ҡырырға мәжбүр булдыҡ. Был яңылыҡты беҙ уйлап тапманыҡ, бөтә Рәсәй буйынса быйыл шундай талап, ул уҡыу йорто өсөн бик отошло. Элек уҡыуҙар башланғас, ситтән тороп уҡырға теләүселәрҙе ҡабул итә башлау уҡытыу процесына мәшәҡәттәр тыуҙыра торғайны, сөнки был эш уҡытыусыларыбыҙ елкәһенә төшә ине. Ә былай күпкә һәйбәтерәк.

Быйыл технология факультетына күп килделәр - бер урынға өс кеше. Уларҙың күпселеге егеттәр, сөнки бөгөнгө көндә инженерҙарға ихтыяж ҙур. Бюджет урындары аҙ булғас, быйыл педагогика факультетына ла конкурс булды, элек бындай хәл күҙәтелмәй торғайны. Уҡырға инергә документ тапшырыусыларҙың иң күбе Сибай ҡалаһынан һәм Баймаҡ районынан, шунан, ғәҙәттәгесә, Хәйбулла, Әбйәлил, Йылайыр райондарынан киләләр. Бөрйәндәр йылына ҡарап ҡуҙғала шикелле, быйыл ул яҡтан уҡырға теләүселәр бөтөнләй булманы.

Беҙҙең институтта медицина йүнәлеше буйынса ла уҡытыу зарурлығын тәү башлап республика Башлығы Радий Фәрит улы Хәбиров күтәреп сыҡты. Был теләгең ул Урал арьяғы район башлыҡтарына, Башҡорт дәүләт медицина университеты ректорына, Мәғариф министрлығына еткерҙе. Сибайҙа махсус урта белем биреүсе медицина колледжы бар, әммә Өфөлә, йә Силәбелә уҡып, юғары белем алған белгестәр тыуған яҡтарына ҡайта һалып бармай. Беҙ иң тәүҙә медицина университеты ректоры Валентин Николаевич Павлов менән һөйләшеп, филиал асырға кәңәшләштек, әммә бының өсөн бик күп йыһаз, бина кәрәк. Ярай, уҡыу урындары табырға була, ә бына кадрҙар менән йыһаз мәсьәләһен тиҙ арала хәл итеп булмай. Уҡытыусыларҙы медицина колледжынан да саҡырыу мөмкинлеге юҡ. Медицина университеты менән килешеү төҙөнөк: улар үҙҙәренә студенттар йыялар ҙа, Урал арьяғы райондарынан барған беренсе курс студенттары иҫәбенән теләгәндәрен Сибай институтына уҡырға ебәрәләр. Уртаҡ эшмәкәрлек тураһында килешеү буйынса студенттар беҙҙә бер йыл уҡыйҙар ҙа, икенсе йылына кире Өфөгә китәләр. Ике йыл уҡытырға, тигән уй ҙа булғайны, әммә 2-се курста махсус фәндәрҙән уҡытыу башлана, бының өсөн медицина буйынса фән докторҙары кәрәк, Сибайҙа ундай мөмкинлек юҡ. Ә беренсе курсты үҙебеҙҙең кадрҙар менән уҡыта алабыҙ. Шулайтып, әлегә ун биш студенттан торған тәүге төркөмдө дауалау һәм педиатрия буйынса уҡыта башланыҡ. Ҡабатлап әйтәм, кемдәр теләй, шулар ғына килделәр, улар бөтәһе лә Урал арьяғы райондарыныҡы. Икенсе сентябрҙә Өфөлә беренсе курстарҙы йыйҙылар. Унда университет проректоры, декан, беҙ ҙә булдыҡ. Һөйләшеүҙән һуң Урал арьяғы райондарынан килгән 40 студенттың ун бише беҙҙең институтта уҡырға теләк белдерҙе. Улар, Сибай ҡалаһы, Әбйәлил, Баймаҡ районы вәкилдәре. Практик дәрестәргә был студенттар Сибай медицина колледжына йөрөйәсәктәр. Был эш яңы башланып тора, күптәр, бәлки, белмәй ҙә ҡалғандыр. Был башланғыстың перспективаһы бар, сөнки икенсе курсты ла бында уҡыта башлаһаҡ, профессорҙарҙы йәлеп итһәк, Урал арьяғын врачтар менән тәьмин итеү маҡсаты йәлап тормошҡа ашырыласаҡ.

Былай ҙа юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеү балын юғары күтәрергә кәрәк, тигән фекерҙәр ишетелеп ҡуя. Улай булһа, юғары белем алыусылар һаны кәмейәсәк. Сер түгел, балаларҙың 65-70 проценты туғыҙынсы кластан һуң унынсы класҡа килмәй. Сәбәбе - Берҙәм дәүләт имтиханданынан ҡурҡалар. Етмәһә, киләһе йылға тағы үҙгәреш булырға тора: колледждарҙан һуң юғары уҡыу йорттарына килгән абитуриенттар шулай уҡ БДИ тапшырырға тейештәр. Быға тиклем беҙ уларға Берҙәм дәүләт имтиханы үткәрмәнек, әңгәмә (собеседование), тестар үткәреп ала инек. Әлбиттә, профиль буйынса тура килгәндәргә был яңылыҡ ҡағылмай. Мәҫәлән, педколледж бөткән абитуриент киләсәккә юғары белемле уҡытыусы һөнәрен һайлаһа, Берҙәм дәүләт имтиханы бирмәй. Колледж бөткәндәр өсөн һис шикһеҙ БДИ биреү ауырға тура киләсәк, сөнки унда мәктәптәрҙәге кеүек әҙерлек юҡ. Ни булһа ла, башта әйткәнемсә, яңылыҡтарға ыңғай ҡарарға кәрәк.

Уҡыуҙар башланды, йылдағыса, төрлө саралар үтә. Быйыл беҙҙең институт ойошторолоуға 35 йыл! 5 декабрҙә тантаналы рәүештә юбилей сараһы үтәсәк. Төрлө яҡтан ҡунаҡтар саҡырабыҙ, сығарылыш студенттары киләсәк.

Ә буласаҡ абитуриенттарға, ата-әсәләргә әйтер һүҙем шул: хәҙер бөтә документтар ҙа электрон рәүештә ҡабул ителә, теләүселәр үҙҙәре институтҡа килеп тапшыра, йә быны махсус суперсевис аша эшләргә мөмкин. Элеккеләй күҙмә-күҙ ҡарап һөйләшеү юҡ, әммә быныӊ файҙаһы мобиллектә. Колледж бөткәндәр тесты онлайн форматта тапшыра. Бер ҡатмарлыҡ бар: мәҫәлән, абитуриент документтарын биш урынға тапшырып, берәүһенә ризалыҡ белдерһә, күптәр шул процедураны тиҙ генә эшләргә ашыҡмай. Шуға күрә юғары уҡыу йорттарының сайттарын уларҙың рейтингтарын күҙәтеп барырға кәрәк. Документтарымды тапшырҙым - булды, тип, саҡырыу көтөп ятыу кәрәкмәй. Элек саҡырыу була торғайны, ә хәҙер бөтә шарттар автоматлаштырылған. Был үҙгәрешкә лә ыңғай ҡарарға кәрәк. Сибай институты үҙенең буласаҡ студенттарын көтә - бергә булайыҡ!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һөйләшкән ваҡытта Илдар Сәлихйән улы абитуриенттарҙы, студенттарҙы балалар тип атай. Бындай йылы мөнсәбәт, минеңсә, күп нәмә тураһында һөйләй. Тимәк, ғаилә йылыһы бөркөп торған юғары уҡыу йортоноң киләсәге бик өмөтлө. Юғары белемде инҡар итеүселәргә, юғарынан алыҫыраҡ күренә, тип әйтке килә.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

ИШАРАЛАП...

# АЛТЫНҒА ИҪТӘРЕ КИТКӘН...



(Башы 6-сы биттә).

## Законды - боҙоп, тәбиғәтте - тәләфләп

Үткән быуаттың 90-сы йылдарында Урал аръяғында алтын табыу эштәре туктаны. Сәбәбе илде ялмап алған дөйөм иҡтисади кризис ине. Хәл тотороҡлана башлағас, 10-сы йылдарҙа төрлө тарафтарҙан республикаға алтын эҙләүселәр ағыла башлай. Күпселек осраҡта улар "кара соҡоноусылар" ("черные копатели") була. Металл эҙләгес приборҙар, енел машина арбаһына һыйышлы бәләкәй экскаваторҙар ярҙамында башкорт ере байлыктарын үҙләштерҙе улар. Хәҙер ҙә килеп сығалар. Алтын бит, тәкәт бирмәй, үҙенә тарта.

"Кара соҡоноусылар" артынан законлы теркәлгән ойошмалар тартыла Урал аръяғына. Тик улар ҙа, ерҙе аҡтарып һалып, тиҙерәк байырға ашкына. Мәҫәлән, 2017 йылда Мәскәүҙә теркәлгән "Таналыҡ" ЯСЙ-е Баймаҡтан үрҙә Таналыҡ йылғаһы буйында эш башлай. Уға хужалары бер үк кеше булған, 2018 йылда Мәскәүҙә теркәлгән "Граф" ЯСЙ-те ҡушыла. Был компанияларҙың тәбиғәтте вәхшиҙәрсә исрафлауы, Таналыҡ йылғаһын бысратыуы халыкта ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Уларҙың эшмәкәрлеген туктатыуҙы талап иткән йыйындарҙа күпләп кеше катнаша. Мәсьәләне аныҡлау һәм саралар күреү өсөн 2021 йылдың июнендә республика Башлыгы указы менән Республика биләмәһендә ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыусылар эшмәкәрлеге һәм ер аҫты байлыктарын файҙаланыу өлкәһендә хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеү мәсьәләләре буйынса ведомство-ара комиссия булдырыла. 2022 йылдың ноябрендә Башҡортостандың Арбитраж суды "Таналыҡ" компанияһынан тәбиғәткә килтерелгән 604,8 млн һумлыҡ зыянды ҡаплатыу тураһында ҡарар сығара. Ә "Граф" компанияһына 823 млн һумлыҡ штраф һалына һәм, суд ҡарары менән, ҡаҙылма байлыҡтар табыуға рөхсәт биргән лицензияһы тартып алына. Боҙоуҙарға юл ҡуйған Учалы районында эшләгән "Альтинвест" һәм "Иремельбашресурс" компанияларына ла тау эштәре алып барыу тыйыла.

## Ситтә нисек?

Үрҙә әйтеүемсә, минең үҙемдең дә алтынға ҡағылышым булды ғүмеремдең бер осоро.

1984 йылда, Мейәс геологоразведка техникумында уҡыуымды тамамлап, ҡулыма "Геология, мәғдән ҡаҙылма байлыҡтарын эҙләү һәм тикшереү" һөнәренә эйә булыу тураһында диплом алдым. Совет осоронда йәш белгес эшкә йүнәлтмә буйынса бара ине. Үҙем теләп Магаданға юлландым. Магадандың геология идарағында мине Чукоткаға, "Северовостокгеология" берләшмәһенең Шмидт геологоразведка экспедицияһына йүнәлттеләр. Унда үҙ сиратында Полярный геологоразведка партияһына тәғәйенләндем.

Бөгөнгө көндә Полярный атамалы ҡасаба ил картаһында юҡ. 1995 йылда Рәсәй Хөкүмәте указы менән ул йәшәүҙән туктаған, бәҡһан. Быны белгәс, иҫ-аҡылым китте. Интернеттан ҡасабаның бөгөнгө хәлен һүрәтләгән фильм табып ҡараным - ҡот осҡос күренеш. Моғайын, Ер шарында әҙәм заты ҡалмаһа, уның йөҙө тағы ла менәр йылдар Полярный кеүек емереклектәр майҙаны булып ятыр: аҡтарылған ер ҡыртышы, ярым емерек биналар, һерәйеп ултырған бағаналар, техника һөлдәләре, туҙрап яткан тимертомор, элекке урамдың һыҙатын билдәләп теҙелеп киткән ҡаралты харабалары... Ахры заман күренештәре шулай булыр, моғайын.

Полярныйҙа биш меңгә яҡын кеше йәшәне. Ҡасаба Пильхинкууль йылғаһы буйында табылған бай алтын яткылығын үҙләштереү өсөн 1962 йылда төҙөлә башлай. Тау-байыҡтырыу комбинаты, геологоразведка партияһы, төҙөләш һәм коммуналь хужалығы ойошмалары, урта мәктәп, дауахана, клуб гөрләп эшләй ине мин белгәндә.

Полярный геологоразведка партияһы алтын эҙләүгә махсуслашҡайны. Чукотка алтыны тарихы егерменсе быуаттың башына барып тоташа. Америка Аляскаһында "алтын биҙгәге" замаһында, "алтын башмаҡ"тың башы Аляскала булһа, көҙҙәһе Беринг боғаҙы аша яткан Чукоткала, тиғән фекер тыуа. Йәнәһе лә, унда болан көтөүсе чукчалар алтын төрөпкәнән тәмәке тарта. Ошо ҡотҡоға бирелеп ойошторолған экспедициялар һөҙөмтә бирмәй.

Үткән быуаттың 40-сы йылдарында совет геологтары алтынға бай пробалар йыйып алыуға өлгәшә. Был табыштарға ул осорҙа стратегик металл һаналған ҡурғаш эҙләү барышында юлыҡалар. Ҡурғаш яткылығы иһә, бөгөнгө Певек ҡалаһы тирәһендә асыла һәм уға нигеҙ һалыу өсөн сәбәп була. Ә алтынға килгәндә, Чукотка был йәһәттән перспективаһыҙ төбәк һанала, һәм махсус рәүештә алтын разведкаһы өсөн хөкүмәт аҡса бүлмәй.

1953 йылда ҡурғаштың яңы яткылыктарын эҙләүсе геологтар Ичувеем йылғаһында һәлмәк кенә тарткан алтын тосо йыйып ала һәм Чукотка хужаһын кешеләргә үҙ байлыҡтары ышанырға мәжбүр итә. Певек ҡалаһы иһә шул ҡапкаға илткән юл башы була.

Полярный комбинаты үҙ тарихында барлығы 300 тонна алтын йыуа. Уңышлы йылдарҙа күрһәткес 20 тоннаға тиклем барып етә. 1992 йылда 20 кг 336 грамм тарткан самородок табыла.

Ул йылдарҙа һибелмә алтын (россыпное золото) яткылыктарынан сығаралар ине һары металды. Хәҙер Чукоткала шахта менән башлыса руда алтынын алалар. Йылына йәмғеһе 30 тоннанан ашыу алтын сығарыла. Чукоткала ҡайһы йылғанан проба алһаң да, алтындың эҙенә юлығаһың - "знак" тип аталған энә осондай ғына алтын ялтырауыҡтары табаһың. Шулай бай төбәк ул.

Тик... Полярный ҡасабаһы харабалары күҙ алдынан китмәй. Чукчалар ерена ҡайҙандыр килгән кешеләр алтын сығарған, тундраны аҡтарып һалған, йылғаларҙы бысраткан һәм, ошо апокалипсис пейзажын ҡалдырып, "материк"ҡа ҡайтып киткән. Хәҙер нисектер, ул сакта Чукоткала "материк" һүҙе илдең үҙәк төбәктәрен билдәләгән дөйөм атама була торғайны.

Урал аръяғы райондары халҡының бушҡа хәүефләнмәүенә ишара түгелме ни тәләфләнгән чукчалар тундраһы? Әйткәндәй, тундрала тракторҙың тимер сылбырҙары һалған эҙ илле йылда ғына саҡ уңала. Ҡайһы бер ғалимдар, бөтөнләй уңалмауы ла ихтимал, ти.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**"Граф" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтен ойоштороусыға (Константин Хамуляк) һәм предприятиеның элекке өс етәксеһенә (Станислав Горбатенко, Владислав Кочетов һәм Руслан Вәлиханов) ҡарата енәйәт эше буйынса суд хөкөм ҡарары сығарылды, тип хәбәр итә "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы. Енәйәт эше материалдары буйынса, Мәскәү эшҡыуары ойошторған компания 2019 йылдың июленән 2020 йылдың октябренә тиклем Баймаҡ районының ауыл хужалығы ерҙәрендә законһыҙ алтын сығарыу менән шөғөлләнә. Эш башҡарыу ваҡытында 40 гектарҙан ашыу майҙанда тупраҡтың ундырышлы ҡатламы зыян күрә, экосистемаға 67,5 миллиард һумдан ашыу зыян килтерелә.**

**Бынан тыш, 2023 йылдың майында Хамуляк, ФСБ хеҙмәткәре енәйәт эшен туктатыуҙа ярҙам итһен өсөн, 200 мең һум күләмендә ришүәт тәкдим итә. Ришүәт биргән һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау ҡағиҙәләрен боҙған өсөн Өфөнөң Киров суды ҡарары менән Константин Хамуляк ҡаты режимлы колонияла 9 йылға иркенән мәхрүм ителде, уға шулай уҡ 2 миллион һум штраф һалынды. Станислав Горбатенко, Владислав Кочетов һәм Руслан Вәлиханов, эш хаҡынан дәүләт файҙаһына 10 процент тотоу шарты менән, 10 айҙан ике йылға тиклем мәжбүри эшкә хөкөм ителде.**

Рәсүл БАЙГИЛДИН.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Урман деүете

**(Лесной конек)**



Сәпсектәр ғаиләһенә ҡараған ҡоштарға деүет һәм сәпсектәр инә. Ваҡ ҡына, һомғол кәүҙәле, оҙон ҡойроҡло ҡоштар. Ҡойроҡтарын гел генә елпендереп торалар. Оҙон аяҡлылар, тиҙ йүгерәләр.

Урман деүете иһә ағастар һирәк үҫкән урмандарҙа, яландарҙа, урман ситтәрендә осрай. Ваҡ һабан турғайына оҡшаған, тик уға ҡарағанда кәүҙәһе еңелерәк һәм һомғолораҡ, суҡышы оҙонораҡ, ағаска ҡунған сағында кәүҙәһен вертикаль рәүештә тотонҡорай. Арҡа өлөшө балсыҡ төҫөндә, башында, арҡаһында ҡара сыбар ҡаурыйҙар бар, ҡорһағы аҡ, муйыны, ҡабырғалары ҡыҙғылт төҫтә һәм унда ҡара ҡаурыйҙар асыҡ күренеп тора.

Ағас, ҡыуаҡ башына ҡунып һайрай, осоп китә һәм ҡабаттан килеп ултыра. Осоп киткәнендә "сип-сип-сип" тигән тауышын ишетергә була, ошонан һуң ҡошсоҡ ҡанаттарын һәм ҡойроғон йәйә, "сиа-сиа-сииа-сииасииа" тип, яйлап ағас башына ултыра. Ҡайһы берҙә йырының йомшаҡ ҡына итеп әйтелгән "тив-тив-тив" тигән аҙағы була. Хәүефләнгәндә "ти-тит-тит" тип ҡысҡыра.

Евразияның урман зонаһында, урманлы далала, өлөшләтә таулы ерҙәрҙәренән алып Көнсығыш Себергә тиклем киң таралған. Ул иң гәҙәти ҡош.

Яҙ башында уҡ ҡайта, 1-2 аҙнанан йырлай башлай һәм июль аҙағына тиклем моңон түгә. Парлашып йәшәй. Ояһы ерҙә, ҡыуаҡ, түңгәк, бейек үлән араһында, ҡайһы берҙә асыҡ урында ла. Үләнгә йылҡы малы ялын ҡушып үреп оя яһай, эсенә йөн түшәй. 4-6 йомортҡа һала. Бәпкәләр сыҡҡас, бигерәк һаҡка әйләнә. Нимәнәндер ҡурҡҡан сағында ағас ботағына ҡуна, ҡойроғон болғап, олон буйлап йөрөй, ағастан ағасҡа оса.

Август аҙағында тупланып, сентябрҙә йылы яҡҡа осалар. Ҙур төркөмләп тә, яңғыҙ ҙа осоуҙары ихтимал. Африка, Һиндостанда ҡышлай. Яҙын элекке урындарын әйләнеп ҡайта.

### Һаҙ деүете

**(Луговой конек)**



Республикала һирәк осрай. Яҙын иртә ҡайта, ҡайһы саҡта ҡар иреп тә бөтмәгән була.

Урман деүетенә оҡшаған, бары тик түше ҡыҙғылт түгел, аяҡтары ҡерән, кәүҙәһенең өҫкө өлөшө ҡараһыу-көгөлйем.

Еүеш яландарҙа, һаҙлыҡтарҙа йәшәй.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

✓ *Ҡаҙансы, Ҡарткиҫәк, Ҡашҡа, Үрмияз, Күбияз, Петропавловка, Упҡанкүл, Солтанбәк ауылдары ағинәйҙәре үҙҙәренең ырыу милли кейемен тергеҙеү буйынса һоҡланғыс эш башҡарҙы.*



АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# ХАЛҠЫБЫҘҘЫҢ...

## рухи көсөн ишәйтеүгә өлөш индереүселәр



**Эшмәкәрлеге ата-бабалар ғилеменә һәм быуындар көсөнә таянып ойошторолған йәмәғәт ойошмаһы ул "Ағинәй". Шуға ла ағинәйлек сифаттарына эйә булырға ынтылған оло һәм урта быуын ҡатын-ҡыҙҙары йыйылған урында ошо ғилем телгә килә һәм ҡатнашыусыларҙы алыҫ тарих төпкөлөндәге көнитмешкә, халҡыбыҙҙың аҫыл асылына сәйәхәт ҡылдыра.**

Был юлы ла шулай булды: Асҡын район китапханаһында халыҡ йолалары, милли рух һаҡсылары йыйылып, ғәжәп бер мөхит барлыҡҡа килтерҙе. Берҙән, милли кейемдәрҙәге ағинәйҙәрҙең бер ни менән сағыштырғыһыҙ матурлығы, йөҙ яҡтылығы күҙҙең яуын алһа, уларҙың үҙ-ара тыйнаҡ, ипле, ихлас аралашыуы һәр кемгә, уларҙы ситтән күҙәтеүселәргә лә, күсеп, күңел һиллеге тыуҙырҙы. Башҡа саралар-тамашаларҙағы кеүек, шау-шыу ҙа, ярһып-ҡысҡырып гәпләшеүҙәр ҙә юҡ. Буш һүҙҙәр ҙә яңғыраманы. Сараға килгән ҡунаҡтар ҙа ошо тулҡынға көйләнде. Район хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Эльза Әхмәтгәрәева һүҙ башлап, ағинәйҙәр араһында булырға, улар үткәргән сараларҙа ҡатнашырға атлығып тороуы тураһында белдерҙе. Районда үткән бар сараларҙы күтәрмәләп, дөйөм мөхиткә йәм биргәне өсөн һәр ағинәйға ихлас рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе.

Республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева ла Эльза Ҡәҙим ҡыҙының сығышын тулыландырып, республиканың был төбәгендә айырыуса дәрт, фиҙаҡәрлек менән танылған Асҡын ағинәйҙәренә оло баһаһын, һоҡланыуын еткерҙе: "Бөгөн ағинәй - тик үҙ ғаиләһе сиктәрендә генә йәшәүсе, уңайлы мөхит булдырып, үҙ йортонда ғына бикләнеп ултырыусы түгел, ул - йәмғиәтебеҙҙең иң әүҙем ағзаһы ла. Бөгөн Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы улandaрыбыҙға гуманитар ярҙам йыйыусы волонтерҙарҙың тәүге сафында ла һеҙ йөрөйһөгөҙ бит. Һеҙ ошо тынғыһыҙ эшмәкәрлегегеҙ менән башҡаларға донъябыҙға ишерелгән ауырлыҡты, ҡайғыларҙы күтәреү, кисереү өлгөһө лә булып тораһығыҙ. Бөгөн бөтә донъя Ринат Рамаҙанов һәм Руслан Шәмсетдиновтың "Урал батыр" дастанын тыңлай, уның серле ишараһына төшөнөргә тырыша. Беҙҙең дә телдә был эпос һүҙҙәре. Иғтибар итегеҙ: Урал батырға ярҙам кәрәк саҡта тоғролоҡ һәм рухи таяныс символы булып Күктән Һомай төшөрөлгән. Һомай боронғо белемдәр һәм йолалар һаҡсыһы, паҡлыҡ һәм әсәлек символы. Ул Уралға ҡара көстәр менән көрәшендә ярҙам итә һәм уны изге юлға йүнәлтә. Тарих ҡабатлана: шулай уҡ бөгөн беҙҙең ир-егеттәр өсөн ауыр осор, һәм ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ уларға ярҙам итеү өсөн бар көсөн һала. Ошо бар эштәрҙең алғы сафында һеҙ, ағинәйҙәр булыуы менән ғорурланам. Рәхмәт һеҙгә!" - тине Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы.

"Һүҙҙәрегеҙгә, баһаларығыҙға - ҡеүәт!" тине Асҡын районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Йәриә Ялалетдинова артабан һүҙ алып һәм башҡарған эштәренә бер аҙ байҡау яһаны: "Районда ошо йәмәғәт ойошмаһы тирәләй тупланып, һәр битараф булмаған, иманлы, белемле, кәсепле ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға "Ағинәй" статусы йөкмәтеп эш башлауға тиҫтә йылдан ашыу ваҡыт үткән. Ошо ваҡыт эсендә районың бөтә ауылдарында ла ағинәйҙәр бер нисә уртаҡ идея менән берләште: ата-бабаларыбыҙҙың йолаларын һаҡлау, үҙебеҙҙең балыҡсы, ҡыр-танып, һыу-таныл, унлар ырыуҙарына хас милли кейемдәребеҙҙе тергеҙеү, йәш быуынды тәрбиәләү, уларҙа туған телгә, тарихыбыҙға ҡыҙыҡһыныу уятыу, иң мөһиме - яуҙа йөрөгән ететтәребеҙҙе хәстәрләп, уларға кәрәкле кейемдәр, аш-һыу әҙерләү, районан оҙатылған гуманитар ярҙамды йыйыуҙа ҡатнашыу. Ҡаҙансы, Ҡарткиҫәк, Ҡашҡа, Үрмияз, Күбияз, Петропавловка, Упҡанкүл, Солтанбәк ауылдары ағинәйҙәре үҙҙәренең ырыу милли кейемен тергеҙеү буйынса һоҡланғыс эш башҡарҙы һәм хәҙер улар районда үткән бар сараларҙы йәмләп кенә ҡалмай, балаларға, йәштәргә үҙ асылында булыуҙың баһаһы, ҡиммәте өлгөһөн дә күрһәтә. Иҫке Ҡаҙансы ауылынан ағинәйебеҙ Мәмдүнә Зарипова бынан йөҙ йылдан ашыу элек өләсәһе кейгән күлдәкте, ике йөҙ йылдан ашыу ҡарт өләсәһе кейгән камзулды тергеҙеп күрһәтеп, милли кейем - ул беҙҙең тамырҙарыбыҙ, беҙҙең тарихыбыҙ, милли мәҙәниәтебеҙҙең айырылғыһыҙ бер өлөшө икәнен тағы бер тапҡыр раҫлап ҡуйҙы. Күбияздар иһә бынан 80, 100 йыл элек өләсәләре кейгән тамбур сигеүле биш нәсел алъяпҡыстарын тергеҙҙе. Районда тағы бындай осраҡтар булыуы ҡыуаныслы. Сөнки милли кейем - тарихи хәтерҙе тергеҙеүҙең иң һөҙөмтәле ысулы бит..."

Осрашыу һуңында "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының үҙ эшенә тоғро 13 ҡатын-ҡыҙҙан торған яңы составы һайланды. Ойошманы артабан Архангел районы ҡыҙы, Кубияз ауылы килене Зәкирә Хәтмулла ҡыҙы Ғилметдинова етәкләйәсәк.

Күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшеп, ҡайғы-шатлыҡтарҙы бүлешеп, шиғырҙар, йырҙар тыңлап, күңелде бушатып алдыҡ ағинәйҙәрҙең был йыйынында ла. Ихлас аралашыуҙан рухланған ҡатын-ҡыҙҙар, ишеткәндәрен һәм күргәндәрен тормошҡа ашырыу теләге менән үҙ ауылдарына таралды. Шуныһы ҡыуаныслы: боронғолоҡто һаҡлауға, халҡыбыҙҙың рухи байлығын һәм көсөн ишәйтеүгә өлөш индереүсе кешеләр бар беҙҙең Асҡын ерендә лә. Улар, һис шикһеҙ, ағинәйҙәр!

**Фәйрүзә ЙОНОСОВА.**
**Асҡын районы.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Ноябрь (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 (10) дүшәмбе | 7:28 | 9:16 | 13:30 | 15:07 | 16:54 | 18:42 |
| 2 (11) шишәмбе | 7:30 | 9:17 | 13:30 | 15:06 | 16:53 | 18:41 |
| 3 (12) шаршамбы | 7:31 | 9:19 | 13:30 | 15:05 | 16:53 | 18:40 |
| 4 (14) кесе йома | 7:32 | 9:20 | 13:30 | 15:05 | 16:52 | 18:40 |
| 5 (15) йома | 7:34 | 9:22 | 13:30 | 15:04 | 16:52 | 18:39 |
| 6 (16) шәмбе | 7:35 | 9:23 | 13:30 | 15:04 | 16:51 | 18:39 |
| 7 (17) йәкшәмбе | 7:36 | 9:24 | 13:30 | 15:03 | 16:51 | 18:39 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 ноябрь "Ҡыҙыл паша**" (Н.Асанбаев, А.Абушахманов). 12+

**30 ноябрь "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова, А. Абушахманов, инсц. А. Ишбулдина), драма. 16+

**3 декабрь ""Әҙләнем, бәғерем, һине"** (Т.Миңнуллин, А.Нәҙерғолов), мелодрама. 12+

**4 декабрь "Ай тотолған төндә"** (М.Кәрим, А.Абушахманов), драма. 12+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**28 ноябрь "Спасите Леньку!"** (М. Икрамова, М. Күлбаев), драма. 11:00. 12+

**28 ноябрь "Йәшәгән, ти..."** (М. Ладо, Р. Хакимов), драмеди. 19:00. 16+

**29 ноябрь "Рассказы Альфии"** (М. Кәрим, М.Күлбаев). 12:00. 6+

**29 ноябрь "Гарнир по-французски"**, (М. Камолетти, А. Шрайнер), комедия. 18:00. 16+

**30 ноябрь "Спасите Леньку!"** (М. Икрамова, М. Күлбаев), драма. 12:00. 12+

**30 ноябрь "Силсәүит, Алдар һәм Адвокат"** (М.Кәрим, Р. Хәкимов), драма. 18:00. 12+

**2 декабрь "Холодное сердце"** (В. Гауф, М. Күлбаев), әкиәт. 11:00. 6+

**3 декабрь "Играем Пушкина: Царевна-Лебедь"** (А. Пушкин, О. Мусина), әкиәт. 11:00. 6+

**4 декабрь "Планета"** (Г. Гришковец, М. Күлбаев), пьеса. 19:00. 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**28 ноябрь "Нимә ул Яңы йыл?"** (Д. Щербакова), музыкаль спектакль. 18:00. 0+

**29 ноябрь "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен). 12:00 һәм 15:00. 0+

**30 декабрь "Красная шапочка"** (Д. Гараева).12:00 һәм 15:00. 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**30 ноябрь "Етенсе Бөтә Рәсәй орган көнө**" Эльвира Ямалова һәм Владислав Мортазиндың бөтә ғаилә өсөн концерты. 6+

**2 декабрь** Сибай дәүләт концерт-театр берекмәһе артистарының ҙур концерты. 6+

**3 декабрь Евгений Михайловтың** (Ҡаҙан) фортепиано концерты. 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**28 ноябрь "Кисер мине, әсәй!"** (Р. Батулла), моңһоу комедия. 12+

**29 ноябрь "Алтын себеш"** (В. Орлов), музыкаль әкиәт. 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**28 һәм 29 ноябрь "Рядовойҙар"** (А. Дударев). 12+

**30 ноябрь "Һәр ваҡыт булһын әсәй!"** филармония артистары концеры. 12:00. 0+

**30 ноябрь "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр"** (В.Гуркин, М. Күлбаев), комедия. 16:00. 12+

### А.Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**21 ноябрь "Әстәғәфриулла!"** (Н.Ғәйетбай), комедия. 16+

**26 һәм 27 ноябрь "Ҡанатлы генерал**" (Х.Ирғәлин, Д. Нурғәлин), драма. 12+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**28 ноябрь Алина Вәхитова** һәм **Ян Лираның** концерты. 6+

**3 декабрь "Доктор Шлягер"** төркөмөнөң В. Добрыниндың 80 йәшенә ҡарата концерты. 6+

**4 декабрь "Етегән"** төркөмө концерты. 12+

### БР Милли музейы

**28 ноябрь "Әсәйҙәр көнө"** музей акцияһы. 11:00 - 17:00. 0+

**29 ноябрь "Бал ҡортонда ҡунаҡта"** мәҙәни-ағартыу сараһы. 15:00. 6+

***Бына берҙән-бер көндө ҡалаға көслө дауыл ябырылған һәм ҡаланың яртыһын ер менән тигеҙләгән. Баяғы бай ҙа зыян күргән. Хәҙер инде ул ярлыға әйләнгән. Аҡса эшләү юлдарын белмәгәс, хәйер һорарға мәжбүр булған.***

*Ә ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?*

# ӨФӨЛӘ БАР БЕР КАНАЛ...




**Күптәр өсөн телевидение - йәшәү рәүешенең айырылғыһыҙ бер өлөшө, йәмәғәтселек аңын формалаштырыу буйынса иң һөҙөмтәле төп мәғлүмәт сығанаҡтарының береһе. Һүҙебеҙ "Бөтә Өфө" ("Вся Уфа") ҡала телеканалы тураһында.**

Телеканал 1999 йылда алып өфөләр менән бергә. Уны Өфөлә генә түгел, шулай уҡ Ишембайҙа, Нефтекамала, Октябрьскийҙа, Салауатта, Стәрлетамаҡта һәм Башҡортостандың башҡа ҙур ҡалаларында ла ҡарай алалар. 2019 йылдың 5 сентябренән тапшырыуҙар HD форматында эфирға сыға. "Бөтә Өфө" һөйләй һәм күрһәтә", "Аҙна йомғаҡтары" мәғлүмәт-аналитика программалары ҡала тормошон тулыһынса һәм һәр яҡлап яҡтырта. "Өфөнө яратыуҙың 450 сәбәбе" проекты - республика баш ҡалаһының иң матур һәм иҫтәлекле, шулай уҡ уникаль урындары, арт-объекттары һәм билдәле шәхестәре тураһында һөйләй. "Мөхәббәтең сиге юҡ" тапшырыуы Өфөлә яратҡан кешеһен тапҡан һәм ныҡлы ғаиләлә ҡорған төрлө милләт кешеләренә бағышлана. Ә "Өфө хәбәрҙар" программаһында экспертар сәйәсәт, фән, сәнғәт, тарих өлкәһенә ҡағылышлы мәсьәләләр буйынса фекер алыша. Әлбиттә, ваҡытты күңелле үткәреү өсөн дә урын бар "Бөтә Өфө"лә. "Баш ҡала" күңел асыу шоуы, йәш башҡарыусыларҙың "Өфө хиты", автомобилселәр өсөн "Өфө тәгәрмәстәрҙә!", диндәр тарихы тураһында "Изге хәҡиҡәт" тапшырыуҙары телевизор ҡараусылар араһында бик яратып ҡабул ителә. 2004 йылда Өфө ҡала округы хакимиәте һәм "Бөтә Өфө" телеканалы "Беҙҙең заман геройы" телевизион йәмәғәт премияһын булдырҙы. Ул йәмғиәт мәнфәғәтен үҙенекенән өҫтөн ҡуйып изгелек ҡылған, ҡаһарманлыҡ күрһәткән кешеләргә тапшырыла. Каналда "Бөтә Өфө" медиамәктәбе эшләй. Ул телевизор ҡараусыға экрандың икенсе яғында үҙен һынап ҡарарға, ораторлыҡ оҫталығын үҙләштерергә, үҙенә ышаныһын арттырырға һәм яңы һөнәр үҙләштерергә мөмкинлек бирә.

"Өфө һәм Башҡортостан халҡы өсөн ышаныслы көнүҙәк мәғлүмәт сығанағы булыу - беҙҙең төп тәғәйенләнеш. "Бөтә Өфө" Медиадом" муниципаль бюджет учреждениеһы - киң мәғлүмәт сараһы ғына түгел, ул ҡалабыҙ тормошоноң ҙур бер өлөшө. Мәғлүмәт порталдары һәм ҡағыҙ баҫмаларыбыҙ 100 меңдән ашыу кешене берләштергән аудиторияны үҙ эсенә ала. Иҡтисад, һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, торлаҡ-коммуналь хужалығы, тарих, мәҙәниәт кеүек төп темалар даими яҡтыртыла", - ти ойошма директоры Юлия Йомагуена.

Әйткәндәй, "Бөтә Өфө" Медиадом" муниципаль бюджет учреждениеһы составына "Бөтә Өфө" телеканалынан тыш, "Киске Өфө", "Вечерняя Уфа", "Уфимские ведомости" гәзиттәре һәм "Уфа" журналы ла инә. Беҙ - бергә!

**Рәзил ШӘМСЕТДИНОВ әҙерләне.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КЕШЕНЕ ХУР ИТЕҮ...

## уға хәйер биреүгә ҡарағанда ауырыраҡ

Атаһын үлтергәнде уғлан онотмаҫ, ҡойроғон киҫкәнде йылан онотмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡыллы кеше йәшәгән. Кистәрен уның өйөнә таныштары, таныш булмағандар йыйылған, уның аҡыллы риүәйәттәрен тыңлаған, фәһем алған, һығымталар яһаған. Был йыйындар өсөн ул кешеләрҙән бер тин дә аҡса алмаған. Иртән иһә был кеше ғаиләһен туйҙырырлыҡ аҡса эшләү өсөн баҙар майҙанына юлланған һәм битлек кейеп, төрлө тамашалар күрһәткән, ҡыҙыҡ-мыҙыҡтар һөйләгән.**

**Берҙән-бер көндө был аҡыл эйәһенең өйөнә бер бай килгән. Уның риүәйәттәрен тыңлап, тәрән уйға батып ултырған, тормош мәғәнәһе тураһында уйланған. Үҙенең йәшәү рәүешендә нимәләрҙелер үҙгәртергә кәрәклеге тураһында һығымта яһап, ҡайтып киткән. Ләкин бер нисә көндән ул да баяғы баҙар майҙанына һуғылған һәм майҙан уртаһында бер битлекле кешенең бар халыҡты ауыҙына ҡаратып һөйләгәненә ҡолаҡ һалған. Битлекле кешенең байҙарҙан әсе көлгән бер риүәйәт һөйләп торған сағы булған. Бай ҡаты асыуланып, халыҡты йырып майҙан уртаһына сыҡҡан да, битлекле кешене төртөп ебәргән. Кеше йығылып киткән, битлеге бер ситкә осҡан. Бай уны таныған һәм:**

**- Был кеше оятһыҙ, ике йөҙлө! - тип ҡысҡырған. - Кистәрен ул аҡыл эйәһе булып ҡыланып, аҡыллы һүҙҙәр һөйләй, ә иртән әртискә әйләнеп, аҡса йыя. Уның ҡылығында аҡыл бармы?**

**Баҙар майҙанындағы халыҡ ризаһыҙлыҡ белдереп, геү килгән. Был хурлыҡлы ваҡиғанан һуң кеше ҡабат баҙар майҙанына аяҡ та баҫмаған. Кистәрен дә уның өйөнә килеүсе булмаған.**

**Бына берҙән-бер көндө ҡалаға көслө дауыл ябырылған һәм ҡаланың яртыһын ер менән тигеҙләгән. Баяғы бай ҙа зыян күргән. Хәҙер инде ул ярлыға әйләнгән. Аҡса эшләү юлдарын белмәгәс, хәйер һорарға мәжбүр булған.**

**Бер саҡ хәйер өмөт итеп алға һоноп ултырған элекке байҙың ҡулына кемдер икмәк киҫәге һалған. Хәйер һораусы рәхмәт уҡып, күҙҙәрен күтәреп ҡараһа, алдында теге аҡыл өләшеүсе кеше баҫып торғанын күргән.**

**- Мин бит һине баҙар майҙанында хурлыҡҡа ҡалдырғайным...- тигән бай ғәйепле тоҫ менән.**

**- Кешене хурлыҡҡа ҡалдырыу уға хәйер биреүгә ҡарағанда ауырыраҡ шул, - тигән кеше. - Теге саҡта һин минең хәлемде аңлап, миңә хәйер бирһәң, мин баҙарҙа сығыш яһамаҫ, ә аҡыл таратып ҡына ултырыр инем. Ә һин гонаһлыға әйләнмәҫ һәм бөгөн шул гонаһың өсөн был язаға тарымаҫ инең..."**

*ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА*

# БЫРҒЫ ЮЛДАН ЙӨРӨМӘ

**Боронғо ҡаланың урамдары үҙе ҡыҫҡа, үҙе бырғы. Йорттар быҡҡым һалынған. Ишек-тәҙрәләр ҙә бырғы ғына, тәпәш. Уларға бүрек тә ҡағылмаған. Археологик ҡомартҡы күренештәрен тасуирлау башҡорт теленең һирәк ҡулланылған һүҙҙәрен үҙләштереүгә лә ярҙам итер.**

**Бүрек.** Бүректең баш кейеме икәнен кем белмәҫ? Ә бына диалектта тәҙрә йәки ишек ҡашы шулай атала. *Тәҙрәнең бүреген нығытыу. Ишек бүреге биҙәп эшләнгән.*

**Бырғы.** "Тар" мәғәнәһендә йөрөгән һүҙ булыр "бырғы". *Бырғы кейем. Бырғы юлдан йөрөү.*

**Бысма.** "Бысма" "ялҡытҡыс" тигән һүҙгә иш. *Бысма хәбәр. Бысма томан баҫҡанда бысма уйға батма.*

**Быҡҡым.** Диалектта "ҡуйы" тигәнгә тура килә. *Ҡыҙҙың сәсе бик быҡҡым. Түтәлдә сәскә быҡҡым үҫкән.*

**Бүре уты.** Бүре ыуы. Сабыртҡы тураһында ҡайһы бер урында шулай тиҙәр. *Тәнгә бүре уты ҡалҡҡан. Бүре ыуын халыҡ бик оҫта дауалаған.*

**Шулай итеп, туған телебеҙҙең быҡҡым баҡсаһынан бер нисә генә һүҙен һайлап ҡабатлау һис бысма түгел.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

*СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ*

# ҮҘ-ҮҘЕҢДЕ ҮҘГӘРТЕҮ ЕҢЕЛМЕ?



**Гәзиттең 42-се һанында фәлсәфәүи генә "Үҙ-үҙеңде үҙгәртеү еңелме?" - тигән һорауға яуап баҫылғайны. Уны уҡып сыҡҡас, мин дә, автор тәҡдим иткәнсә, ҡағыҙ битен икегә бүлеп, үҙемде тикшереп ҡарарға булдым.**

Бына алдымда ҡағыҙ, ҡулымда ҡәләм... Ә быға тиклем башта ҡайнаған уйҙар әллә ҡайҙа булған. Эште иң тәүҙә үҙ-үҙеңде дөрөҫ итеп баһаларға өйрәнеүҙән башларға кәрәк булып сыҡты. Сөнки кеше ҡайһы саҡта үҙенә ҡарата объектив булмаҫҡа ла мөмкин. Был эш үҙеңдең генә ҡулыңдан килмәгәнен һиҙһәң, яҡындарыңа, йәки психолог ярҙамына мөрәжәғәт итеү зыян булмаҫ. Арыу ғына ваҡыт ултыра торғас, үҙемдең бер-нисә оҡшап етмәгән һыҙатымды айырып алдым шулай ҙа.

Үҙемде үтә йомшаҡ кеше тип иҫәпләйем. Саҡ ҡына ҡаты бәрелһәләр, берәй ҡырын һүҙ әйтһәләр, онота алмай, ғәйепте үҙемдән эҙләп йөрөй торған ҡылығым бар. Хәҙерге заманда ҡалын тиреле булмау бик ауырға тура килә шул.

Икенсе проблемам шул йомшаҡлығым арҡаһында тыуа ла инде. "Юҡ" тип әйтә белмәйем. Ваҡытында үҙемдең сиктәремде билдәләй алмау, ҡайһы саҡта зыяны үҙемә булырын белә тороп та, кешегә ярҙамға ашығыу ҡамасаулай. Әлбиттә, бөтөнләй ҡаты бәғерле булыу, тик үҙеңде генә ҡайғыртып йәшәү ҙә килешкән эш түгел, һәр нимәлә сама кәрәк.

Өсөнсө кире сифатым - ауыр саҡтарҙа үҙ-үҙемә йомолоу. Тормошта тыуған ауырлыҡтарҙы хәл итмәйенсә, үҙ эсемдә ойотоп йөрөү күптән килгән ғәҙәтем, унан арынырға теләр инем. Ҡайһы саҡта яҡын кешеңә мөрәжәғәт итеү, уртаға һалып һөйләшеү күпкә хәйерлерәк булырын аҡыл менән аңлаһаң да, тотоп ҡына тормошҡа ашырыр өсөн арыу көс кәрәк.

Кеше кирегә "һә" тигәнсә үҙгәрергә мөмкин, ә үҙеңде тап ыңғай яҡҡа үҙгәртеү, ай-һай, еңелдәрҙән түгел... Был эш рух ныҡлығы, дисциплина талап итә. Һәм, әлбиттә, ваҡыт. Ни сама ваҡыт кәрәк булыры кешенең тик үҙенән генә тора.

**Алһыу ИРҒӘЛИНА.**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 27.11.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 27.11.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 28.11.2025 й.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2707
Заказ - 2206



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.